✓ *Ашҡан бер ғалим сыҡһа, яманлайбыҙ,*
*Мәжлесте ғәйбәт менән тамамлайбыҙ.*
*Эшебеҙ - йә мыҫҡыллау, йәки хурлау,*
*Үҙебеҙҙе һәр ғәйептән аманлайбыҙ.*

*Мифтахетдин АҠМУЛЛА.*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға Һатыуҙа хаҡы ирекле

www.kiskeufa.ru

21 - 27 НОЯБРЬ (ҠЫРПЫҒАЙ) 2009 ЙЫЛ

№47 (361)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Дебет шәл ҡайта,** шәл һуғыу шөғөлө тергеҙелә **5**



**Рәсәйлемен, әммә башҡортмон да,** йәки Гражданлыҡтан милләт яһап буламы? **8-9**



**Ҡорбан салайыҡ,** сауаптарын алайыҡ! **12**



**Егет кенә саҡта әрмеләрҙә** хеҙмәт итеү тигән дә йола бар... **15**



**ТВ программа** **14**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Рәсәй Федерацияһы Президентының Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтендә федерализм хаҡында айырым һүҙ әйтелмәне. Быны нисек аңларға була?*

*Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА, Рәсәй Фәндәр Академияһының Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры:*

-Мөрәжәғәттә ил башлығы "ҡуйылған маҡсаттарға өлгәшеү өсөн эште иң баштан - мәктәптә яңы шәхесте тәрбиәләүҙән башларға кәрәк", - ти. Шул уҡ ваҡытта, Мөрәжәғәттән сығып фекер йөрөткәндә, "беҙҙең яңы мәктәптә" Рәсәй халыҡтарының рухи үҫешенә, традицияларына, туған телдәренә бөтөнләй урын булмаясаҡ. Минеңсә, "юғары технологиялы, конкурентлы донъяла йәшәр өсөн әҙер булған шәхесте тәрбиәләү" бурысы бында 60-80-се йылдарҙа суйын ҡаҙандар аша үткән прагматик, үҙ тамырҙарынан һәм рухынан айырылған американы тәрбиәләүҙе хәтерләтә. Шуны ла әйтергә кәрәк, АҠШ хәҙер "суйын ҡаҙан" теорияһынан баш тартып, мәҙәниәттәр һәм телдәр төрлөлөгөн беренсе урынға ҡуя. Беҙҙең күп милләтле Рәсәйҙә лә был хаҡта уйланырға ваҡыт.

Мәҙәниәтте үҫтереүҙә, бигерәк тә провинцияларҙа, ҡеүәтле инфраструктура төҙөү зарурлығын билдәләп, Президент мәсьәләне дөрөҫ ҡуя. Әммә яңы информацион технологиялар менән мәктәптәргә, ауыл клубтарына ватаныбыҙҙың классик, милли, этник мәҙәниәт өлгөләре килерме икән?

"Беҙ илебеҙҙең күп төрлө берҙәм мәҙәни киңлеген, Рәсәй халыҡтарының бай милли традицияларын һаҡларға ярҙам итергә тейешбеҙ һәм шул уҡ ваҡытта илебеҙҙең берҙәмлеген һәм халыҡ-ара аралашыуын тәьмин итеүсе рус телен уҡытыу программаларын бөтә яҡтан үҫтерергә һәм камиллаштырырға тейешбеҙ", - тиелә Мөрәжәғәттә. Әммә бөгөн Рәсәйҙең ерле халыҡ вәкилдәренең 50 проценттан ашыуы (милли республикаларҙа 30 процентҡа тиклем) туған телен белмәгән саҡта, туған телдәрҙе уҡытыуҙы ла камиллаштырыу мәсьәләһе актуаль булып ҡала килә. Мәҫәлән, Башҡортостанда башҡорттарҙы башҡорт телендә уҡытыу мәсьәләһе рус телен уҡытыуға ҡарағанда күпкә ҡатмарлы. Минең ҡарашса, модернизацияланған, аҡыллы Рәсәйҙә һәр бер кеше, һәр бер этнос үҙен уңайлы тойорға тейеш. Конкурентҡа һәләтле булыу артынан ҡыуып, минең балаларым һәм ейәндәрем халҡымдың туған телен, мәҙәниәтен һәм традицияларын юғалтып ҡуймаҫмы? Был мәсьәлә миндә тәрән борсолоу тыуҙыра.

*Кәмәр ИШБУЛДИНА, уҡытыусы:*

-Модернизация яңылыҡ индереү, яңыса ҡороу, тигәнде аңлата. Рәсәй киләсәктә ошо юлды һайларға, илде яңыса үҙгәртеп ҡорорға ынтыла, донъя капиталы өсөн сеймал базаһы булыуҙан туҡтарға ынтыла икән, бик хуп. Шул уҡ ваҡытта ошо маҡсатҡа өлгәшер өсөн йәштәрҙе һәр бер нәмәлә файҙа ғына күрергә теләгән прагматик итеп тәрбиәләргә ынтылһаҡ, рухи көрсөккә килеп төртөләрөбөҙ көн кеүек асыҡ. Бер мәртәбә совет осоронда һәр яҡтан камил үҫешкән совет кешеһе тәрбиәләп ҡараныҡ бит инде. Мөрәжәғәттә федерализм хаҡында фекерҙең айырым әйтелмәүе көн үҙәгенә унитаризм мәсьәләһе ҡуйылыуы хаҡында һөйләй түгелме? Һаман да Америкаға ҡарап эш итәбеҙ. Ниңә, әйтәйек, Японияға ҡарамайбыҙ? Унда ла модернизация ярҙамында илде күтәрҙеләр, әммә унда рухи үҫеш, традицияларҙы һаҡлау тәүгеһе менән бер ҡатар ҡуйылды. Хатта сәғәт пояستارын кәметеүҙә лә шул уҡ унитарлыҡҡа ынтылыу ята. Белмәйем, быны менән генә күпме экономия яһай алырҙар ине икән? Дөрөҫөн әйткәндә, был дөйә муйынынан ҡырын эш. Беҙ хәҙер Мәскәүсә йәшәйбеҙ, тип, ҡояш ҡалҡҡанда йоҡлап ятырға, иртә таңда йә эңерҙә эштә булырға тейешбеҙ буламы инде...

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# САҠЫРЫУҘАР ЯҢЫРА ЛА УЛ...

## уға яңылары өҫтәлә тора




**Һуңғы йылдарҙа баш ҡала урамдарында йәмғиәтебеҙҙә булған етешһеҙлектәрҙән арынырға һәм яҡшылыҡҡа, матурлыҡҡа ынтылыу тойғоһо уятыуға йүнәлтелгән улар. Уларҙың ҡала урамдарын яулай барыуына, моғайын, инде бишенсе тапҡыр үткәрелгән "Ҡала мөхите" социаль реклама фестивале лә булышлыҡ итәлер. Фестивалдең девизы 2009 йылдың Рәсәйҙә - Йәштәр, Башҡортостанда Йәштәр инициативаларын яҡлау һәм үҫтереү йылы тип иғлан ителеүенә ауаздаш булып, "Яңы быуын - яңы идеялар" тип аталды. Кешеләрҙең кире ғәҙәттәре, ололарға мөнәсәбәт, юл ҡағиҙәләре, тәбиғәтте һаҡлау кеүек темаларға мөрәжәғәт итеү был фестивалдә ҡатнашҡан эштәрҙә лә актуаль булып ҡалды.**

**(Дауамы 4-се биттә).**

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# ХАЛҠЫБЫҘҒА - ТЕРЕҺЫУ

**Республикабыҙҙың барса баҫмаларына ла иғтибарлыбыҙ, ихтирамлыбыҙ. Беҙ өйөбөҙгә башҡорт телендә сыҡҡан бөтөн гәзит-журналдарҙы алдырыу менән бер рәттән, рус һәм татар телендә сыҡҡан баҫмаларҙы ла уҡып барабыҙ. Һәр баҫманың үҙ йөҙө, үҙ һүҙе бар. Республикала сыҡҡан баҫмаларҙы матур-матур сәскәләрҙән хасил гөлләмәгә тиңләп булыр ине. Шулар араһында мине үҙенә, әйтерһең, магнит менән тартып торғандайы - "Киске Өфө". Был баҫма айырым бер арбау, ылыҡтырыу көсөнә эйә. Һәр һанын һағынып, көтөп алам уның. Был баҫма минең милләтем, халҡым, телем, ерем гәмен, яҙмышымды, киләсәгемде хәстәрләүсе. Уның үҙен Башҡортостандың ете мөғжизәһенә тиңләргә булыр ине.**

Ҡайҙа барһам да таныштарымды ошо гәзиткә яҙылырға өндәйем. Яңыраҡ ҡына ла бер нисә танышым шылтыратып, рәхмәтен әйтте

"Һәр мәҡәлә фәһемле, аңлайышлы, әҙәп-тәртипкә өйрәтә, йәшәйеш серен аса. Элек "Киске Өфө"нө уҡымайынса, нисек йәшәгәнмен", - тиҙәр. Был һүҙҙәр баҫмаға ҡарата халыҡтың оло баһаһы. Бөгөнгө көндә халыҡ дин темаһын, суфыйсылыҡты, дини шәхестәрҙе әүҙем күтәреп сығыуы менән дә ҡәҙерле. Бының менән ул халыҡҡа тағы нығыраҡ яҡынайҙы. Кешене кеше иткән - рухи ҡиммәт. Рухи кимәл булмаһа, кеше менән хайуан араһында айырма ла булмаҫ ине. Артур Миллер һүҙҙәренә ҡушылам, "Яҡшы матбуғат баҫмаһы - ул милләттең үҙ-үҙе менән һөйләшеүе". "Киске Өфө" башҡорт халҡының яҡын дуҫы, кәңәшсеһе, серҙәше, идеологы. Халыҡтың үҙе кеүек ябай ҙа ул, бөйөк тә. Быуаттар аҡылын бергә туплап, уны терәһыуға әйләндереп, бөлөп барған еребеҙгә бөркөүсе.

**Лира ЯҠШЫБАЕВА, яҙыусы.**

ИШАРА

**Гәзитебеҙҙә Әҙһәм Исҡужин исемендәге ҡурайсы-йыраусылар конкурсы үтеүе һәм "Әҙһәм ҡурайы" тип аталған китаптың исем туйы булыуы тураһындағы мәҡәләне уҡып хисләндем.**

# ДОНЪЯНАН АРТТА ҠАЛЫНДЫ,

## йәки Пенсионерҙар СМС-хәбәр алыша аламы?

Әҙһәм ағай Исҡужин беҙҙең 1-се республика мәктәп-интернатҡа мин уҡыуымды тамамлап киткән йылдарҙа эшкә килгәйне. Ул уҡыу йортон тамамлаған күп уҡыусылар кеүек, минең дә каникул айҙарында был мәктәпкә инеп сыҡмай, беҙҙән кесе уҡыусыларҙы күрмәй киткәнем булманы. Шул йылдарҙа баһадир кәүҙәле тәрбиәсе-уҡытыусы Әҙһәм ағайҙы күреп: "Эх, беҙгә ундай һоҡландырғыс ағай эләкмәне", - тип көнләшеп тә ҡуя инем (Ниндәй ҡыҙыҡай батыр ағайы булыуы хаҡында хыялланмай инде?)

"Киске Өфө"ләге мәҡәләлә "Әҙһәм ҡурайы" исемле китапҡа ағай башҡарыуындағы ҡурай моңдарынан компакт-диск ҡушып бирелеүе тураһында ла яҙылған. Шуны уҡыным да, күнелһеҙләндем дә киттем. Ҡапыл ғына Ш. Бабич шиғыры хәтерҙә ҡалҡып сыҡты:

Гөрләшеп дәртле минуттар,
Остолар моңдар менән;
Мин төшөп киттем, төшөп киттем,
Төшөп киттем түбән.
Остолар моңдар һауаға,
Йырлашып ҡаҙҙар менән.
Мин тороп ҡалдым көйөп, әрнеп,
Күнел һыҙлауы менән...

Ш. Бабичтың һыҙланған мәлдәрендә яҙған шиғыры нинә минең дә күңелһеҙләнгән мәлдә иҫкә төштө әле? Дәртле минуттар, йәшлек осто ла китте, ә беҙ донъянан артта тороп ҡалдыҡ, тип әсенеү кисерелде шул был мәлдә. Бына "Әҙһәм ҡурайы" китабына ҡушымта булып инген компакт-дискыны тыңлар сарам да юҡ. Ул ғына түгел әле: "Байыҡ" бейеү конкурсы уҙғарыламы, "Гәлсәр һандуғас"мы, гел генә, СМС буйынса тауыш биреғеҙ, ти ҙә хәбәр итәләр. Шул рәүешле, оло йәштәгеләргә тауыш биреүгә көртә ҡуйыла. Оло йәштәгеләрҙең күбеһе йәштәр һымаҡ заманса аппаратура, кеҫә телефоны, интернет менән эш итә белмәй бит. Ә тауыш биреүҙәрҙә ҡатнашҡы килә...

Ябай телефондан шылтыратыуҙы ҡабул итеп булмаймы, юғиһә? Хәйер, уныһы ла аҡсаны күп ашай бит хәҙер. Бер көндә апайыма телефон аша шылтыраҡтайным. Өйҙә юҡ сағы тура килеп, ире менән һөйләшергә тура килде. Һәйбәт кенә итеп фекер алышып, иҫәнлек-һаулыҡ теләп хушлашһам, ул миңә: "Һин минең менән һөйләшеп, 30 һумға яҡын аҡса сарыф иттең", - тип әйтеп ҡуйҙы. "Булһын, ул аҡсаларҙы кем һанай", - тип көлгән булғайным да ул. Ябай телефон өсөн түләүҙәр ҙә ололарға иркенләп аралашыуҙы ҡыйынлаштырҙы. Мин дуҫтарыма шаяртып: "Һин байыраҡ, һинең шылтыратыуыңды көтөрмөн инде", - тип әйтеп тә ҡуйҙым инде (Һаулыҡы һәйбәт пенсионерҙар әле лә эшләп йөрөй бит). Ә таныштарға, туғандарға хаттар яҙыу бөтөнләй онотолдо. Хәҙер хаттар СМС аша ғына, ҡыҫҡаса ғына яҙыла. Ә көндәлектәр яҙыу боронғо шөғөл тип һанала.

Балаларыма ҡунаҡҡа барһам, сәй эсkәндә генә бер-ике йылы һүҙ әйтешеп алабыҙ ҙа, ейәнем дә, ҡыҙым да компьютерға ҡаплана, интернетҡа инеп китәләр, ә мин бер йәшлек ейәнсәрем менән уйнайым... "Балаларымдың баштарында ниндәй уйҙар, йөрәктәрендә ниндәй хистәр икән?" - тип, күҙҙәрем йәшләнеп ҡайтып, үҙемде йыуатыр өсөн берәй йыр тыңлайым, тип телевизорҙы асһам:

"Ҡар булһам, ҡаралмам,
Боҙ булһам, боҙолмам

Янымда һин булһаң... - тигән мәғәнәһеҙ йыр яңырай. Шунан һуң нисек инде Бабич һүҙҙәренә эйәрмәйһең: "Мин тороп ҡалдым көйөп, әрнеп, күңел һыҙлауы менән". Ошоға ҡағылышлы бер тәҡдимемдә лә әйтәйем әле: сәнғәт мәктәптәренә, ошо йүнәлештәге юғары уҡыу йорттарына шиғриәт уҡытыу дәрестәре индерергә кәрәк. Мәғәнәһеҙ һүҙле йырҙар кәмер ине, бәлки.

Эйе, Рәсәйҙең яңы президенты ла халыҡ алдына сығып, күҙмә-күҙ аралашмай, үҙенең "Рәсәй, алға!" ("Россия, вперед!") сайтын асып, компьютер аша ғына фекер алыша бит. Ә ябай халыҡ "тороп ҡалды көйөп, әрнеп, күңел һыҙлауы менән..."

**Фәүзиә ЯХИНА.**



Йылайыр районы башҡорт теле уҡытыусылары.

ИҒТИБАР!

- **2010 йылдың беренсе ярты йыллығына гәзитебеҙгә яҙылыу бара, тип иҫегеҙгә төшөрәбеҙ. Башҡорт телендә сыҡҡан баҫмалар араһында иң арзан хаҡ - "Киске Өфө"нөкө: 50665 индекслыһы - 306 һум 84 тин, 50673 индекслыһы (льготалыһы) - 294 һум 78 тин.**
- **Бүләк алыу барыбер ҙә күңелле икәнен уйлап, гәзиткә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәреүселәргә бүләктәр отошо ла тәҡдим итәбеҙ. Ул бүләктәр араһында төҫлө телевизор ҙа, микротулҡынлы мейес тә, үтек-сәйнүктәр ҙә, кеҫә телефоны ла булыр. Шулай уҡ квитанцияларын тәүгеләрҙән булып ебәргән 200 уҡыусыбыҙ 2010 йылға Дини календарь алып та шатланыр.**
- **"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә. Ауылдарҙа йәшәүсе ата-әсәйҙәребеҙгә, туғандарыбыҙға, яҡындарыбыҙға, дуҫтарыбыҙға, туған мәктәбебеҙгә, мәсеттәргә "Киске Өфө" гәзитен бүләк итәйек.**
- **Кем тыуған көнө уңайы менән "Киске Өфө" гәзите биттәрендә ҡотланырға теләй? Шулар гәзиткә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәрә, тыуған көнө датаһын хәбәр итә һәм ваҡыты еткәс, гәзит биттәрендә беҙҙең ҡотлауҙы уҡып, бәләкәй генә булһа ла шатлыҡ кисерә.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓БР Президенты Мортаза Рәхимов Өсөнсө Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайын үткәреү тураһында Указға ҡул ҡуйҙы. Указға ярашлы, БР Хөкүмәте 2010 йылдың июнендә Өфөлә үткәреләсәк был сараның ойоштороу комитетын раҫларға һәм уға әҙерлек, финанслау буйынса саралар планын эшләргә тейеш.

✓РФ Хөкүмәте Премьер-министры Владимир Путин Волга буйы федераль округы буйлап эш сәфәре сиктәрендә Татарстан Республикаһының Түбәнге Кама ҡалаһында "Рәсәйҙә газ һәм нефть химияһын үҫтереү буйынса саралар тураһында" тигән кәңәшмә үткәрҙе. Нефть һәм газ химияһы сәнәғәтенең технологик кимәлен күтәреү, тармаҡта дәүләт һәм эшҡыуарлыҡтың үҙ-ара хеҙмәттәшлеге мәсьәләләре, шулай уҡ тейешле продукция баҙарын монополияға ҡаршы көйләү проблемалары тикшерелгән кәңәшмә эшендә Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов та ҡатнашты.

✓БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев Европа реконструкция һәм үҫеш банкыһының төбәктәр үҫеше департаменты башлығы Бруно Бальванер менән осрашты. Осрашыу барышында Өфө ҡала биләмәһендәге етештереү-технологик комплекс үҫешен инфраструктура йәһәтенән тәьмин итеү һәм "Өфө" халыҡ-ара аэропорты реконструкциялауҙың инвестиция проекттарын финанслау мәсьәләләре тикшерелде. Хеҙмәттәшлек, тәү сиратта, ҡала һәм районлар инфраструктураһы, бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡҡа булышлыҡ итеү, тоннель-күпер юл үткәргестәре һәм транспорт сиселештәре һәм башҡа төҙөләштәр өлкәһендә үҫәсәк.

✓БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Фидус Ямалтдинов, "Интерфакс" агентлығында журналистар менән осрашып, 2010 йылдың 1 майына тиклем Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусы 145 ветерандың торлаҡ мәсьәләһе хәл ителәсәк, тип белдерҙе. Башҡортостанда 2009 йылдың 1 ғинуарына торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға бөтәһе 667 ветеран ғариза биргән. Әле уларҙың барыһына ла фатир алыуға танылыҡтар тапшырылған. Күптәр торлаҡ алған да инде. 145 кеше әлеге ваҡытта үҙҙәренә яраған фатир һайлау менән мәшғүл. 2010 йылда мохтаж булған ветерандарҙың барыһы ла, ҡасан сиратҡа тороуына ҡарамаҫтан, торлаҡ менән тәьмин ителәсәк. Бөгөн был исемлектә - 330 кеше.

✓ ***Бындай урлыҡ-бурлыҡ китһә, РФ Президенты илде модернизациялауҙы кемгә ышанып тапшырырға тейеш икән? Ул уғрылыҡ Пенсия фондында ғына түгел, башҡа ойошмаларҙа ла күп бит.***



АҘНА ШАҢДАУЫ

# РӘСӘЙ, АЛҒА! ДОНЪЯ ЧЕМПИОНАТЫНАМЫ?

## Сәғәт телдәрен алға, тим...

**Рәсәй Президенты Дмитрий Анатольевич Медведевтың Федераль Йыйылышҡа Хаты тураһында яҙырға йыйына был, а бит уны Президент 12 ноябрь көнө, йәғни үткән аҙнала яңғыратты, тиерһегеҙ, моғайын. Ә күҙәтеү рубриканың атамаһына (һәм, әлбиттә, логикаға) ярашлы, үтеп барған аҙна эсендәге ваҡиғаларға ғына бағышланырға тейеш тә баһа, тип дәғүә белдерерһегеҙ, бәлки. Ә мин, йәмәғәт, Президенттың Мөрәжәғәтнамәһе хаҡында яҙырға уйламайым. Дөрөҫөрәге, уның хаҡында ғына түгел. Минә Дмитрий Медведевтың Хатына ҡайһы бер сәйәсмәндәрҙең, сәйәси күҙәтеүселәрҙең, ваҡытлы матбуғат сараларының үҙенсәлекле мөнәсәбәте ҡыҙығыраҡ. Бынан тыш, үткән ике аҙна, йәғни 9 ноябрҙән алып бөгөнгәсә иғтибарға алырлыҡ ваҡиғалар шул тиклем күп - ҡайһыһына тотонорға ла белеп булмай.**

Шулай ҙа - тәүҙә футбол хаҡында. Ир-егеттәр мине аңлар, ҡатын-ҡыҙҙар ғәфү итер, моғайын. Хәйер, һүҙем футбол тураһында ғына түгел, Ульяновскиҙағы арсенал шартлауы хаҡында ла икән. Тағы ла аныҡлабыраҡ әйткәндә, футбол буйынса Рәсәй менән Словения йыйылма командаларының Мәскәүҙә осрашҡан ваҡытында Ульяновск ҡалаһының ҡап уртаһында урынлашҡан хәрби келәттәрҙең көтмәгәндә шартлап күккә осоуы хаҡында. Аңлайым, йәмәғәт, һеҙҙең ғәжәпләнеүегеҙҙе. Был ике ваҡиғаны бер нисек тә бәйләп булмай ҙа баһа, тиеүегеҙҙе. Аптыранырға ашыҡмағыҙ - ҡайһы берәүҙәр фекеренсә, Ульяновск ҡалаһы көйәрмәндәре Рәсәй футболсыларының еңеүен оло салют менән ҡаршыларға ниәтләгән булған, имеш. Әммә, фейерверк табылмағас, хәрби арсеналды шартлатҡан да ҡуйғандар. Барыбер ундағы снарядтарҙы утилләштерергә кәрәк бит! Был, әлбиттә, шаяртыу. Тик шунһы асыҡ: Дмитрий Медведевтың модернизациялау тураһындағы иң ҡыйыу һәм матур фекерҙәре һәм уй-хыялдары илебеҙ ҡалаларының уртаһында урынлашҡан хәрби келәттәр кеүек шартлап, йәки сифатһыҙ ремонт арҡаһында емерелеп, тиҫтәләгән кешеләрҙең ғүмерен ҡыйыусы Саян-Шуша ГЭС-ы һымаҡ юҡҡа сығып ҡуймағайы, тим.

Тере епкә генә ҡоршап ҡуйылған кеүек күренә ҡайһы саҡ дәүләтебеҙ. Төпһөҙ упҡын өҫтөндә үлән тамырына ғына эләнеп торған һымаҡ. Бәләкәй дәүләттәргә, милли республикаларға тарҡалып юҡҡа сығыуынан ҡурҡырға ярамай Рәсәйҙән. Башҡорт ише милләттәр ирек бирмәҫ быға. Уйһыҙлыҡтан, аңһыҙлыҡтан, бөгөнгө көн менән генә йәшәгәнлектән генә берәй моңһоҙо атом бомбаһының кнопкаһына баҫып, илебеҙҙең көлөн күккә осорор һымаҡ тойола. Иртәгә Рәсәйҙең ҡайһы мөйөшөндә тағы ла нимә шартлар, емерелер, ергә убылыр йәки күккә осор икән, тип ҡурҡып ҡына йоҡларға ятам...

Һүҙем футбол тураһында ине бит әле. Хәйер, был мауыҡтырғыс уйындың Словенияла дауам иткән икенсе өлөшө тураһында үҙ фекеремде белдергәнгә тиклем үткән аҙнала булған иҫте китәргес бер ваҡиға тураһында әйтеп үтмәү мөмкин түгел. Ул да булһа, Пенсия фондынан 1 миллиард 250 миллион һум сәлдереү. Көпә-көндөҙ бит әле. Берәү иғтибар итһә, исмаһам. Ваҡытлы матбуғат саралары хәбәр итеүенсә, был сумманың күп өлөшөн Рәсәй Федерацияһының Үҙәк банкыһы кире ҡайтарып алып өлгөргән, имеш. Әммә 200 миллион һум тирәһе аҡса ҡайҙалыр, ниндәйҙер билдәһеҙ банкыларҙың иҫәптәрендә һаман "аҙашып" йөрөй, тиҙәр. Әйтегеҙ әле, был нимә - аңһыҙлыҡмы? Әллә Пенсия фонды хеҙмәткәрҙәре өсөн ниндәйҙер төпкөлдәге билдәһеҙ банк иҫәбенә ғәйәт ҙур сумманы күсереү ғәҙәти хәлме? Әллә улар көн һайын миллиардлаған аҡсаны Рәсәй буйлап тегеләй-былай оҙатып торамы? Исмаһам, бер генә кеше булһа ла шик белдерһә икән!? Юҡ шул.

Ә бит ябай халыҡ менән эшләгәндә Пенсия фонды улай үтә ышаныусан түгел. Хәтеремдә, таныштарымдың береһе пенсия йүнләр алдынан бөтә Башҡортостан буйлап тиерлек йөрөп, элек эшләгән урындарынан икешәр-өсәр тапҡыр справкалар йыйғайны. Ни өсөн, тиһегеҙме? Теге йәки был урында эшләүен раҫлар өсөн. Хеҙмәт кенәгәһендә яҙылғаны, мисәттәр, ҡултамғалар менән раҫланғаны ярамай микән? Тимәк, ярамай. Кем белә, бәлки, ул бер ике йөҙ һум артығыраҡ алыр. Ә? Икенсе бер танышым иһә пенсия осорона хаҡһыҙ рәүештә индерелмәгән армиялағы ике йылын юллап, Башҡортостандың Юғары судына тиклем барып етте. Тик шунда ғына Пенсия фонды уның дәлилдәре менән ризалашырға мәжбүр булды.

Тимәк, бурҙарҙың Пенсия фондында һәм (Аллам һаҡлаһын!) Рәсәй Федерацияһының Үҙәк банкыһында үҙ кешеләре булған, тигән уйға киләнә. Был илдә кемгә ышанырға мөмкин һуң ул? Бындай урлыҡ-бурлыҡ китһә, РФ Президенты илде модернизациялауҙы кемгә ышанып тапшырырға тейеш икән? Ул уғрылыҡ Пенсия фондында ғына түгел, башҡа ойошмаларҙа ла күп бит. Әйтәйек, дәүләт корпорацияларында.

Хәйер, һүҙебеҙ футбол тураһында ине бит әле. Ҡарағанһығыҙҙыр. Күргәнһегеҙҙер. Мәғәнәһеҙ бер уйын булды инде. Ярар әле, тиҙ генә үтте лә китте. Юғиһә, беҙҙең уйынсыларҙың барыһы ла "ҡыҙыл" карточкаға эйә булыр ине, моғайын. Кемгә нисектер, әммә миңә РФ Президенты алдында ныҡ оят булды. Ул бит егеттәргә ышанып, өмөтләнеп, былар менән алға барырға мөмкин микән, тигән уй менән килгән бит инде. Ә улар?... Ҡыҙыҡ өсөн генә Словенияның халыҡ һанын әйтәйемме? 2002 йылғы халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләре буйынса унда 1 миллион 964 мең 36 кеше йәшәй икән. Йәғни, яҡынса ике Өфө була инде. Йәки, ярты Башҡортостан. Бәлки, мәйтәм, киләһе донъя чемпионатына беҙгә лә футбол буйынса йыйылма команда тупларға ваҡыттыр? Словендарҙан ҡайһы еребеҙ кәм һуң? Гус Хиддинкка ла ниндәй оло өмөттәр бағлағайныҡ бит әле. Петр Беренсенең Голландияға барып, аҡылға ултырып ҡайтыуын, һаман боронғоса йәшәп ятҡан Рәсәйҙе, заманса әйтһәк, модернизациялауын иҫкә төшөрҙөк бит әле. Юҡ, йәмәғәт, сит ил кешеләре менән футболыбыҙҙы ла, илебеҙҙе лә күтәреп булмай. Өмөт үҙебеҙгә генә. Әйткәндәй, Дмитрий Анатольевич сит илдәргә таянырға ашыҡмай. Ул халыҡты күтәрергә ниәтләй. Тик шунһы ғәжәп, Дмитрий Медведевтың Мөрәжәғәтнамәһен ҡайһы берәүҙәр бик үҙенсәлекле ҡабул итте. Айырыуса, ваҡытлы матбуғат сараларына ҡағыла был. Улар үҙҙәренсә был Хаттың төп мәғәнәһе - ҡышҡы ваҡыттан йәйгеһенә күсеүҙән баш тартыу һәм илдәге ваҡыт бүленештәрен кәметеүҙән ғибәрәт, тип аңланы, шикелле. Улар ғына түгел, Дәүләт Думаһының ҡайһы бер депутаттары ла (оҙаҡҡа һуҙмай ғына махсус закон проектын әҙерләп тәҡдим итеүҙәренә ҡарағанда) Президент хатының асылы - ваҡытты үҙгәртеүҙә генә, тигән фекергә килгән булған. Ә ҡайһы бер күҙәтеүселәр иһә Дмитрий Медведевтың Мөрәжәғәтнамәһен романтик хыялдар манифесы, йәки дәүләт утопияһы, тип атауҙан да тартынманы. Юҡ, йәмәғәт, ул документҡа бик ҡыҙыҡлы уй-фекерҙәр тупланған. Тик кем менән тормошҡа ашырырға уларҙы? Футболсылар менән түгел - быныһы яҡшы аңлашыла. Ә кем менән һуң? Ҡайһы бер гәзиттәрҙә донъя күргән баш һүҙҙәргә күҙ һалам. Мәҫәлән, "Российская газета" беренсе битендә Медведевтың Мөрәжәғәтнамәһе матбуғатта сығыу көнөндә үк "Президент үҙ һүҙен әйтте. Алдыбыҙҙа аҡыллы, азат һәм яуаплы кешеләр йәмғиәте булыу бурысы тора" - тип яҙып ҡуйҙы. Ризамын. Тик кеше үҙенән-үҙе азат була алмай. Уны ирекле булырға өйрәтергә кәрәк. Һүҙ, йыйылыш, дингә ышаныу һәм башҡа азатлыҡтар, иректәр хаҡында Төп законда яҙыу менән генә кешеләр бөгөндән уларға эйә булдымы? Аҡыллыларҙы иһә күрә һәм баһалай белеү шарт. Кешенең яуаплылығын белер өсөн уға бурыс йөкмәтмәй булмай. Ә иң мөһиме, кешеләрҙә бер-береһенә ышаныс уятырға ине. Ышанысыҙ бер нисек тә булмай бит. Ана, футболды алайыҡ. Үҙебеҙҙең тренерҙарға ышанмай, ситтән саҡырғайныҡ, мәғәнәһе булдымы?

Әйткәндәй, йәмәғәт, сәғәттәрҙе ҡайҙа күсерергә һуң? Алғамы, әллә артҡамы? Башҡортостан артабан да Мәскәү менән ике сәғәт айырмала йәшәр микән? Әллә беҙгә лә Мәскәү сәғәтенә күсергә ваҡытмы?

**Таһир ИШКИНИН.**

### УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

***Бөтә милләттәштәребеҙ яратып уҡыған "Киске Өфө" гәзитенең донъя күреүенә шатланып бөтә алмайбыҙ. Сөнки унда ниндәй генә мәғлүмәт юҡ һәм шундай эстәлекле, ябай, асыҡ фекерле булыуы менән башҡа гәзиттәрҙән айырылып тора.***
***Беҙ 75 йәште уҙған оло кешеләр булһаҡ та, гәзиттең алдағы һанын көтөп кенә торабыҙ. Иң тәүҙә Әхмәр менән Таһирҙың мәҡәләләренә йомолабыҙ. Уларҙың сығышында рухи байлыҡ, ҡыҙыҡлы һәм ҡыҙғаныслы хәл-ваҡиғалар, ысынбарлыҡ, тормоштоң бөтә булған әсеһе-сөсөһө, уйларлыҡ, фекерләрлек, йәштәргә юл күрһәтерлек фәһем һәм үрнәк өлгөһө - барыһы ла бар. Ғөмүмән, беҙ ошо гәзитте алып уҡыуыбыҙ менән бик тә бәхетлебеҙ..***

**Әхиәр ИСХАҠОВ,**
**Баймаҡ районы Таулыҡай ауылы.**

### НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Бөгөн республиканың мәшғүллек хеҙмәттәрендә 39 мең кеше эшһеҙ булараҡ теркәлгән. Шуларҙың 29 проценты - йәштәр, 7,6 проценты - пенсия алды йәшендәге кешеләр, 43 проценты - урта йәштәге граждандар. Быйыл ун айҙа 85 мең кеше эшкә урынлаштырылған. Был мөрәжәғәт итеүселәрҙең 47 процентын тәшкил итә.

✓Үтеп барған аҙнала БР Хөкүмәте ҡарамағындағы Матбуғат, нәшриәт һәм полиграфия эштәре буйынса идаралыҡ Дыуан районы үҙәге Мәсәғүттә Матбуғат байрамы уҙғарҙы. Унда Салауат, Ҡыйғы, Мәсетле, Балаҡатай районлары хакимиәттәре вәкилдәре, ауыл биләмәләре башлыҡтары, почта хеҙмәткәрҙәре, мәктәп директорҙары, уҡытыусылар һәм мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре ҡатнашты. Ошондай уҡ сара йома көндө Бөрйән, Әбйәлил, Учалы районлары делегациялары ҡатнашлығында Белорет ҡалаһында ла үтте.

✓Һалҡын тейҙереп ауырыусылар артыу менән бәйле, баш ҡаланың бөтөн һаулыҡ һаҡлау учреждениеларында битлек менән йөрөү режимы индерелде. 12 ноябргә Өфөлә һалҡын тейҙереп ауырыусылар һаны 47 меңгә еткән, шуларҙың яртыһынан күбеһе - балалар. Грипп менән ауырыусы 40 кеше теркәлгән. Үтеп барған аҙна башында һалҡын тейҙереп ауырыусылар һаны тағы 21 мең кешегә артҡан. 26 өфөләгә грипп диагнозы ҡуйылған. Бөгөнгө көнгә грипҡа ҡаршы прививка 360 мең кешегә яһалған.

✓Ошо көндәрҙә Өфө дәүләт нефть техник университетының механика факультеты студенттары ҙур бүләк - тулыһынса ремонтланған ятаҡ алып ҡыуанды. Был тантанала Башҡортостан Республикаһы Президенты ла ҡатнашты. Ремонт эштәрен башҡарыу һәм йыһазландырыу өсөн университет 65,5 млн һум аҡса тотонған, уларҙың 26 млн һумы РФ бюджетынан бүленгән. Бынан бер нисә йыл элек университет 10-сы ятағын фатир тибында үҙгәртеп алған булған. Ошо йорттан университеттың уҡытыусыларына ла фатир аҫҡыстары тапшырылды.

✓Баш ҡаланың Ғафури исемендәге паркында тәүге яһалма боҙ катогы асылды. Үҙенең конькизары менән килеүселәр өсөн боҙҙа бер сәғәт шыуыу 100 һумға төшәсәк, конькизары булмағандар уны 50 һумға прокатка алып тора аласаҡ. Ошондай уҡ каток Ҡунаҡһарай комплексы майҙанында ла булдырыласаҡ.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## СИРЛЕ МИГРАНТ...

**Башҡортостан Рәсәйҙә сит ил эшселәрен йәлеп итеүсе төбәктәр араһында беренсе урында тора. Мигранттар күберәк төҙөлөш, сауҙа һәм ауыл хужалығы өлкәһендә эшләй.**

Сит ил гражданы ҡайҙан килеүенә ҡарамаҫтан, иң тәүҙә Рәсәйҙә эшләргә рөхсәт биреүсе документ ала. Мигранттың 90 тәүлектән дә оҙағыраҡ эшләргә ниәте бар икән, ул мотлаҡ рәүештә Федераль миграция хеҙмәтенә туберкулез, сифилис, ВИЧ-инфекцияһына тикшерелгәнен раҫлаған медицина актын һәм сертификат күрһәтергә тейеш. Әгәр ҙә сит ил гражданы эшләргә рөхсәт алғандан һуң 30 тәүлек эсендә бындай документтарҙы миграция идаралығына алып килмәһә, уға был илдә эшләргә рөхсәт биреүсе документ ғәмәлдән сығарыла. Ағымдағы йылда ошондай ғәмәлдән сыҡҡан документтар һаны 700-гә еткән.

Быйыл республика миграция хеҙмәткәрҙәре тарафынан сит ил граждандарына 17 меңдән ашыу эшләргә рөхсәт биреүсе документ тапшырылған, шулар араһында 11 мигрантта төрлө инфекцион ауырыу осрағы асыҡланған. Статистика күрһәтеүе буйынса, улар йә Үзбәкстандан йәки Әзербайжандан килгән. Бөгөнгө көнгә Федераль миграция хеҙмәтенең республика идаралығында 22 сит ил гражданында ҡурҡыныс инфекцион сир асыҡланыуы тураһында мәғлүмәт теркәлгән.

Шулай уҡ сит ил граждандарының ялған документтар тапшырыу осраҡтары ла юҡ түгел. Быға иң тәүҙә намыҫһыҙ медицина хеҙмәткәрҙәре юл ҡуя. Мәҫәлән, быйыл хоҡуҡ һаҡлау органдары тарафынан сертификаттар менән һатыу иткән бер медицина хеҙмәткәре тотола, һөҙөмтәлә 26 сит ил гражданының эшләргә рөхсәт биреүсе документтары ғәмәлдән сығарыла.

**Салауат ХИЛАЛОВ.**

## ҠАЛА ЮЛДАРЫНДА...

**Әлеге ваҡытта баш ҡалала 8 стационар радар юл хәрәкәтен күҙәтә. Өфө юл-патруль хеҙмәте полкында ошондай уҡ 6 яңы ҡоролма әҙерләнә, тимәк, уларҙың һаны тиҙҙән 14-кә етәсәк.**

Яңы ҡоролмаларҙы махсус антивандаль ҡумталарға ултыртып, хәрәкәттең ике яғы буйлап юлдарға урынлаштырасаҡтар. Шуны ла билдәләп китергә кәрәк: бындай 12 ҡумтаның яртыһы буш буласаҡ, сөнки камералар бер ҡумтанан икенсеһенә күсереп йөрөтөләсәк. БР буйынса Эске эштәр министрлығы ЮХХДИ-ның юл-патруль хеҙмәте һәм автомототранспорт сараларын эҙләү бүлеге мөдире Александр Рынмарь әйтеүенсә, "Арена-С" камералары радарҙары 20-нән алып 250-гә тиклем километр тиҙлек менән барған машиналарҙың номерын тәүлек әйләнәһенә фотоға төшөрә ала. Тиҙлекте арттырған машинаның фотоһы бер секунд эсендә юл-патруль хеҙмәте полкы серверына һәм Өфө ЮХХДИ-ның үҙәк офисына барып етә, бынан штраф квитанцияһы һәм машина номеры фотоһы һалынған конверттар ҡағиҙә боҙоусыларҙың өйҙәренә йүнәлә. Республика ЮХХДИ етәксеһе Динар Ғилметдинов белдереүенсә, Салауат Юлаев проспектында ике йүнәлештә лә эшләгән тәүге камера төшөргән фотолар буйынса биш миллион һум штраф һалынған.

ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# САҠЫРЫУҘАР ЯҢЫРА ЛА УЛ...

## уға яңылары өҫтәлә тора

(Башы 1-се биттә).

**Социаль реклама фестиваленең географияһы киңәйә барыуы ла күренде. Был юлы Ҡаҙағстан һәм Беларусь республикалары ла үҙ проекттарын тәҡдим итте. 500-ҙән ашыу проект 9 номинацияла еңеүсе исемен алыу өсөн көрәште. Шуныһы ҡыуанысլы: быйылғы сарала тәүге тапҡыр башҡорт телендәге социаль рекламалар ҡатнашты. "Шоңҡар" йәштәр журналы редакцияһы хеҙмәткәрҙәре Гүзәл Ноғоманованың йәмғиәтебеҙҙәге иң насар күренештәрҙең береһенә әйләнгән әр һәм һүгенеү һүҙҙәрен телмәрҙә ҡулланыуға ҡаршы - "Һүгенмәгеҙ", Байрас Ҡыуандыҡовтың тәмәкегә ҡаршы "Тәмлеме?" тигән эштәре фестиваль күргәҙмәһендә урын тапты. Тимәк, киләсәктә башҡорт телендәге социаль рекламалар ҙа баш ҡала мөхитендә урын алыр, тип ышанғы килә.**

Фестиваль күргәҙмәһендә иғтибарҙы тағы бер яңылыҡ үҙенә йәлеп итте: Совет замандағы атрибутика. Бында шартлы рәүештә социаль реклама тип әйтеп булған рус һәм башҡорт телендәге, шулай уҡ латин хәрефтәре менән дә яҙылған агитация һәм пропаганда өлгөләре ҡуйылған плакаттар ҙа эленгәйне. Ойоштороусылар уларҙы Дәүләт китап палатаһы архивынан табып, күргәҙмәгә ҡуйған. Улар ҙа фестивалгә килеүселәрҙе ҡыҙыҡһындырҙы. Күптәр латин графикаһы менән башҡортса яҙылған тексты уҡырға маташты. Советтар Союзында латин яҙмаһы телгә индерелгән осор дингә ҡаршы иң аяуһыҙ көрәш, "Дин - халыҡ өсөн опиум" девизы аҫтында меңәрләгән мәсет манараһы ҡолатылыу, меңәрләгән дин әһелдәрен золом ҡорбандарына әйләндереү ваҡиғалары менән бәйле. Әлеге һигеҙ тиҫтә йыл самаһы элек урамдарҙы "биҙәгән" башҡорт телендәге был плакат та, аңлауығыҙса, дингә ҡаршы йүнәлтелгән. "Бөтһөн иҫке тормош ҡалдығы - ҡалым һәм күп ҡатын алыу, ғәҙәт һәм шәриғәт. Эшсән ҡатын-ҡыҙҙарҙың тормош ҡоллоғона ҡаршы көрәшен көсәйтәйек. Социализмға, алға" тип яҙылған унда. Ысынында, бындай лозунг-саҡырыуҙар күп була. Улар ябай колхозсы ауыҙынан да, вазифалы кешеләр, хатта абруй ҡаҙанған шәхестәр телмәренән дә төшмәй. Бөтә бәләләр диндән, дин - боронғолоҡ, заман ҡалдығы тип иғлан ителгән, дин ҡанундары менән ата-бабалар йолалары ла юҡ ителгән замандарҙың типик саҡырыуы был.

Һүҙ юҡ, "Ҡала мөхите" социаль реклама фестивале бик матур һәм кәрәкле сара. Ләкин ошондай сараларҙы ойоштороуға мәжбүр иткән кире тормош күренештәре өсөн борсолоу һәр кем күңелендә булырға тейештер. Йәшәйешебеҙҙе йәмһеҙләүсе күренештәргә ҡаршы көрәш тураһында фестивалдәр, симпозиумдар, конференцияларҙы көн дә үткәрергә була. Урамдарҙы, гәзит-журнал биттәрен, телевидение экрандарын улар тураһындағы социаль реклама менән дә тултырырға була. Әммә йәмғиәт уларға битараф ҡалһа, был сараларҙан ғына файҙа булырмы?

Уйлап ҡарайыҡ әле: һигеҙ тиҫтә йыл элек "Бөтһөн иҫке тормош ҡалдығы... ғәҙәт һәм шәриғәт..." тип ҡысҡырған дәүләт еңеү яуланымы? Ошо саҡырыуға ҡушылыусылар берәй уңышҡа өлгәштеме? "Дин - халыҡ өсөн опиум" тип ҡысҡырған ил, яңы заман кешеһе булабыҙ, тип йүгереүселәрҙең вариҫтары ниндәй хәлгә тарыны? Бөгөнгө социаль рекламаның темаһы үҙгәрҙе. Тарҡалған ғаиләләр, етем һәм ҡараусыһыҙ ҡалған балалар, Рәсәйҙә миллионлаған кешеләрҙең алкоголь, наркоманлыҡ арҡаһында үлемен табыуы, йәшәү маҡсаты булмаған йәштәр, әхлаҡи нормалары булмаған бар нәмәгә битараф дәүләт. Һәм ошо бар проблемалар эсендә халыҡ дауалаусы булып түгел, ә ауырыусы булып ҡайнай... Бәйләнеш күрәһегеҙме? Бөгөн һигеҙ тиҫтә йыл элек ҡысҡырылған ауаздарҙың "емешен" татыйбыҙ. Шул хаталы ауаздарҙың эҙемтәләрен төҙәтеү өсөн бөгөн ҙур көстәр һалына. Дәүләт кимәлендә программалар төҙөлә. Алға китеш әлегә аҡһай. Сөнки тамыры зарарланған ағасты һынған ботағын бәйләп кенә ҡотҡарып булмай. Әле эшләнгән эштәрҙе һынған ботаҡты ағасҡа бәйләү менән генә сағыштырып була. Был проблемаларҙың асылына төшөнгәндә, уларҙың нигеҙе нимәлә икәнен аңлағанда ғына кешеләр битарафлыҡтан уянасаҡ, аңлы рәүештә йәмғиәтебеҙҙең бар етешһеҙлектәренә ҡаршы көрәшәсәк, бөгөнгө көн социаль рекламаларынан көлөп, йә иғтибар итмәйенсә китмәйәсәк, ә уларҙа иҫкәртеү күрәсәк.

Бына шундайыраҡ уйҙар ҙа тыуҙырҙы был "Ҡала мөхите" фестивале. Ә былай, конкурсҡа тәҡдим ителгән 500 эш араһында уйландырырлыҡтары бик күп ине. "Без небес" продакшн-студияһы етәксеһе Евгений Никоновтың "Ҡылыҡ ғәжәпләндерә" антинаркотик реклама видеоролигы еңеүсе тип табылды. Был да актуаль, тип уйланыла, сөнки наркоманлыҡ - әле ныҡлап тамыр йәйергә өлгөрмәгән быуат бәләһе, уны баш ҡалҡытҡан мәлендә юҡ итеү фарыз бит. Ғөмүмән, был фестивалдә ҡатнашҡан күп социаль рекламалар яҡын киләсәктә ҡала урамдарында, әле һыра, тәмәкене рекламалаған таҡталарҙа урын алһын ине, тип теләге килә. Бәлки, кемдер уларға ҡарап, үҙенә фәһем алыр, тормош ҡиммәттәрен алыштырырға тырышыр...

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ.**




## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡортостан халҡы республика биләмәһендә эшләүсе банкыларҙан 83,1 млрд һум кредит алған. Йыл башынан халыҡҡа бирелгән кредиттарҙың дөйөм күләме 20,7 млрд һум тәшкил итә. Был былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 3,1 тапҡырға аҙыраҡ.

✓Баш ҡала хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә ҡала округында юлдарҙы төҙөкләндереү һәм ремонтлау тураһында, шулай уҡ балалар учреждениеларында янғын хәүефһеҙлеген тәьмин итеү саралары хаҡында мәғлүмәт тыңланды. Билдәләнелеүенсә, Салауат Юлаев проспектын ремонтлағанда тәжрибә рәүешендә итальян технологияһы менән етештерелгән битумлы ҡатышма ҡулланылған. Асфальт-бетон ҡатламдарҙы ремонтлауҙа ошо ҡатышманы ҡулланыу юлдарҙың файҙаланыу срогын оҙайтасаҡ, тип фараз ителә.

✓Үткән аҙнала Өфө ҡала округы Советы 2010 йыл бюджетын туплау буйынса киң тыңлауҙар үткәрҙе. Был сара баш ҡала бюджетын туплауҙа һәр өфөлө ҡатнаша, үҙ фекерен әйтә алһын өсөн үткәрелә. Билдәләнелеүенсә, киләһе йыл бюджеты шулай уҡ социаль йүнәлешле буласаҡ һәм уның 30,7 проценты - мәғарифҡа, 25,3 проценты - һаулыҡ һаҡлауға, 14,5 проценты торлаҡ-коммуналь хужалыҡҡа бүленәсәк.

✓Ғаиләгә, балаларға, йәштәргә социаль-психологик ярҙам күрһәтеү республика үҙәге 24 ноябрҙә көндөҙгө сәғәт 3-тән 5-кә тиклем хәрби хеҙмәткә саҡырыу мәсьәләләре буйынса "тура бәйләнеш" ойоштора. Һорауҙарға (347) 273-09-00 телефоны буйынса БР хәрби хеҙмәткә саҡырыу комиссияһының төп составы секретары Николай Черетов һәм башҡа белгестәр яуап бирәсәк.

✓Был көндәрҙә республика прокуратураһы хеҙмәткәрҙәре баш ҡалалағы аптекаларҙы даими тикшереп торҙо. Шуға ҡарамаҫтан, уларҙа ҡайһы бер бөгөн ҙур һорау менән файҙаланған дарыуҙарҙың хаҡтарын арттырыу осраҡтары күҙәтелә. Әгәр ҙә ниндәйҙер дарыуханала хаҡтарҙың законһыҙ рәүештә күтәрелеү осрағына тарыһағыҙ, түбәндәге телефондар буйынса шылтыратығыҙ: 250-30-22 (БР буйынса Росздравнадзор), 276-46-30 (Өфө прокуратураһы), 276-37-49 (БР Прокуратураһы).

✓ *Бик тырышҡанда, бер аҙнала бер шәл бәйләргә мөмкин. Бер ай эсендә дүрт-биш шәл бәйләп ултырыусылар ҙа бар. Шәл бөгөн тағы ла ғаиләне туйындырыусы бер шөғөлгә әйләнеп бара.*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**Ҡышын ҡала урамдарында башҡорт әбейҙәрен нисек танырға була? Әлбиттә, шәленән! Тик башҡорт инәйҙәре генә ана шулай матур итеп шәл ябынып йөрөй. Хәйер, беҙҙең әбейҙәр былай ҙа матур, ә бына дебет шәл уларҙы тағы ла мөләйем, күркәм итә кеүек тойола. Уларҙың шәл ябыныуын ҡарап тороу - үҙе бер мауыҡтырғыс күренеш. Нисектер, ҡул һырты менән ипләп кенә йәтешләп, үтә бер йомшаҡлыҡ һәм кинәнес менән маңлайҙарына төшөрә биреп ябынып ҡуя улар уны. Ғәҙәттә, әбейҙәр ябынған шәлдәр ҙурлығы, ҡалынлығы һәм тотор ҡулға йәнде иретер йомшаҡлығы менән айырылып тора. Урта йәштәге ҡатындар иһә уртаса ҙурлыҡтағы шәлдә үҙ итеүсән. Уларҙың дә үҙҙәренә генә хас, әйтәйек, ябыныу стиле бар. Сәсрәп торған ҡап-ҡара шәл уларҙы затлы һәм зауыҡлы күрһәтә. Ә йәш ҡыҙҙар, килендәр ап-аҡ шәлдең бер яҡ осон муйынына урап, икенсе яҡ осон түшенә төшөрөп ябынырға ярата. Нескә генә итеп, төрлө биҙәктәр һалып бәйләнгән шәлдәр йәш ҡыҙҙарға сафлыҡ бөркә, уларҙы нәзәкәтле һәм серле күрһәтә.**





# ДЕБЕТ ШӘЛ ҠАЙТА,

## шәл һуғыу шөғөлө тергеҙелә

Һәр ҡыҙ-ҡатын ябыныу стиленән тыш, үҙенә генә хас шәл бәйләү оҫталығына ла эйә. Бер уйлап ҡараһаң, төҫ, форма, бәйләнеүе яғынан бер ниндәй ҙә айырма юҡ кеүек, әммә һәр хужабикәнең үҙ шәле таныулы. Ысынлап та, яҡындан күҙ һалһаң, шәлдең әллә нисәмә балҡышына тап булаһың. Ғөмүмән, шәл гүзәл зат өсөн, бигерәк тә көньяҡ райондарҙа, затлы әйбер һанала. Тап ана шуға ла килен кешегә инселәп шәл бәйләнә, ҡәйнә йортона төшөү менән ололап иңенә һалына. Күҙ нурҙары, ҡул йылыһы ҡушып бәйләгән шәлдәр ҡыҙ-ҡатынды күркәм һәм нәфис итеп кенә ҡалмай, ҡышҡы һалҡындарҙан ҡурсалай, саф тәбиғи дебеттән бәйләнгәнгә күрә, йылыны ла яҡшы һаҡлай. Бөгөн дебет шәлдең сифаты ла, шифаһы ла лайыҡлы баһалана башланы. Хәҙер беҙгә уны камиллаштырып, яңыса һулыш өҫтәгәндә, тағы ла кинерәк ҡулланыуға индерергә мөмкин булыр ине.

Хәйер, оҫтабикәләр был турала хәстәрлек күрә башлаған да инде. Үткән шәмбелә Ҡала мәҙәниәт һарайында үткән республика башҡорт шәле күргәҙмә-конкурсында беҙ тап ана шул шәлдәрҙең мең төрлө балҡышына тамаша ҡылдыҡ. Унда Ейәнсура, Күгәрсен, Хәйбулла, Әбйәлил, Көйөргәҙе, Ҡырмыҫҡалы, Ҡыйғы, Стәрлебаш, Дәүләкән, Федоровка, Миәкә райондарынан, Сибай ҡалаһы, Ырымбур, Волгоград өлкәләренән килгән оҫтабикәләр ҡатнашты. Был сарала хәйбуллаларҙың 100 йыл элек һуғылған ҡомартҡы шәленән алып, шәхси эшҡыуар Алһыу Әбсәләмова тәҡдим иткән төрлө төҫтәге биҙәкле шәлдәр, башҡа төрлө шәлдәр гөлләмәһен күреп хайран ҡалдыҡ. Тап ана шул "Боронғо кәсеп - һуғылған башҡорт дебет шәлдәре традицияһын һаҡлаған өсөн" номинацияһында Әбйәлил районынан Рәсилә Вәлиева махсус приз менән бүләкләнде. "Һылыуҡай" студияһында шөғөлләнеүсе ҡыҙҙар эшҡыуар коллекцияһынан 50-ләп шәл өлгөләрен тамашасы иҫтибарына күрһәтте. Конкурсҡа тәҡдим ителгән етмешләгән дебет шәл араһында Ейәнсуранан Зөлфирә Сәлихова менән Көйөргәҙәнән Мөбәрәк Мортазина - өсөнсө, Федоровканан Гөлнур Маһинурова менән Көйөргәҙәнән Тәскирә Сынбулатова - икенсе, Ейәнсуранан Сәниә Ғафарова беренсе урынға, Федоровканан Мөнирә Маликова гран-приға лайыҡ булды. Биҙәкле шәл буйынса Ейәнсуранан Әлиә Кәлимуллина менән Көйөргәҙәнән Ғилминур Һөйәрембәтова - өсөнсө, Ейәнсуранан Миннур Ҡылысбаева менән Стәрлебаштан Венера Абутасова - икенсе, Ейәнсуранан Зөлфиә Иҙрисова беренсе урынға һәм ошо уҡ районҙан Роза Кәлиева гран-приға өлгәште. Командалар ярышында иһә, Ейәнсура - беренсе, Федоровка - икенсе, Көйөргәҙе менән Миәкә районҙары өсөнсө урынға сыҡты.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Гүзәл ТОҠОМБӘТОВА, Ейәнсура районы Ибрай ауылы:**



- Шәл бәйләр өсөн дебет сифатлы булһын тиһәң, кәзәгә айырым тәрбиә кәрәк. Дебетен һыуыҡтар үтеп, яҙ башланмаҫ борон, февраль аҙағы-март баштарында тарап алаһың. Бигерәк тә беҙҙең яҡтарҙа тәкә дебете, муйын еренән алынған дебет юғары баһалана, уларҙан ҡара йылҡылдап торған шәл килеп сыға. Дебетте тарап алғас, йылы урынға ҡуйып киптереп, аҙаҡ төп таҙартыу, эшкәртеү эше башлана. Өмә ойоштороп, һуҡтырып алаһың, иләйһең, махсус еп менән ҡатлап, сиратып алғас, шәл бәйләү өсөн еп әҙер була. Бик тырышҡанда, бер аҙнала бер шәл бәйләргә мөмкин. Бер ай эсендә дүрт-биш шәл бәйләп ултырыусылар ҙа бар. Шәл бөгөн тағы ла ғаиләне туйындырыусы бер шөғөлгә әйләнеп бара. Юғиһә, бер нисә йыл элек уның баһаһы төшөбөрәк китте. Ул йылдарҙа үҙебеҙ өсөн генә бәйләнек, тип тә әйтергә була. Бөгөн ауылдарҙа ошо шәл аҡсаһына ғына хужалығын нығытҡан, балаларын уҡытҡан кешеләр бар. Беҙҙең шәлдәрҙе Йылайыр, Әбйәлил райондары, Ырымбур өлкәһенең Һарыҡташ районы һатып ала. Ауыл шәлдәре оҙаҡ ҡарһа ла, улар тиҙ генә ойоша һалып бармай, йомшаҡлығын һәм матурлығын оҙаҡ һаҡлай. Ғөмүмән, дебеттән бәйләнгән ойоҡбейәләйҙәр, шапка, шарф, түшлектәрҙең сәләмәтлек өсөн дә шифаһы юҡ түгел. Ул дауалау сифатына эйә, төрлө һыҙланыуҙарҙы баҫа. Шәл бәйләү эше менән бергә уға бәйле йолалар ҙа яңынан ҡайта. Хәҙер йәш еңгәйҙәр ҡәйнештәренә мотлаҡ рәүештә бирсәткә бәйләп бирергә тейеш. Әйтергә кәрәк, борон-борондан шәл ололау билдәһе булған. Тап шуға ла ҡәйнә буласаҡ килененә шәлде алдан иң матур дебеттән инселәп бәйләй һәм туй ваҡытында килендә бейетеп, изге теләктәр теләп, уның иңенә яба.

**(Аҙағы 16-сы биттә).**

ҺОРАУ - ЯУАП

### Ҡайтанан имтиханмы?

**Мине дүрт айға машина йөрөтөүгә хоҡуғымдан мәхрүм иттеләр. Тиҙҙән бындай осраҡта ҡайтанан имтихан бирергә мәжбүр итәсәктәр, имеш, тип ишеттем. Был дөрөҫмө?**

**А. Хәмиҙуллина.**

Юҡ, һеҙҙең осраҡта был талап ителмәй. Ә бына кем бер нисә йылға машина йөрөтөү хоҡуғынан мәхрүм ителә, уларға суд машина йөрөтөү теорияһы һәм практикаһын мотлаҡ ҡайтанан тапшырыуҙы талап итә. Әлбиттә, Дәүләт Думаһының ҡайһы бер депутаттары юл йөрөү ҡағиҙәһен боҙған бөтә водителдәрҙә лә ҡайтанан аттестациялау яғында, ләкин был тәҡдим бойомға ашмаҫ, ахыры, сөнки уға ҡаршылар бик күп.

### Ваҡытлыса рөхсәт

**Водитель танытмамды алдырҙым, ләкин миңә транспорт сараһы менән идара итеүгә ваҡытлыса рөхсәт ҡағыҙы бирҙеләр. Тик уның срогы тулды, рөхсәт ҡағыҙы ваҡытын ҡайҙа оҙайтып алырға?**

Автомобиль менән идара итеүгә ваҡытлыса рөхсәт әлеге ваҡытта һеҙҙең административ тәртип боҙоу эшен ҡараған орган тарафынан оҙайтыла. Әгәр ул ЮХХДИ-ла икән, тимәк, улар тарафынан оҙайтыла, ә инде эшегеҙ судта, ләкин әле ҡаралмаған хәлдә, рөхсәтте суд оҙайта ала. Рөхсәт суд ҡарары сығарылған ваҡытҡа тиклем оҙайтыла.

### Әсә капиталына - машина

**Беҙгә "Әсә капиталы" сертификаты бирелде һәм беҙ уға машина һатып алырға теләйбеҙ. Ләкин был осраҡта фәҡәт үҙебеҙҙең илдә етештерелгән машина алырға кәрәк, тип ишеттек. Был дөрөҫмө?**

"Балалы ғаиләләргә өҫтәмә дәүләт ярҙамы тураһында" 2006 йылдың 29 декабрендәге Федераль законның 10-12-се статьяларына ярашлы, әсә (ғаилә) капиталы алған кешеләр был аҡсаны фәҡәт торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға (йәки ипотека кредитын түләргә), йә булмаһа баланы уҡытыуға тотона, шулай уҡ аҡсаны хеҙмәт пенсияһының тупланма өлөшөнә күсерә ала. Ләкин был аҡсанан тыш, ғаиләгә 12 мең һум күләмдә бер тапҡыр түләнә торған пособие бирелә - был сумманы инде ғаилә үҙе теләгән маҡсатта тотона ала.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

### Бауыр ауыртҡанда

**Бауырҙы үләндәр менән дауалар алдынан табипҡа күренергә, УЗИ үтергә кәрәк, сөнки бауыр кәҙәнәктәре ҡосһоҙләнгәндә, йә үт ҡыуығында таш булғанда үт ҡыуҙыра торған үләндәр эсергә ярамай. Үләндәрҙе бер -ике көн эсеп кенә ташлап ҡуймағыҙ, тотош курс үтергә тырышығыҙ. Таштар бәләкәй булғанда, үт тоткарланып торғанда түбәндәге үләндәр файҙалы булыр.**

15 грамм кукуруз ептәренә бер стакан ҡайнар һыу ҡойоп төнәткәс, һөҙөп алып, көнөнә 1-әр ҡалаҡлап 4-5 тапҡыр эсһәң, үт ҡыуыла, бәләкәй таштар, ҡом сыға һәм бауырҙың кәҙәнәктәре яңыра. Быһың өсөн өлгөргән кукуруз ептәрен генә ҡулланығыҙ.

Әлморон емеше А, В2, Р, К һәм С витаминына бай, шуға ла ул үт ҡыуыу өсөн ҡулланыла. 20 грамм емешкә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 10 минут ҡайнатып алырға ла, төнәтергә. 2 ҡат марля аша һөҙөп алғас, 1 балғалаҡ бал ҡушып, ярты стаканлап көнөнә 2 тапҡыр аш алдынан эсергә.

Бер балғалаҡ цикорий тамырын ваҡ ҡына итеп турап, 5 минут ҡайнатырға ла, шуға 1-әр балғалаҡ меңъяпраҡ, һары мәтрүш, кейәү үләне (чабрец), ҡырҡбыуын (хвощ), һарыгүҙ (золототысячник) ҡушып, өҫтөнә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 20 минут тотҡас, һөҙөп алып, 3-4 өлөшкә бүлеп эсергә.

5 грамм алоэ һутына 5 грамм мумие ҡушып, иртәле-кисле бер ай буйы эсеп алһаң, бауыр һауығыр. Шулай уҡ 50 грамм сөгөлдөр һутына 100 грамм кишер менән ҡыяр һуты ҡушып, көнөнә 1 тапҡыр эсеп торғанда үт ҡыуығы таҙарыр, бауыр йүнәлер. Бауыр бал да ярата. 1 балғалаҡ балға 1 балғалаҡ һеркә (пыльца) ҡушып, 200 грамм йылы һыу менән болғатып, көнөнә 5-6 тапҡыр эсһәң, файҙаһы тейә.

Расторопша үләне бауырға файҙа бирә. Уны төнәтеп торорға ваҡытығыҙ тар булһа, дарыуханан "Гепатрин" алығыҙ, ул ошо үләнде ҡулланып эшләнелгән. Зыяны юҡ, ә файҙаһын үҙегеҙ күрерһегеҙ. Көнөнә 1 тапҡыр ғына иртәнге аштан һуң сәйнәмәй генә йылы һыу менән йотоп ебәрергә. Бер ҡабы дауаланыу курсы өсөн етә.

Бауыр ауыртмаһын, тиһәгеҙ, дөрөҫ туҡланығыҙ, көнөнә 5 тапҡыр әҙләп кенә таҙа ризыҡтар ашағыҙ, сәләмәт тормош алып барығыҙ, юҡ-барға ҡыҙып бармағыҙ. Ит майҙары, майҙа ҡыҙҙырылған ризыҡтар, төрлө маринадтар, магазин торттары, пирожныйҙары ашарға тырышмағыҙ. Алкоголле эсемлектәр, "Кока-кола", "Фанта", оҙаҡ һаҡлана торған башҡа аҙыҡтар менән мауыҡмағыҙ.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

*✓ Башҡорттарҙы "иштәк" тип атау ҡасандыр Көньяҡ Уралда йәшәгән "дах" исемле һинд-иран ҡәбиләһе менән бәйлелер. "Хешдах", йәки "хешдек" ҡәүеме иран телендә шулай уҡ "баһадирҙар нәҫеле" тигәнде аңлата.*

ТАМЫРҘАРҘЫ ЮЛЛАП...

# МЕҢ УҠЛЫ ТОҠОМ,

## йәки Ғәйнәләр ҡалдырған эҙҙәр буйлап сәйәхәт

**Уҙған аҙнала Башҡортостан Республикаһында Пермь крайы башҡорттары мәҙәниәте көндәре сиктәрендә Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы) Башҡарма комитеты "Пермь башҡорттары: тарих, заман һәм рухи үҫеш перспективалары" темаһы буйынса түңәрәк өҫтәл ойошторҙо. Ошо ҡыҙыҡлы һәм фәһемле форумда Пермь крайынан килгән рәсми делегация ағзалары, республикабыҙҙың башҡорт йәмғәтселеге вәкилдәре, билдәле ғалим-тарихсылар фекер алышты, боронғо ғәйнә башҡорттарының мәҙәниәтен, үҙаңын, бигерәк тә татар теле менән алыштырылыуға дусар ителгән ғәйнә диалектын тергеҙеүгә арналған тәкдимдәр менән сығыш яһаны. Һеҙҙең иғтибарығыҙға түңәрәк өҫтәлдә сығыш яһаған ғалимыбыҙ, РФА Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының этнология бүлеге мөдире, тарих фәндәре кандидаты Ринат ЙОСОПОВтоң мәҡәләһен тәҡдим итәбеҙ.**

➔ **Солтанай (хәҙерге Пермь крайы ауылы) башҡорттарының ата-бабалары кем булған?** Пермь крайында йәшәүсе ғәйнә башҡорттарының антропологик тибының килеп сығышын билдәләү боронғо тарихыбыҙға яңыса ҡараш булдырыу мөмкинлеген аса. Ошо маҡсатта үткәрелгән краниологик тикшеренеүебеҙҙә (баш һөйәктәре үлсәмдәрен сағыштырыу) Солтанай краниологик серияһы һөҙөмтәләрен Көньяҡ Урал, Рәсәй һәм Ҡаҙағстан территорияһындағы археологик ҡомартҡыларҙан алынған баш һөйәктәренең 29 серияһы менән махсус критерийҙар буйынса сағыштырыу ысулы ҡулланылды.

Тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә хәҙерге ғәйнә башҡорттарында ир-ат субпопуляцияһының антропологик тибы ҡатнаш булып, унда көньяҡ сығышлы ҡуңыр европеоид компоненты өҫтөнлөк итеүе билдәле булды. Ғәйнә башҡорттары ҡыҙҡатындарының антропологик тибында иһә урындағы субураль антропологик тибына хас сифаттар өҫтөнлөк алған.

Башҡорттарҙың башҡа айырым төркөмдәре, Волга буйы, Ҡаҙағстан һәм Урта Азия халыҡтары менән сағыштырыу ғәйнәләрҙең иң элек көньяҡ-көнбайыштағы юрматы, Дим, Ашҡаҙар бассейнында йәшәүсе мең һәм төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының (мәҫәлән, Кушнаренко районы Мәүлет ауылы) дыуанай ырыуына яҡын булыуын күрһәтте. Күрше йәшәгән халыҡтарҙан ғәйнәләргә краниологик комплекс һыҙаттарының морфологик яҡынлығы буйынса XIII-XIV быуаттарҙа Көньяҡ Арал буйында йәшәүселәр, хәҙерге үзбәктәр, һуңынан сыуаштар йәнәш тора. Пермь крайы ғәйнәләренең башҡа ырыуҙар менән бәйләнешен этнографик материалдар, айырып әйткәндә, ырыу-ҡәбилә атрибутикаһы ла раҫлай. Р.Ғ. Кузеев иҫәпләүенсә, ғәйнәләрҙең 38 тамғаһының 20-һе юрматыларҙыҡы менән бер иш.

Бынан артыҡ алыҫ булмаған осорҙа төньяҡ-көнбайышта йәшәүсе ғәйнәләр һәм көньяҡ-көнбайыш башҡорттары өсөн уртаҡ торна культы булыуы уларҙың бәйләнеше йәиһә туғандашлығы хаҡында һөйләй. Ә торна боронғо үҫәргән ырыуҙарының изге ҡошо булып иҫәпләнгән. Ғәйнәләр араһында мөйтән, тау, иштәк, сураш (күгәрсен) этнонимдары булыуы, уртаҡ тамғалар, ҡош культы боронғо төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының, йәғни хәҙерге ғәйнәләрҙең ата-бабаларының үҫәргән, бөрйән, түңгәүер, мең кеүек башҡорт ырыу-ҡәбиләләре менән тығыҙ бәйләнештә йәшәүен аңлата. Р.Ғ. Кузеев фекеренсә, XII-XIII быуаттарҙа Урал алдының дала һәм урман-дала зоналарына, Бөгөлмә-Бәләбәй ҡалҡыулығының киң территорияһына Минзәлә яҡтарынан, боронғо Болғарҙан ғәйнәләрҙең ата-бабалары күсеп килә. Тарихи Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышы һәм көньяҡ-көнбайышы тарафтарына ҡыпсаҡ ҡәбиләләр берләшмәһе күпләп күсеп килә башлағас, XIII-XIV быуаттарҙа ғәйнәләр төньяҡҡа, Кама буйына барып етә. Р.Ғ. Кузеев тап шул осорҙа ғәйнәләрҙең күсмә ҡәбилә вәкилдәре менән ҡушылыуы арҡаһында Пермь башҡорттарының ҡыпсаҡлашыуы тураһында һығымта яһай.

Пермь крайы ғәйнәләре антропологик тибының тарихи йәшен анығлау өсөн Солтанай ауылынан алынған краниологик материалдарҙы б.э. I мең йыллығына һәм унан да иртәрәк булған савромат-сармат дәүеренә ҡараған палеоантропологик материалдар фонында анализлау ысулы ҡулланылды. Солтанай серияһы үҙенең билдәләре буйынса Урал буйының пьянобор (Ҡушул) һәм ҡара-абыҙ (Шипово, Биктимер), шулай уҡ Иҫке Ҡыйышҡы Һәм Өмөтбайҙағы иртә һәм урта сармат мәҙәниәттәре ҡомартҡыларына тура килә. III-IV быуаттарҙағы Халыҡтарҙың бөйөк күсеше осорона ҡараған Иҫке Мушты (БР-ҙың Краснокама районы) палеоантропологик материалдары тикшереү өсөн алынған Солтанай серияһы күрһәткестәренә ныҡ яҡын. Был курган-грунт ҡәберлеге материалдары иртә бахмутин (мазунин) археологик мәҙәниәтенә ҡарай, ул Көньяҡ Уралдағы һуң сармат дәүере халҡының һун-сармат күскенселәре баҫымы аҫтында төньяҡҡа, урманлы Кама буйына һәм Ағиҙелдең түбәнге ағымы яҡтарына күсеп китеүе менән бәйле. Шулай итеп, ғәйнә башҡорттарынан алынған краниологик материалдар уларҙың көньяҡ-көнбайыш башҡорттарының европеоид билдәләре иң көслө сағылған мең ҡәбиләһенә яҡын булып, соматологик күрһәткестәре буйынса (тән, сәс, күҙ төҫө, йөҙ формаһы һ.б.) понтий, йәки көньяҡ сығышлы ҡуңыр европеоид тибына ҡарап, шулай уҡ Көньяҡ Уралдың европеоид сак-массагет халыҡтарына һәм уларҙың III-IV быуаттарҙа Кама буйҙарына күсенгән вариҫтарына морфологик яҡынлығын дәлилләй. Был ғәйнәләрҙең һәм башҡа боронғо башҡорт ҡәбиләләренең тарихи йәшен боронғолата һәм уларҙың расогенезын Көньяҡ Уралдың европеоид тибындағы сак-массагет халыҡтарынан булған, фин-уғыр күршеләре һәм һун-сармат дәүерендәге төрки күсмә ҡәбиләләре менән тығыҙ бәйләнештә йәшәгән сармат-аландарға тиклем еткерә. Күрәһең, Алтайҙан Дунайғаса йәйелеп йәшәгән боронғо сак-массагет (савромат-сармат, сармат-алан) донъяһы халыҡтарының әкренләп төркиләшеүе бик ҡеүәтле һинд-иран платформаһында бара. Әммә был процесс халыҡтарҙың һәм мәҙәниәттәрҙең тулыһынса алмашыныуына килтермәй. Евразия киңлектәрендә көн иткән төрки телле халыҡтарҙың һәр ҡайһыһы тик үҙенә генә хас булған антропологик составын, төрки дәүеренәсә үк ғөрөф-ғәҙәттәренә һәм телдәренә инеп ҡалған архаик элементтарын һаҡлап ҡалыуы ошоно дәлилләп тора. Был һығымта көньяҡ-көнсығыш, көньяҡ-көнбайыш башҡорттары миҫалында ла, халҡыбыҙҙың иң төньяҡ төркөмөнә ҡараған ғәйнәләрҙең этник нигеҙен борон сармат-алан һәм фин-уғыр ҡәбиләләре тәшкил итеүен раҫлаусы факттар аша ла раҫлана.

➔ **Йәшәгән, ти, Ғәйнә менән Әйнә...** Башҡорттарҙың был төркөмө этнонимының килеп сығышы ҡыҙыҡлы. Ғәйнәләрҙең сығышын сағылдырған риүәйәттәрҙә бер туған Ғәйнә һәм Әйнә исемле батырҙарҙың Тулва буйҙарына боланға атлап килеүҙәре тураһында бәйән ителә. Ут эйәһе Тулава менән алышта Әйнә һәләк була, ә Ғәйнә утты (ҡояшты) ер аҫты донъяһынан азат итеп, Тол йылғаһының көньяғына алып килә. Бына ошо легендар Ғәйнә батырҙан уның күп һанлы тоҡомдары таралып китә. Бында ғәйнәләрҙең этник тарихында миграция факторы сағылышы һәм яңы ерҙәр өсөн көрәш алып барыу мотивтары асыҡ күренә.

Ғәйнә ырыуына нигеҙ һалыусы заттар кем булған икән? Был һорауға яуап бирер өсөн ғәйнәләргә краниологик билдәләре буйынса яҡын булған көньяҡ-көнбайыш башҡорттарын, атап әйткәндә, мең ырыуын иҫтә тоторға кәрәк. "Мең" һәм "ғәйнә" этнонимдарының семантик яҡтан да яҡын булыуын иҫбат итеп була. "Мең" этнонимы мендәрҙең тәү бабаһы тип иҫәпләнгән Үрҙәс бейҙең ( уны Санаҡлы-Син тип тә атайҙар) мең уҡлы ғәскәре булыуы менән бәйле. "Ғәйнә" этнонимының да "мең" мәғәнәһенә тап килеүен фарсы телендә ошо һүҙҙең мең һанын белдереүе аша аңлатып була. Тимәк, ғәйнәләрҙең теле төркиләшкәнгә тиклемге булған "ғәйн", йәғни "мең" төшөнсәһен белдергән атамаһы үҙгәртелмәйенсә һаҡланып ҡалған. Боронғо дәүерҙәрҙә мең яугирҙан хасил булған ғәскәр берәмеге "ғәйн" йәки "мең" тип аталып йөрөтөлөүен раҫлап була. Алтын Урҙа дәүерендәге монгол ғәскәрендә лә ошондай бүленеш булып, һәр мең яугир "мең башы" (темник) ҡулы аҫтында яуға барған.

➔ **Ҡәберлектәр - боронғо тарих ярсыҡтары.** Иртә тимер быуаты осорондағы археологик материалдарҙы тикшергәндә хәҙерге башҡорттарҙа, шул иҫәптән ғәйнәләрҙә лә, төрки дәүеренә тиклемге халыҡтарҙың ҡәберлектәрендәге ерләү камераларының һәм ҡәбер өҫтөндәге ҡоролмаларҙың оҡшаш элементтары һаҡланып ҡалыуы иғтибарҙы йәлеп итә. Ошондай уртаҡ элементтарҙан мәйетте ҡәбер төбөнә һалмайынса, уны ҡәберҙең көньяғындағы махсус уйымға - ләхеткә ҡуйыуҙы атап була. Боронғо ғөрөфкә ярашлы, башҡорттар ҡәбер төбөнә ҡамыш, кипкән үлән, йүкә ҡабығы түшәгән, йәиһә мел ҡатламы һалған. Был ғәмәл изге ерҙең сакраль таҙалығын һаҡлау ниәтендә мәйеттең тәнен ергә тейҙермәү өсөн башҡарылған. Ләхет таҡта, саман кеүек әйбер менән ҡапланып, уның өҫтөнә ен-бәрейҙәрҙе ҡурҡытыр өсөн артыш ботаҡтары һалынған. Билдәле булыуынса, артыш боронғо сак-массагеттарҙа изге үҫемлек булараҡ киң ҡулланылған.

Башҡорттарҙың ҡәбер өҫтөнә ағас бура ҡороуында ла бик боронғо ғөрөф ҡалдығын һиҙемләп була.

Боронғо дәүерҙәрҙә мәйеттең тәнен ҡош-ҡорт таҙартып ашап бөтһөн өсөн махсус бураға һалып ҡуйыу ғөрөфө булған. Мәҫәлән, зороастрийҙар кешенең тик таҙа һөйәктәре ҡалған һөлдәһен генә ерләгән.

Ошо йәһәттән, башҡорттарҙа "Ҡарға туйы", "Ҡарға бутҡаһы" байрамының һаҡланып ҡалыуы үтә ҡыҙыҡлы. Тау биттәрендә ҡар ireү менән, ҡатын-ҡыҙҙар ритуаль бутҡа бешереп, байрам ҡорған. Байрам аҙағында ашалып бөтмәй ҡалған бутҡа, ҡарғаларға тәғәйенләнеп, таш өҫтәренә, ағас ботаҡтарына һалып ҡалдырылған. Шулай уҡ ағас ботаҡтарына төҫлө яулыҡтар, таҫма, туҡыма киҫәктәре элеп ҡуйылған. Ғәҙәттә, был йоланы буласаҡ уңыш хаҡына Тәбиғәт-әсәгә килтерелгән хәйер, тип ҡарайҙар. Минеңсә, башҡорттарҙың "Ҡарға туйы" - Исламға тиклемге боронғо дәүерҙәрҙә зороастр динен тотоусыларҙың мәйетте дахмаға (беҙҙең ата-бабаларыбыҙҙа - бураға) һалып ҡуйыу ғөрөфөнән ҡалған йола. Көньяҡ Уралдың сак-массагеттар мөхитендә был йола "каргас той" - "гриф байрамы", тип йөрөтөлгән булырға тейеш, сөнки иранлылар грифты "каргас" тип атай. Хәҙер беҙҙә грифтар осрамаһа ла, ҡасандыр Көньяҡ Урал ошо йыртҡыс ҡоштарҙың йәшәү ареалына ингән.

Савромат-сармат тип аталған ҡәүемдәр йәшәгән Көньяҡ Урал иртә тимер быуат осоронда зороастризм дине таралған зонаға ингән. Зороастрийҙар мәйетте махсус яһалған дахмаға ҡуйып, йыртҡыс ҡоштарҙы йәлеп итер өсөн уның эргәһенә икмәк, ит киҫәктәре һалып, текә итеп һөйәп ҡуйылған носилкаға туҡыма киҫәктәрен бәйләп ҡалдырыр булған. Бер нисә көн үтеүгә, мәйеттең таҙа һөлдәһе генә тороп ҡалғас, уны ерләү мөмкин булған.

Шулай итеп, башҡорттарҙа "Ҡарға туйы" байрамы, мәйетте ләхеткә һалыу, ҡәбер өҫтөнә бура ҡуйыу зороастризмдан ҡалған ғөрөфтәр рәтенә инә. Ғәйнәләрҙә ләхетте бар яҡтан да таҡта менән көпләү киң таралған. Башҡортостандың урман-тау башҡорттарындағы кеүек үк, Пермь крайы ғәйнәләрендә ҡәбер өҫтөнә бура ҡуйыу йыш осрай.

➔ **Башҡорт - баһадирҙар нәҫеле.** Хәҙерге башҡорт телендә, ҡайһы бер уғыҙ һәм иран телдәрендәге кеүек үк, боронғо **һ, ҫ, ҙ, ҡ** фонемаларының һаҡланып ҡалыуын, Пермь крайында Тулва, Тол, Барҙа, Ҡаҙмаҡты, Башҡортостанда Һаҡмар, Һүрән, Өршәк гидронимдарының, айырым топонимдарҙың фарсы тамырлы булыуын ошо боронғолоҡҡа ишара итеп ҡабул итеү фарыз.

"Башҡорт" этнонимын төрки теле ерлегендә "баш бүре" мәғәнәһендә аңлатыуҙың төрки дәүеренә тиклем үк иран нигеҙе булыуы мөмкин. Минеңсә, "башҡорт" этнонимының нигеҙендә "бачагург" атамаһы булһа, фарсы теленән "бача" - бала, "гург" - бүре рәүешендә тәржемә ителә. Әгәр был атама "бачагурд" формаһында булһа, "гурд" һүҙенең иран телендәге "баһадир" мәғәнәһен иҫәпкә алғанда, "бачагурд" баһадир нәҫеле, батыр балаһы тигәнгә тура килә. Башҡорттарҙы "иштәк" тип атау ҡасандыр Көньяҡ Уралда йәшәгән "дах", йәки "дак" исемле һинд-иран ҡәбиләһе менән бәйлелер, моғайын. "Хешдах", йәки "хешдек" ҡәүеме иран телендә шулай уҡ "баһадирҙар нәҫеле" тигәнде аңлата. Яйыҡ йылғаһының Даик формаһы борон "дах/дак/дай" (бөйөк, дәү һүҙҙәренә тура килә) тип аталған ҡәүем йәшәгән йылғаны белдереүе мөмкин.

**Шулай итеп, антропология, ерләү йолаһы, этнонимия өлкәһендәге мәғлүмәттәр хәҙерге башҡорттарҙың, шул иҫәптән ғәйнәләрҙең дә, расогенетик һәм тарихи тамырҙарының боронғолоғон раҫлап, уларҙың этник башланғысын сак-массагеттар һәм күсмә һун-сармат донъяһы менән бәйләргә ерлек бирә. Үҙенең боронғо ата-бабаларының иҫ китмәле бай генофондын һаҡлаусы башҡорт халҡының этногенезы башында ошондай ҡеүәтле компонент булыуы боронғо тарихыбыҙҙы тергеҙеү өсөн яңы мөмкинлектәр аса.**

***✓ Кочубейға оло ҡарттаһы Булаттың ғәрәп телен дә, немец, урыҫ, фарсы һәм башҡа телдәрҙе белеүе, иҫәп-хисапҡа бик шәп булыуы тураһында һөйләп ҡалдыра. "Удивительный башкир" тип йөрөтәләр уны.***

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# БУЛАТ ҠЫЛЫС ОҪТАҺЫ...

## башҡорт улы Булат булыр

Алтынтамаҡ (Златоуст) ҡалаһының тимер, ҡорос һәм бигерәк тә булат ҡоросоноң баш ҡалаһы икәнлеге бөтә донъяға билдәле. Алтынтамаҡ ҡалаһы заводтарында эшләнгән ҡылыстар быуаттар буйы Рәсәй империяһының барлыҡ баҫҡынсылыҡ һуғыштарында ҡулланылған. Был һуғыштарҙа Рәсәй һуғышсыһы булып ҡатнашҡан олатайҙар һөйләп ҡалдырғаны буйынса, булат ҡылыс менән ҡаршы яҡ һуғышсыһының ҡылысын өҙә сабып ырғытыу осраҡтары бик күп булған. Йоҡа, еңел, ҡаты, үтә һығылмалы һәм бик үткер булат ҡылыс менән эйәр өҫтөндә ултырған дошманды ҡулбашынан кендегенә тиклем яра саба алғандар. Алтынтамаҡ ҡалаһында булат ҡоросонан төрлө-төрлө ауырлыҡта, оҙонлоҡта ҡылыстар яһағандар. Әммә,нигеҙҙә, ике төрлө - шәшке ҡылыс һәм тартым ҡылыс. Шәшкене - "казачий", ә тартым ҡылысты "солдатский" тип атағандар.

Булаттың үҙе һәм уның менән завод тимерлегендә эшләгән башҡа иптәштәре боронғо йола буйынса ҡылыстарҙың һаптарын, бигерәк тә һап осон - әпесен, фарсы, ғәрәп, төрки ғәҙәтенсә, арыҫлан, ҡаплан, йылан, турғай, ыласын, шөшкә башлы итеп яһаған. Әйтергә кәрәк, ҡылыс, хәнйәр һәм һуғыш өсөн кәрәк-яраҡтар ҙа бында, Алтынтамаҡта, эшләнгән.

Иван Михайлович Кочубейға оло ҡарттаһы (олатаһы) Булаттың ғәрәп телен дә, немец, урыҫ, фарсы һәм башҡа телдәрҙе белеүе, иҫәп-хисапҡа бик шәп булыуы тураһында һөйләп ҡалдыра. "Удивительный башкир" тип йөрөтәләр уны. Мине бигерәк тә Булаттың немец телен белеүе аптыратты. Тимәк, ул немец мөхитендә эшләгән, йәшәгән. Үкенеслеһе шул: ваҡытында был мәғлүмәткә мин аҙ иғтибар иткәнмен, ауыл хужалығы эшендә эшләй инем шул!

Алтынтамаҡ тимер иретеү, ҡорос һуғыу заводында ҡорал яһау эштәре ун һигеҙенсе быуаттың һикһәненсе йылдары уҡ башлана. Ә рәсми рәүештә ул 1814-1816 йылдарҙа ғына таныла. Иван ағайҙың хикәйәте, Булатты башҡорт итеп һөйләүе ғорурлыҡ хисе уятһа ла, икенсе яҡтан күңел төбөндә ниндәйҙер шик тә ҡалдырған төҫлө. Шулай ҙа күңел Иван ағайҙың һүҙҙәрен дөрөҫкә сығарырға тырыша. Беренсенән, "булат" һүҙе урыҫ теленә төркиҙән ингән. Икенсенән, Ғосман империяһы әрмеһе, нигеҙҙә, Дамаск ҡоросонан (Тәмәскә ҡоросо) эшләнгән ҡылыстар, хәнйәрҙәр, һөңгөләр менән ҡоралланған булған. Уның даны Европаға, Византияға, Рәсәйгә килеп еткән. "Булатная сталь" тигән төшөнсә көнсығыш Европала, Африкала, Ғәрәбстанда юҡ кеүек. Ә Урта һәм Яҡын Көнсығыш илдәренә уның даны ныҡ таралғандыр, моғайын.

Ғөмүмән, Булат исеме ҡайҙан килеп сыҡҡан һуң? Һис шикһеҙ, ул исем төрки телле халыҡтарҙыҡы. Тимерсе, ҡоросо Булаттың ҡайһы милләт вәкиле булыуын раҫлау күҙлегенән уның ата-бабаларының мөмлүк булыуын, Кавказ, Ғәрәбстан, Көнбайыш Европа илдәрендә әсирлектә йөрөгән күҙ уңында тотоп, Булат исеменең ҡайһы халыҡтарҙа булыуын өйрәндем. Бының өсөн Рәсәй Федерацияһы Юстиция министрлығы тарафынан ҡулланыу өсөн сығарылған "Справочник личных имен народов Российской Федерации" тигән китапҡа мөрәжәғәт иттем. Һинд-европа телле халыҡтарҙа Булат исеме юҡ. Ибер, Кавказ телле халыҡтарҙа (абхаз, адыгей, лаҡ, авар, лезгин һ.б.) телдәрҙә лә юҡ. Әммә ҡабарҙы-черкес халҡында Болэт исеме бар, урыҫса яҙылышы Болет тип бирелгән. Бүрәт халҡында Булад исеме бар, ҡалмыҡтарҙа ундай исем юҡ. Төрки телле халыҡтар араһында алтай, хакас, нуғай, ҡырым татарҙарында, сыуашта, яҡутта ла бындай исемде йөрөтөүселәр юҡ. Мосолман динендә булған осетиндарҙа, ҡарасәйҙәрҙә, ҡумыҡтарҙа, туваларҙа Болат тигән исем бар. Был халыҡтарҙың һөйләш телендә лә ул исем Булат түгел, ә Болат. Әйтелештә һәм урыҫса яҙылышта ла Булат исеме тап башҡорт вариантынан алынған. Булат исеме татар телендә лә бар, әммә ул Итил-Булыға болғарҙарына беҙҙән күскән булырға тейеш. Болғарҙар араһына Батый хан заманында килеп кергән Тату халыҡтарын да ҡушып, Урыҫ империяһы ул ҡәүемгә "татар" тип дөйөм исем биргәс, был атама яҙма һәм сәйәси ерлектә ереккән. Ғөрөф-ғәҙәт, исемдәр аралашыуы, ҡандаш, диндәш булып киткәс, яйлап болғарҙар нигеҙендә татар милләте формалаша. Болғар теле менән сыуаш теленең яҡынлығын иҫкә алһаҡ, сыуашта Булат исеме булмағас, болғар телендә лә Булат исеме булмаған. Булат - фәҡәт башҡорт исеме!

**Булаттың тыуған ерҙәренә нисек ҡайтыуы ла билдәһеҙ. Шулай ҙа Иван Михайловичтың Булаттың битендә тамға булыуы хаҡында әйткәне лә хәтерҙә. Тимәк, ул башҡорт яуҙарында ҡатнашҡан. Тик тағы ла билдәһеҙлек. Бәпәнә Төрәпбирҙин, Йосоп Арыҡов, Төлкөсура, Ҡараһаҡал, Салауат менәнме? Әллә башҡа хилафлыҡтары өсөнмө империя уға мөһөр баҫҡан?**

Булат тураһында яҙа башлағас, инде күптән ишеткән бер ҡыҙыҡлы хәбәр хәтергә төштө. Үткән быуаттың илленсе йылдары башында беҙҙең ғаилә Учалы районы Һөләймән ауылында йәшәне. Ата-инәм ауыл мөғәллимдәре булды. Ул ваҡытта мөғәллимдәр етмәү сәбәпле, уларҙы бер ауылдан икенсе ауылға күсереп йөрөтәләр ине. Шул Һөләймән ауылында немец телендә яҡшы һөйләшеүсе Бәшәров Шәйхетдин исемле бабай көн күрҙе. Ул атайымды бик ихтирам итте. Әҙ генә буш булһа, һәр саҡ атайым янына килеп, һәр төрлө үткән ваҡиғалар тураһында һөйләшер ине. Беренсе Бөтә донъя һуғышы башланыуға, йәғни 1914 йылда ул, үҙе һөйләүе буйынса, базрап торған ҡоростай 26 йәшлек ир була. Һуғыштың тәүге көндәренән үк ул мобилизацияға эләгә. Һуғышҡа тиклем үк ул урыҫ армияһында гусар полкында сабельник булып хеҙмәт иткән була. Әҙер һуғышсы туранан-тура яу яланына эләгә. Бик ҡаты һуғыша Шәйхетдин Бәшәров. Һуғыштарҙың береһендә атака ваҡытында артиллерия снарядының Шәйхетдиндең аты аҫтында ярылыуынан ат уртаға өҙөлә яҙа. Шәйхетдин бик ҡаты яра һәм контузия алып, иҫһеҙ килеш австрийҙарға әсирлеккә эләгә. Уны үлектәр менән сығарып ташлаһалар ҙа, ул үлмәй. Эшсе көсө етмәгәнлектәндер инде, яралыларҙы дауалайҙар. Һауыға биргәс, ауыл эшен белгән Шәйхетдинде бер немец бюргеры эшкә ала. Был немец фермерының ярайһы уҡ ҙур тимерлеге булып, Шәйхетдин тимерлектә эшләй. Телде бер аҙ үҙләштергәс, Шәйхетдин тимерлектәге эшселәр һәм хужа бюргер менән дә ярайһы уҡ аралаша башлай. Бер көн уға бюргер: "Тимерсе булырһың. Һин бит Рәсәй төркие, Урал еренән. Минең олатайҙың атаһының Булат исемле бик маһир тимер оҫтаһы булған", - ти ҙә, Шәйхетдиндән һорап та тормаҫтан, һуҡҡыс (молотобоец) итеп ҡуя. Минең ерҙәштәр элек бында ни эшләнеләр икән, ҡайҙан килеп сыҡҡандар, тип аптырай Шәйхетдин. Биш йыл эсендә яҡшы итеп немец телендә һөйләшергә өйрәнә. Аҙаҡ ул бик оҫта тимерсе Булатты ҙур немец начальнигы алып китеүе тураһында ла ишетә. Булаттың семәрләп эшләгән ҡапҡалары әле лә торған була. Немец бюргеры күршеләре алдында ҡапҡаһының ныҡлығы һәм семәрлеге менән һәр саҡ маҡтанған. Уйлап ҡараһаң, әгәр шул фараз дөрөҫ булһа, бюргерҙың ҡапҡалары 100 - 110 йыл самаһы торған. Ҡалын металл өсөн был әллә ни күп түгел.

Шәйхетдин бабай атайыма оҙон кистәрҙә һәр саҡ үҙенең әсирлектәге көндәрен һөйләр булды. 1945 йылда Австрияға барып еткән, Венаны алыуҙа ҡатнашҡан атайымдан һәр саҡ йөрөгән ерҙәренең исем-атамаһын әйтеп һорар булды. Шәйхетдин ҡарттың Булатының ҡороссо Алтынтамаҡ Булаты менән уртаҡлығы бармы-юҡмы, билдәһеҙ. Әммә немецтарҙың хәтерендә ҡалған Урал төркийе Булаттың Австро-Германия ерҙәрендә эшләүе бәхәсһеҙ. Сөнки Шәйхетдин ҡарт был хәбәрҙе һөйләмәҫ ине.

Булаттың тыуған ерҙәренә нисек ҡайтыуы ла билдәһеҙ. Шулай ҙа Иван Михайловичтың Булаттың битендә тамға булыуы хаҡында әйткәне лә хәтерҙә. Тимәк, ул башҡорт яуҙарында ҡатнашҡан. Тик тағы ла билдәһеҙлек. Бәпәнә Төрәпбирҙин, Йосоп Арыҡов, Төлкөсура, Ҡараһаҡал, Салауат менәнме? Әллә башҡа хилафлыҡтары өсөнмө империя уға мөһөр баҫҡан?

Булатсы Аносов иһә Златоуст заводтарына 1816-1817 йылдарҙа килә. Златоуста һалҡын ҡорал заводы булғанға тиклем үк унда ҙур ҡорал тимерлеге эшләй. Тәүге булат ҡоросо Аносовҡа тиклем үк эшләнгән була. Аносов килгәнсе үк булат ҡоросон эшләү алымдары камиллаша, ҡулайлаша килеп, Аносовҡа уны тик яҙып ҡалдырырға, Булаттың тимерҙән - ҡорос, ҡоростан булат эшләүен күҙәтергә, күрергә насип була. Булат үлгәс, Аносов уның барлыҡ алымдарын ҡулланып, һәр төрлө тәжрибәләр эшләп ҡарай. Ләкин был ҡылыстар Булат үҙе эшләгән ҡоралдарға ҡарағанда түбәнерәк сифатлы була. Булатҡа көнләшеп ҡараусылар ҙа, күрә алмағандар ҙа булғандыр. Ҡорама ауылында Сәғитов Кәрим Нурислам улы тигән үткер фекерле, тарихты яҡшы белеүсе, бәйетсе бабай бар ине. Кәрим бабай ҡунаҡта, бабайҙар ҡоронда, "Бүгәй васыятнамәһе" тип, Златоустка арналған бик оҙон бәйет әйтеп һамаҡлай торғайны. Ул бәйет көлкө лә, ҡыҙғаныс та ине. Үкенес, уның ауыҙынан яҙып алып ҡалырға зиһен етмәгән, йәшерәк инем шул. Унда күмергә алмаштырып он алыу, урыҫтарға оброкка арыш һаламы алып барыу, сөйгә ит алмаштырыу, ер һатыу, розга һуҡтырыуҙар, хатта завод хужаларының изге шәһиттәрҙе боҙ аҫтына ташлау кеүек хәлдәр сағылғайны. Батшаға эшләп биргән ҡылыс тураһында һүҙ бар ине бәйеттә.

"Ҡулдан һуҡҡан ҡара ҡылыс - Йөҙ ҙә һикһән һумлыҡ әжере", - тигән һүҙҙәре генә иҫтә ҡалған. Бында һүҙ, һис шикһеҙ, булат ҡылыс тураһында бара. Сөнки ҡылыс ҡоросо ҡара семәрле булырға тейеш. Бер ат ул ваҡытта күпме торғандыр. Ете - ун дүрт һум араһы, булһа кәрәк. Тимәк, батша һарайы һәйбәт аҡса түләгән.

**Спартак ИЛЬЯСОВ.**

**(Дауамы. Башы 44-46-сы һандарҙа).**

*БЫЛ - ГОНАҺ!*



## Кеше үлтереү

**Ҡөрьәндә әйтелә: "Кем дә кем мәкер менән кеше үлтерһә, эстәрендә дөрләп ут янған йәһәннәм уның мәңгелек язаһылыр. Аллаһ уға ғазап бирер, ләғнәт ебәрер һәм уның өсөн ауыр яза әҙерләр" (Ән-Ниса, 93).**

"Улар Аллаһҡа тиң эҙләмәҫ, башҡаға табынмаҫ. Улар мәжбүрлектән тыш, Аллаһ тарафынан тыйылған эште ҡылмаҫ - хаҡһыҙға әҙәм йәнен ҡыймаҫ, зина ҡылмаҫ. Ошоларҙы эшләгән кеше гонаһ алыр. Ҡиәмәт көнөндә уларҙың язаһы арта төшәр һәм улар мәңгегә хур булып ҡалыр. Ямандан тәүбәгә килеп, иман килтереп, изгелек ҡылғандарҙың яманлыҡтарын изгелеккә алмаштырыр (ҡылған гонаһтарын ярлыҡап, сауаплы эшкә күндерер). Аллаһ ярлыҡаусы, бик тә мәрхәмәтле" (Әл-Фурҡан, 67-70).

Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи вә сәлләм): "Ете һәләкәтле гонаһты эшләүҙән тыйылығыҙ", - тигән һәм улар араһында "Кеше үлтереү"ҙе лә әйтеп уҙған.

Бер көндө Бәйғәмбәребеҙҙән (саллаллаһу ғәләйһи вә сәлләм): "Бөйөк гонаһҡа нимә керә?" - тип һорағандар. Ул: "Һине яралтҡан Аллаһҡа тиңдәшлек килтереү", - тип яуап биргән. Сәхәбәләр: "Ә һуңынан?" - тип һораған. "Үҙең менән бергә ашай башлап, ас ҡалыуҙан ҡурҡып үҙ балаңды үлтереү". Сәхәбәләр: "Ә һуңынан?" - тип һораған. Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи вә сәлләм): "Күршеңдең ҡатыны менән зина ҡылыу", - тип яуап биргән.

Бер көндө Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи вә сәлләм) былай тигән: "Әгәр ҙә ике мосолман бер-береһенә ҡорал терәһә һәм уларҙың кемеһелер икенсеһен үлтерһә, улар икеһе лә тамуҡҡа эләгер". Сәхәбәләр: "Эй, Аллаһтың илсеһе! Үлтереүсе менән аңлашыла, ә үлгән кешенең ғәйебе нимәлә?" - тип һорағандар. Быға ул: "Уның да ниәте үлтереү ине", - тип яуап биргән.

Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи вә сәлләм) шулай уҡ былай тигән: "Кеше Аллаһы Тәғәлә тыйған үлемдең ҡатнашыусыһы булмаһа, тыныслыҡта йәшәр", "Минең үлемемдән һуң бер-берегеҙҙең муйынын ҡырҡыр хәлгә етеп иманһыҙ булмағыҙ", "Иманлы кеше, тыйылған ҡанды ҡыймаһа, тыныслыҡта йәшәр", "Ҡиәмәт көнөндә кешеләр араһындағы тикшереү иң беренсе ҡан ҡойоштан башланыр!", "Һәр төрлө гонаһтың ғәфү ителеүенә өмөт итергә була, ләкин иманһыҙ булып үлеүсе һәм мосолманды үлтереүсе генә өмөтһеҙ".

Хәҙистәрҙә тағы ла былай тиелә: "Бөтә гонаһтарҙың да иң ҙуры - күп илаһилыҡ, кеше үлтереү һәм ата-әсәне тыңламау", "Кем мосолманды ярты һүҙ менән булһа ла үлтерергә ярҙам итә, Аллаһы Тәғәлә ҡаршыһына маңлайына "Аллаһтың рәхмәтенән мәрхүм ителде" тигән яҙыу менән баҫасаҡ".

***✓ Советтар Союзында йәшәгән граждандар берлеген совет халҡы тип атауҙа хата булманы, сөнки этник, милли үҙенсәлектәр менән гражданлыҡ сифаттарын параллель категориялар рәүешендә ҡарарға кәрәк.***



# РӘСӘЙЛЕМЕН, ӘММӘ

## йәки Гражданлыҡтан

**Һуңғы йылдарҙа Рәсәй зыялылары бар халыҡ тарафынан ҡабул ителерлек дөйөм милли идея табырға тырышты. Тап бына шундай идея форматында Рәсәй граждандар милләтен (российская гражданская нация) төҙөү көнүҙәк мәсьәләгә әйләндерелеп, уны ғәмәлгә ашырыу буйынса бик әүҙем эш алып барыла: йәмәғәт ойошмаларының "Рәсәй милләте" бөтә Рәсәй берлеге, уның сайты, ордены булдырылды, "Вестник российской нации" исемле журнал баҫылып сыға башланы. Ҡәҙимге милләт төшөнсәһенә яңы йөкмәтке һалыу ниндәй маҡсатта башҡарылыуын асыҡлау мөһим. Ошо турала ҡоролған әңгәмәбеҙҙә философия фәндәре докторы, профессор Фәнил ФӘЙЗУЛЛИН һәм Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы) Башҡарма комитеты рәйесе Румил АҘНАБАЕВ ҡатнашты.**

▶ **Йәмғиәт мөхитенә "граждандар милләте" төшөнсәһен индереү ниндәй маҡсатҡа ярашлы башҡарыла?**

**Р. АҘНАБАЕВ:** Һеҙ күтәргән мәсьәлә беҙгә байтаҡтан таныш, һәм беҙ уның асылына төшөнә алдыҡ, тип уйлайым. Быны элекке "совет халҡы" төшөнсәһе менән тиңләп була, тик ул хәҙерге шарттарға яраҡлаштырылып, "рәсәйлеләр милләте", тип атала. Был яңыртылған төшөнсәне беҙҙең аңыбыҙға төрлө юлдар менән һеңдерергә тырышалар. Бында АҠШ моделе өлгө итеп алынған: унда америкалылар бер милләт булһа, беҙҙәге барса халыҡтарҙан берҙәм һәм бүленмәҫ рәсәйлеләр милләтен яһау төп маҡсат булып тора. Был бойомға ашырылған хәлдә, һәр кем үҙенең милли сығышын, булмышын оноторға мәжбүр ителәсәк. Әммә Рәсәй менән Американы сағыштырыу дөрөҫ түгел: америкалылар башлыса төрлө килмешәк ҡәүемдәрҙән хасил булһа, Рәсәй халыҡтары үҙ ерҙәрендә меңәр йылдар буйы йәшәй, улар үҙ төйәгендә айырым милләт булараҡ формалашҡан. Беҙҙең халыҡтарыбыҙ үҙҙәренең тарихын оноторға теләмәйәсәк һәм айырым милләт булып йәшәүҙән ваз кисмәйәсәк. Рәсәйле төшөнсәһе элек тә бар ине, әммә ул милләт менән түгел, ә дәүләт, гражданлыҡ төшөнсәләре менән бәйле булды. Урыҫ та, башҡорт та, башҡа милләт вәкиле лә "Мин - рәсәйле", тип әйтә ала, әммә бер саҡта ла үҙенең милли булмышын инҡар итмәй.

Милләтте кешегә көсләп тағып булмай. Ғөмүмән, Рәсәй халыҡтарынан бер милләт төҙөргә ынтылыу - яһалма идея. Бар кешене лә бер милләтле итергә тырышыу барса милләттәргә лә кире йоғонто яһаясаҡ. Был идея теоретик ҡараш ҡына түгел, ул, ғәмәлдә, милләттәр үҫешенә тотҡарлыҡ итәсәк. Мәҫәлән, Рәсәйҙең "Мәғариф тураһында"ғы законында милләт, милли мәғариф төшөнсәләренең булмауы үҙе үк күп нәмә тураһында һөйләй. Балаларҙы туған телдә уҡытыу, милли телде өйрәтеү хәҙер Федераль үҙәк кимәлендәге мәсьәлә булыуҙан туҡтап, тик урындарҙа ғына хәл ителергә тейеш булып сыға. Ә үҙен бары "рәсәйле" тип кенә һанаған кешегә урыҫ телен белһә, шул да етә. Тимәк, беҙ мәғариф өлкәһендәге милли хоҡуғыбыҙҙан яҙабыҙ икән, тора-бара милләтебеҙҙе юғалтыуға дусар буласаҡбыҙ.

**Ф. ФӘЙЗУЛЛИН:** Халыҡ, ил йәшәйешенең төрлө осорҙарында уның үҫешенә булышлыҡ итеүсе идеялар булырға тейеш. Әгәр халыҡты алға әйҙәүсе, йүнәлеш биреүсе, уға дәрт-дарман өҫтәүсе милли идея юҡ икән, уның хәрәкәте стихиялы, маҡсатһыҙ һәм буталсыҡ буласаҡ.

Әгәр беҙ Рәсәйҙең прогрессив дәүләт булып ҡалыуын, уның составында йәшәгән һәр халыҡтың иркен һәм ирекле үҫешә алыуын теләйбеҙ икән, уның күп милләтле булыуына нигеҙләнеп эш итергә тейешбеҙ. Бар халыҡтан бер милләт яһау өсөн ил етәкселәренә милләттәрҙе ҡыҫырыҡлау, уларға баҫым яһау юлын һайларға тура киләсәк. Ә уртаҡ Ватаныбыҙ берҙәм һәм бөйөк булһын өсөн бының киреһен - һәр милләт үҫә, сәскә ата алырлыҡ матди, сәйәси, мәҙәни һәм рухи шарттар булдырыу фарыз.

▶ **Коммунистик тәғлимәт тә ҡасандыр бар халыҡтарҙың бергә ҡушылып, айырым милләттәрҙең юғаласағын фаразлай ине. Хәҙерге Рәсәй сәйәсмәндәре милли мәсьәлә буйынса совет дәүере һабаҡтарын һанға һуҡмағандай тойола. "Рәсәйлеләр" милләтен булдырырға тырышыу "совет халҡы" төшөнсәһенең яңыртылған варианты түгелме икән?**

**Ф. ФӘЙЗУЛЛИН:** Эйе, заманында совет халҡы - яңы тарихи берлек, тип иғлан ителгәйне. Ысынында, был дөрөҫ атама, тип әйтер инем. Ни өсөн? Күп кешеләр, шул иҫәптән фән эшмәкәрҙәре, сәйәсмәндәр был төшөнсәне милләт төшөнсәһе менән бутап ҡарай. "Совет халҡы" бер ҡасан да этник төшөнсә йәки милләт категорияһы булманы, ул бары гражданлыҡ берлеген генә аңлата ине. Советтар Союзында йәшәгән граждандар берлеген совет халҡы тип атауҙа бер ниндәй хата булманы, сөнки этник, милли үҙенсәләктәр менән гражданлыҡ сифаттарын параллель категориялар рәүешендә ҡарарға кәрәк, уларҙы халыҡтар тормошонда йәнәш барған ике юлға тиңләп була.

▶ **Совет кешеләре тураһында һүҙ барғанда уларҙың милләтенә һәр саҡ иғтибар ителде: геройҙар - рус Алексей Маресьев, украин Олег Кошевой, грузин Михаил Кантария, башҡорт Миңлеғәли Ғөбәйҙуллин һәм башҡа бик күптәр үҙ халыҡтарының милли батырҙары иҫәбенә инә ине...**

**Ф. ФӘЙЗУЛЛИН:** Беҙҙең етәкселәребеҙ аяғы аҫтында әлеге лә баяғы бер тырма ята, һәм улар тырышып-тырмашып ошо тырмаға баҫырға ниәтләй. Уларҙың айырым милләт проблемаларын икенсе планға күсереп, Рәсәй халыҡтарынан бер милләт яһарға ынтылыуын ошондай хаталы аҙымға тиңләү раҫ. Гражданлыҡты милләт төшөнсәһе менән алмаштырып, бер дәүләттә йәшәгән этник төркөмдәрҙе юҡҡа сығарып булмай. Гражданлыҡ берәү, ә милләттәр күп. Әйткәндәй, заманында миллилек һәм гражданлыҡ айырымлығын халыҡ шағиры Мостай Кәрим бик дөрөҫ күрһәтә алған. "Рус түгелмен, ләкин россиянмын" формулаһының тәүге өлөшөндә кешенең милли үҙбилдәләнеше сағылһа, икенсеһе уның гражданлыҡ тойғоһон белдерә. Ошо хәҡиҡәтте ғалимдарыбыҙ ил етәкселәренә мотлаҡ еткерергә бурыслы.



***Бында АҠШ моделе өлгө итеп алынған: унда америкалылар бер милләт булһа, беҙҙәге барса халыҡтарҙан берҙәм һәм бүленмәҫ рәсәйлеләр милләтен яһау төп маҡсат булып тора. Был бойомға ашырылған хәлдә, һәр кем үҙенең милли сығышын, булмышын оноторға мәжбүр ителәсәк. Әммә Рәсәй менән Американы сағыштырыу дөрөҫ түгел: америкалылар башлыса төрлө килмешәк ҡәүемдәрҙән хасил булһа, Рәсәй халыҡтары үҙ ерҙәрендә меңәр йылдар буйы йәшәй, улар үҙ төйәгендә айырым милләт булараҡ формалашҡан.***

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ҡайһы бер сәйәсмәндәр һәм ғалимдар үҙҙәренең шовинистик идеяларын яңы формаға төрөп, беҙҙең аңыбыҙға һеңдерергә тырыша. Этнолог Валерий Тишков 1998 йылда уҡ "Вопросы философии" журналында "Забыть о нации" исемле мәҡәләһе менән сығыш яһап, милләт төшөнсәһенән ваз кисергә саҡырғайны. Бындай уйҙырмалар нисек кенә тәнҡит ителмәһен, ошондай фәнни яҡтан нигеҙһеҙ һәм ҡотҡоло ҡараштар үҙәк баҫмаларҙа һаман да әленән-әле сығып тора. Әйтергә кәрәк, Мәскәүҙең киң матбуғат саралары, радио, телевидение тап ошондай ҡарашлы кешеләрҙең генә фекерҙәрен киң һәм даими яҡтырта, ә улар менән килешмәгән ғалимдарҙың мәҡәләләренең ҡайһы бер өлөштәрен генә айырып алып, уларҙың ҡараштарын инҡар итергә тырыша.

▶ **Ә академик Валерий Тишков, РФА-ның Н.Н. Миклухо-Маклай исемендәге Этнология һәм антропология институты директоры булараҡ, ваҡ этностарҙы һәм милләттәрҙе яҡлау һәм һаҡлау сәйәсәтенә булышлыҡ итеү урынына, уларҙы юҡҡа сығарыуҙы маҡсат итеп ҡуйғандай тойола. "Рәсәй заманса коррекцияға мохтаж булған ниндәйҙер бер тарихи аномалия булып тора", - тип раҫлауҙан да тартынмай ул. 2008 йылда Бөтә Рәсәй Граждандар форумында уның: "Рәсәй республикаларында титулһыҙ милләт граждандарының һәм рустарҙың лайыҡлы статусын тәьмин итеү - заманса милли сәйәсәттең өҫтөнлөклө мәсьәләһе", - тип белдереүе милли республикаларға күрәләтә ғәйеп тағырға маташыу түгелме ни?**

**Ф. ФӘЙЗУЛЛИН:** Академик исемен йөрөткән ошо ғалим әйткән һүҙҙәрҙең ялған икәненә төшөнөү ҡыйын түгел. "Титуллы милләт" өҫтөнлөгө хаҡында яр һалыу үҙе үк ҡолаҡты ярып бара. Беҙ үҙебеҙҙе бер ҡасан да "титуллы" тип атаманыҡ, был ситтән индерелгән билдәләмә. Әммә беҙҙең меңәр йылдар ошо территорияла йәшәгән ерле халыҡ булыуыбыҙҙы барыһы ла белә, һәм беҙ тарихта ла аҫаба башҡорт булараҡ билдәлелек алғанбыҙ. Эйе, беҙҙең ерле халыҡ булыуыбыҙ дәүләтселегебеҙ нигеҙе булып тора, әммә беҙҙең рустарҙан, татарҙарҙан йәиһә йәһүдтәрҙән юғарыраҡ статусыбыҙ бер ҡасан да булманы. Киреһенсә, революцияға тиклем дә, Совет осоронда ла башҡорт халҡының йәшәү шарттары уға үҙ статусын күтәреү мөмкинлеген бирмәне. Мәҫәлән, башлыса ауыл мөхитендә көн иткән башҡорттарҙың интеллектуаль потенциалын ғәмәлгә ашырыу өсөн етерлек шарттар булманы. Ошо йәһәттән беҙ яҡуттарҙан, буряттарҙан күпкә артта ҡалдыҡ. Улар Санкт-Петербург вуздарында үҙ халҡының белем кимәлен күтәреү өсөн махсус милли төркөмдәр аса, был эште финанслай, ә беҙ ошо хаҡта уйлап ҡарағаныбыҙ ҙа юҡ әле.

**Р. АҘНАБАЕВ:** Бынан 450 йыл элек башҡорттар үҙҙәренең мәҙәниәте, йәшәйеш һәм үҫеш мөмкинлектәре буйынса рустарҙан бер ҙә ҡалышмаған. Күп тарихи осорҙар дауамында халҡыбыҙ үҙ аллы йәшәй алып, бер ниндәй бәйлелеккә дусар ителмәгән. Улар үҙ-үҙен тәьмин итеп йәшәүҙән тыш, сауҙа иткән, сит ерҙәргә сәйәхәт ҡылған, белем эстәгән, үҙ илен үҙе һаҡлай алған, башҡа халыҡтар араһында танылыу тапҡан. Минеңсә, артҡа ҡалыш Рус дәүләтенә ҡушылып йәшәгән осорҙа башлана. Сәбәбе: беҙгә үҙ тәртиптәрен, үҙ йәшәү рәүешен, үҙ ҡанундарын көсләп тағыуға, беҙҙе, йәнәһе, цивилизациялы халыҡ итеүгә йүнәлтелгән сәйәсәттең файҙаһынан зыяны күберәк булды. Инде нисә быуат буйына башҡортто ғөрөф-йолаларынан, теленән, диненән, мәҙәниәтенән, үҙенең йәшәү рәүешенән биҙҙерергә тырышалар, ә был халыҡты ҡаҡшатмай ҡалмай, әлбиттә. Совет осоронда ла милли булмышыбыҙ баҫылып килеп, ысын, тарихи мәҙәниәтебеҙ кәмһетелеп күрһәтелде, уға кире баһа бирелде. Ә халҡыбыҙ һаман да үҙе өсөн түгел, башҡалар файҙаһына бил бөктө, ә йәшәйешебеҙҙең ижтимағи-мәҙәни өлкәһе үгәйһетелгән хәлдә ҡалды. Шул уҡ ваҡытта "титуллы" халыҡтарҙың үҙ мәҙәниәтен үҫтерә алмауы, уларға Үҙәктән мотлаҡ етәкселек итеү кәрәклеге хаҡында уйҙырмалар барлыҡҡа килде. Милли республикаларын булдырған халыҡтарҙың үҙҙәренә айырым статус талап итеп, башҡаларҙың хоҡуҡтарын боҙоуы тураһында хәбәр таратыу шовинист сәйәсмәндәргә үҙ маҡсаттарын аҡлау өсөн генә кәрәк.

**Ф. ФӘЙЗУЛЛИН:** Яңыраҡ миңә революцияға тиклем баҫылып сыҡҡан статистика мәғлүмәттәре менән танышырға тура килде. Шул рәсми материалдарға ярашлы, ул осорҙағы башҡорттарҙың белем алыу күрһәткестәре рустарҙыҡынан юғарыраҡ булып сыҡты. Ә бит байтаҡ йылдар буйына беҙгә башҡорт халҡы наҙан булған, яҙмаһы, әҙәбиәте, мәҙәниәте булмаған, тип тылҡып килделәр. Ә статматериалдар бының киреһен күрһәтә: баҡһаң, Өфө губернаһы китап-брошюралар иҫәбе буйынса Ҡаҙандан алдараҡ торған (Мосолмандарҙың дини үҙәгенең дә хәҙерге Башҡортостан ерлегендә урынлашыуын иҫәпкә алырға кәрәк), ә йән башына тура килгән китаптар һаны буйынса беҙ Урта Азия халыҡтарынан күпкә алдараҡ торғанбыҙ. Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев, Зәйнулла Рәсүлев, Аҡмулла, Ризаитдин Фәхретдинов кеүек зыялыларыбыҙ иҫке төрки яҙма телендә ижад иткән әҫәрҙәр бер үк ваҡытта башҡорт, ҡаҙаҡ һәм та-

***✓ Милли республикалар бөтөрөлһә, губерна, округ кеүек административ берәмектәрҙән генә федерация төҙөп булмай. Федерация - губерналар союзы түгел. Рәсәй Федерацияһының нигеҙендә милли республикалар ята.***



тар халыҡтары мәҙәниәтен үҫтереүгә хеҙмәт иткән.

**▸ Беренсе Рәсәй тарихсыһы Петр Рычков та Рәсәй таумталлургия сәнәғәтенең нигеҙендә башҡорт мәғдәнселәре эшмәкәрлеге ята, тип юҡҡа ғына яҙып ҡалдырмағандыр ул...**

**Ф. ФӘЙЗУЛЛИН:** Ҡайһы бер Үҙәк баҫмаларҙа бөтә Рәсәй кимәлендә танылыу тапҡан башҡорт мәғдәнсеһе Исмәғил Тасимов тураһында әле лә "наҙан башҡорт", тип яҙалар. Күрәһең, ябай башҡорт кешеһенең белемле булыуы тураһында ныҡ шикләнгән Санкт-Петербург Тау институты профессоры, почетлы академик Д. И. Соколовтың: "Кто бы поверил, что полудикий башкирец из дымного аула своего положил первый камень в основание Горного корпуса", - тип һоҡланыу ҡатыш ғәжәпләнеп яҙып ҡалдырыуын дә булa бит, ә "этник шартлау"ҙың төбәктәргә лә, Үҙәккә лә төҙәтеп булмаҫлыҡ зыян килтереүе мөмкин. Тимәк, халыҡтарҙың үҙбилдәләнешкә хоҡуғын таныйбыҙ икән, милли республикаларҙың суверенлы дәүләтселеген дә тергеҙеү мотлаҡ. Был һыналған һәм килешеүҙәр нигеҙендә тыныс юл менән хәл ителә торған берҙән-бер юл. Беҙгә милли мәсьәләләрҙе хәл иткәндә СССР һәм яңы Рәсәй тарихынан һабаҡ алыу фарыз.

**▸ Бөйөк державасылыҡ шовинизмы идеяларын алға һөргән сәйәсмәндәр милли республикаларҙы хатта СССР-ҙың тарҡалыуына килтергән төп сәбәп сифатында күрһәтергә маташа...**

**Ф. ФӘЙЗУЛЛИН:** Киреһенсә, союздаш һәм автономиялы республикаларҙың булыуы ил берлеген нығытыусы фактор булып торҙо. Башҡортостан йәиһә башҡа өлкәләрҙә үҙ ҡулы һәм аҡылы ярҙамында тапҡанға үҙе хужа булырға хаҡлы.

**Р. АҘНАБАЕВ:** Милли республикалар суверенитет иғлан иткәндә Рәсәйҙән айырылыу тураһында бөтөнләйгә һүҙ булманы. Киреһенсә, был сәйәси аҙым Федерацияны нығытыуға ғына булышлыҡ итте. Республикаларҙы сепаратизмда ғәйепләргә тырышыусылар яҡындағы тарихыбыҙҙың үҙ фекерҙәренә тура килмәгән факттарын онотторға тырыша. СССР халыҡтары референдумда илде тарҡатмау өсөн тауыш биргәйне, әммә М. Горбачев һәм Б. Ельцин араһында барған көрәш, нисек булһа ла власты үҙ ҡулдарына алыу теләген өҫтөн күргән "яңы демократ"тар халыҡ фекерен бар тип тә белмәне.

**▸ Был, халыҡ әйткәнсә, ҡара бесәйҙең ғәйебен аҡ бесәйгә япһарыу була инде...**

**▸ Рәсәйҙе берҙәм граждан милләтле дәүләткә әйләндерергә теләүселәр, асылда, милли республикаларға ҡаршы заговор-фетнә ойоштора. Быны объектив фекер йөрөткән рус ғалимдары ла таный. Мәҫәлән, социология фәндәре докторы Вячеслав Локосов ошо хаҡта бына нимә ти: "Әгәр дәүләт ҡоролошоноң нигеҙе итеп граждандар милләте алына икән, рәсәйлеләр милләте дәүләт төҙөүсе тип таныла һәм Федерация субнациональ, йәғни административ-территориаль принципҡа ярашлы үҙгәртеп ҡоролаҫаҡ". Яңы идеология яҡлы сәйәсмәндәр Рәсәй Конституцияһындағы "күп милләтле Рәсәй халҡы" тигән төшөнсәне бөгөн үк "Рәсәй милләте" һүҙбәйләнеше менән алмаштырыуҙы көҫәй...**

**Ф. ФӘЙЗУЛЛИН:** Бында барыһы ла асыҡтан-асыҡ әйтелгән: граждандар милләтен таныу идеяһына илдең этнонациональ нигеҙҙәрен, тимәк, Федерацияның милли-территориаль ҡоролошон бөтөрөү фекере һалынған.

**Р. АҘНАБАЕВ:** Ә улар Федерацияны барлыҡҡа килтергән халыҡтарҙың быны нисек ҡабул итәсәге хаҡында уйламай, күрәһең. Беҙ ҙә шулай тип әйтә алабыҙ бит: "Әгәр һеҙгә милли республикалар кәрәкмәй икән, беҙгә тик рус идаралығына, мәҙәниәтенә һәм теленә генә нигеҙләнгән ил берләшмәһенең шулай уҡ кәрәге ҡалмаясаҡ. Беҙ Рәсәй составына үҙ иркебеҙ менән нисек ингәнбеҙ, шулай сығыу хаҡында уйларға мәжбүр ителәсәкбеҙ". Рәсәй өсөн бик хәүефле булған идеяны ғәмәлгә индерергә теләүсе сәйәсмәндәргә беҙ үҙ фекеребеҙҙе тап ошо рәүешле белдерәбеҙ.

**▸ Бөгөн Рәсәйҙә милли хоҡуҡтарҙы сикләү сәйәсәте киңәйгәндән-киңәйә бара: граждандарҙың паспортында милләт күрһәтелмәй, федератив дәүләттә Милли сәйәсәт министрлығы ла бөтөрөлдө, ил закондарынан мәғариф стандарттарының милли-төбәк компоненты алып ташланды, ә хәҙер сираттағы халыҡ иҫәбен алғанда ҡатнаш никахлы ғаиләлә тыуған граждандарҙы бер юлы ике милләтле итеп яҙыу хаҡында тәҡдим индереүселәр бар. Был да бәләкәй милләттәргә ҡараған кешеләрҙең башын бутау өсөн эшләнә түгелме һуң?**

**Р. АҘНАБАЕВ:** Был мәсьәлә халыҡ тарафынан күптән хәл ителгән: ҡағыҙҙа булараҡ, беҙҙә кешенең милләте атаһының милли сығышы буйынса билдәләнә. Милли үҙаңыбыҙҙы ла ата-бабаларыбыҙҙан алғанбыҙ, шуның өсөн дә ете быуынға тиклем үҙ шәжәрәңде белеү мотлаҡ булған халҡыбыҙҙа. Шәжәрәһен белгән кеше бер ҡасан да милләтен онотмаҫ. Был проблема кешенең милли аңында буталсыҡ тыуҙырыу өсөн махсус ҡуҙғатыла, минеңсә.

**Ф. ФӘЙЗУЛЛИН:** Һәр кеше үҙенең милли булмышын милли аңы аша асыҡлай. Үҙендә ҡайһы милләт мәҙәниәте вәкиле итеп ҡарайһың, ҡайһы милләттең рухын үҙләштерәһең - аңлы рәүештә ошо милләт кешеһе булаһың. Милли аңынан яҙған кеше маргиналға әйләнә. Мәктәптәрҙә милли тәрбиәне, милли компонентты юҡҡа сығарыуға йүнәлтелгән сәйәсәт тә халыҡты маргиналлыҡҡа дусар итәсәк. Ә үҙ мәҙәниәтен, телен, тарихын белмәгәндәргә "үҙ ерем, үҙ илем, үҙ халҡым", тип фекерләү ят буласаҡ. Милли ватансылығы булмаған маргиналдар өсөн тыуған ил төшөнсәһе лә юҡҡа сығасаҡ. Милли тойғонан башҡа граждандыҡ тойғоһо ла юҡ, улар бер-береһенә һис ҡаршы килмәй. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөгөнгө Рәсәй етәкселеге ошо хәҡиҡәтте аңларға теләмәй.

**Р. АҘНАБАЕВ:** Йәштәрҙә милли ватансылыҡ тәрбиәләнмәһә, Рәсәй патриотлығы ла юҡҡа сығасаҡ. Тыуған ил тойғоһо булмаған кешегә ҡайҙа йәшәһә лә барыбер - ул Америка йәки Европаны нығыраҡ үҙһенер. Беҙ ошо яңыртылған тип иҫәпләнгән милли сәйәсәт концепцияһын ҡабул итһәк, Рәсәйҙе һаҡларлыҡ кеше ҡалмаясаҡ, ә бында сит-яттар килеп туласаҡ. Шуға ла беҙ ошо идеологияға ҡаршы икәнебеҙҙе Мәскәү сәйәсмәндәренә лә еткерҙек.

**Ф. ФӘЙЗУЛЛИН:** Федераль матбуғат сараларында ошондай ҡатмарлы проблемаларҙы яҡтыртҡанда милли республикаларҙан бер кемде лә саҡырмайҙар, шуға бер яҡлы фекерҙәр өҫтөнлөк ала. Рус халҡына, уның мәҙәниәтенә шул бер үк хәүеф янай, сөнки сит ил идеологияһы принциптарына ҡоролған сәйәсәт Евразия халыҡтары менталитетына һәм мәҙәниәтенә төҙәтеп булмаҫлыҡ кире йоғонто яһаясаҡ. Милли сәйәсәтте дөрөҫ ҡора алыу Рәсәйҙең берҙәм ил булып ҡалыуы өсөн төп шарт булыуын онотмаһын ине ил етәкселәре.

# БАШҠОРТМОН ДА,

## милләт яһап буламы?

лил итәләрҙер ошо баһанан арына алмаусылар.

**Р. АҘНАБАЕВ:** Наҙан кеше үҙ заманының күренекле тау сәнәғәтсеһе булып китәме лә, батша властарынан бөтә Рәсәйҙә дан ҡаҙанған Тау институтын асыуҙы юллаусы була аламы?

**Ф. ФӘЙЗУЛЛИН:** Шуға күрә ваҡытында тарихта дөрөҫ баһаланмай ҡала биргән факттарға беҙ хәҙерге фән күҙлегенән объектив асыҡлыҡ индереп, быны киң йәмәғәтселеккә еткереп торорға бурыслыбыҙ. Бындай факттар милли потенциалыбыҙҙың бик ҙур булып та, әлегә асылып бөтмәүен белдерә. Тимәк, зыялыларыбыҙға киләсәктә ошо юҫыҡта эш итеү зарур.

**▸ Милләттең этнос булараҡ мәғәнәүи асылын граждандыҡ менән алыштырыу республикаларҙың үҙаллылығын тамам инҡар итеүгә алып килмәҫме?**

**Ф. ФӘЙЗУЛЛИН:** Беҙ ике тиҫтә йыл буйына суверенитет тураһында һөйләйбеҙ, ғәмәлдә, ул яңынан идея кимәленә кире ҡайтты. Хәҙер был һүҙҙе гәзит-журналдарҙа күрмәҫһең, радио-телевидениенан ишетмәҫһең. Конституциябыҙҙан сығарып ташланғас, уның өсөн бер юридик нигеҙ ҡалманы. Был хәлде милләттәрҙең халыҡ-ара кимәлдә танылған үҙбилдәләнешкә хоҡуғын инҡар итеү, тип баһаларға кәрәк. Был милли республикалар яҙмышына ғына түгел, Рәсәй киләсәгенә лә хәүеф тыуҙыра. Әгәр милләттәрҙең тәбиғи хоҡуҡтарын инҡар итеү, берҙәм граждан милләтле (тик урыҫ мәҙәниәте һәм теле нигеҙендә) булырға теләмәгәндәрҙе ситкә тибеү, милли хоҡуҡтарын яҡлаусыларға экстремист мөһөрөн баҫыу киң ҡолас ала башлаһа, был шовинистик сәйәсәт яңы конфликттарға килтереүе мөмкин. Түҙемлелектең дә бер сиге Татарстан республикаларын тарҡатып, һан яғынан өҫтөн булған рус халҡы йәшәгән башҡа өлкәләр менән бергә ҡушыу беҙҙең милләттәребеҙҙең иҡтисади, сәйәси, милли-мәҙәни нигеҙҙәрен дә юҡҡа сығарасаҡ. Урал ерлегендә милләт булып формалашҡан башҡорттар рус дәүләтенә үҙ ерҙәре, милке, хужалығы, идаралыҡ итеү рәүеше, ғәскәре, ғөмүмән, дәүләтселегe булған берҙәм халыҡ сифатында үҙ теләге менән ҡушылған. Иван Грозный даирәһенә килгән башҡорт ырыуҙары етәкселәре бөтә халыҡ исеменән батшаға үҙ талаптарын да еткерә: башҡорттарҙың аҫабалыҡ хоҡуғын таныу, эске идара итеү рәүешен һаҡлау, ғөрөф-ғәҙәттәренә, диниаңыстарына ҡыҫылмау. Шул уҡ ваҡытта улар үҙ өҫтөнә ил сиктәрен һаҡлау буйынса ҙур йөкләмә ала, башҡа бурыстарын да теүәл үтәй бара. Башҡорттарҙың Рус дәүләтендә йәшәгән тәүге осоро тыныс шарттарҙа үтә. XVII быуат башында власҡа Романовтар династияһы килгәс, килешеү шарттары үтәлмәй башлай. Күп һанлы башҡорт ихтилалдарының төп сәбәбе - батша властары тарафынан башҡорт мәнфәғәттәре һәм хоҡуҡтарының тупаҫ боҙолоуы ул. Рәсәй идеологтары тарих һабаҡтарын иҫәпкә алырға тейеш. Беҙ үҙ еребеҙҙә йәшәйбеҙ, һәм халҡыбыҙ ауыл хужалығында, сәнәғәттә,

**Р. АҘНАБАЕВ:** Тарихи ысынбарлыҡты күрәләтә боҙоп күрһәтеп, халыҡтың башын бутау, кешеләрҙең "мейеләрен йыуҙырыу" менән шөғөлләнгәндәр бер низән дә оялмай. Улар республикалар алып барған сәйәсәтте яманлап, уларҙың етәкселәренә яла яғыуҙан да тартынмай. Йәнәһе, милли республикалар үҙҙәренә башҡаларҙан күберәк талап итә, ә Рәсәй халҡы насар йәшәй. Ил иҡтисадына Башҡортостан, Татарстан кеүек республикалар индергән өлөштө күрмәмеш тә белмәмеш улар. Бөгөн бындай сәйәсмәндәр үҙ дәүләтселеге, үҙ территорияһы булған милли республикаларҙы аҫтыртын маҡсаттарына ҡамасаулыҡ итеүсе фактор



итеп ҡарай. Уларҙың ҡайһы бер республикалар етәкселәрен үҙ яғына ауҙарып, Рәсәйҙең милли-территориаль субъекттарын бөтөрөү менән ризалаштырыуы ла бик мөмкин.

**Ф. ФӘЙЗУЛЛИН:** Милли республикалар бөтөрөлһә, губерна, округ кеүек административ берәмектәрҙән генә федерация төҙөп булмай. Федерация - губерналар союзы түгел. Рәсәй Федерацияһының нигеҙендә милли республикалар ята. Илдең ошо һыналған милли-территориаль ҡоролошонан баш тартыу Рәсәй Федерацияһын юҡҡа сығарыуға тиң.

***Яңыраҡ миңә революцияға тиклем баҫылып сыҡҡан статистика мәғлүмәттәре менән танышырға тура килде. Шул рәсми материалдарға ярашлы, ул осорҙағы башҡорттарҙың белем алыу күрһәткестәре рустарҙыҡынан юғарыраҡ булып сыҡты. Ә бит байтаҡ йылдар буйына беҙгә башҡорт халҡы наҙан булған, яҙмаһы, әҙәбиәте, мәҙәниәте булмаған, тип тылҡып килделәр. Ә статматериалдар бының киреһен күрһәтә: баҡһаң, Өфө губернаһы китап-брошюралар иҫәбе буйынса Ҡаҙандан алдараҡ торған, ә йән башына тура килгән китаптар һаны буйынса беҙ Урта Азия халыҡтарынан күпкә алдараҡ торғанбыҙ.***

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ватаныбыҙҙа йәшәгән йөҙәрләгән милләттәрҙең мәнфәғәттәрен инҡар итеүсе сәйәсәттең һәм Рәсәй граждандар милләте идеологияһының ил тотороҡлоғон ҡаҡшатыуға алып барасағы тураһында һүҙ барҙы әңгәмәбеҙҙә. Шулай булғас, беҙгә ошо хаҡтағы ҡараштарыбыҙҙы Федераль үҙәккә мөмкин булған барса саралар аша еткерә алыу фарыз.**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

**Урал МОСТАФИН**

# ҠОЙОН ҠОЙРОҒО ОҘОН...

*(Повестың гәзит варианты)*



Икенсе, өсөнсө осрашыуҙары ла йылы ғына үткәс, Батыр менән Гүзәл бер-береһенә ҡәҙимге өйрәнеп, ылыға башланы. Эйе, килеп тә, Гүзәл йә инәйе, йә һеңлеһе эргәһенә киткән мәлдәрендә, күрешә алмаған көндәре булды. Ялдарында артыҡ барыр урыны булмағас, ул ҡыҙҙар урынына эшкә лә сыға икән. Дауаланырға йөрөр өсөн аҡса йыйям, тигәйне, шуға ла кеше урынына эшләйҙер. Хәҙер тыныс ҡына аңлашырға ла, кеше араһында үҙҙәренсә аралашырға ла ҡәҙимге өйрәнделәр. Ятаҡта йәшәүселәр Батырҙы танып, үҙҙәренең кешеһе кеүек күреп, һаулыҡ, хәл-әхүәл һораша.

Ҡояш бейегерәк күтәрелгән һайын, көндәр оҙайҙы. Гүзәлдең ял көндәрендә, байрамдарҙа гел бергә булдылар, кино, театрға барҙылар, хатта Батыр икенсе тапҡыр, хәҙер инде үҙ теләге менән, опереттаға барҙы. Ҡыуанып барҙы, сөнки опера театры үҙ тыуған яғы һымаҡ яҡын ине: ошонда, уйламаған ерҙә, килеп тапты бит ул Гүзәлен! Һиҙә йөрәк, һиҙә! Тик уны тыңлай белергә генә кәрәк. Бер нәмә һаман күңелен өйкәне: күрешәләр, һөйләшәләр, ләкин хәлде үҙ яйына ҡуйып көтөп ултырыу дөрөҫ түгел, берәй дауаланыу юлын белешергә, эҙләргә кәрәк, тигән уй тынғы бирмәне. Юлын эҙләрҙән алда ҡазаның сәбәптәрен белер кәрәк бит. Гүзәлде ҡаңғыртмай ғына, уңайын табып, ҡайҙан белергә, кемдән һорашырға икән, тип килә ятҡанында, әмәлгә күрә, ҡаршыһына Гүзәлдең ахирәте Аля (ата-әсәһе ҡушҡан исеме Әлфиә, шул матур исемдән дә кеше гәрләнер икән!) тап булды.

- Ә-ә-ә, Гарри Поттер, һаумы! Хәлдәр нисек мөхәббәт фронтында?- тине һаман энәләрен тырпайтып төрттөрөргә әҙер торған был ҡыҙ.

- Нишләп Геройҙан Гарри Поттер булып киттем әле? Күп уйлап йөрөнөңмө?

- Һуң, Батыргәрәйҙе заманса инглизсә әйтһәң, тап-таман Поттергарри һымаҡ яңғырай ҙаһа, ҡыҙыҡ бит, - тип һүҙ буҡкаһы бешерҙе Аля.

"Бер ҡыҙығы ла юҡ, исемемде боҙоп маташма! Мин инглиз түгел, башҡорт! Исемем үҙ телемдә лә матур яңғырай. Эргәбеҙҙә былай ҙа Алик, Эдик, Вадик, Гадиктар эт тубығынан", - тип асыуланырға иткәйне, ул шайтанды тыйып та, өйрәтеп тә, һатыулашып та еңеп тә булмаҫын белгәс, һүҙҙе икенсегә бороуҙы хәйерлерәк күрҙе.

- Әлфиә, бер генә үтенесем бар. Ҡыҫҡа ғына итеп булһа ла, ни хәлдән Гүзәл һөйләшеү һәләтен юғалтҡанын аңғартһаңсы? Уҡый, яҙа белгәс, ҡасандыр һөйләшкәндер ҙә бит? Берәй дауалау юлдарын белешәйем, тиһәм, ни сәбәптән икәнен һорарҙар, нимә тип әйтергә лә белмәйем. Ул үҙе йөрөп белешә алмай, минең врачҡа уҡып йөрөгән иптәштәрем бар, шулар аша белешер инем, исмаһам. Моғайын, берәй дауалау ысулы йәки икенсе бер сараһы барҙыр, ниңә эҙләп, белешеп ҡарамаҫҡа?

- Һорашырһың, тип көтөп йөрөгәйнем, яңылышмағанмын. Гүзәлдең хәлен ҡайғыртыуыңа, яҙмышына битараф булмауыңа шатмын. Һөйләйем, әйҙә ултырайыҡ, - тип, балалар майҙансығындағы эскәмйәләр яғына ынғайланы. - Ышаныслы егет күренәһең, бер нәмә сығара алмаһаң да, хәлде минән белешеүең хәйерлерәк. Оялтып, яраһын яңыртып, Гүзәлдән төпсөнмәһә ярар ине, тип уйлап йөрөй инем былай ҙа. - 5-се класта уҡып йөрөгәндә әсәһе менән мәктәптән ҡайтып килгәндәр, алдарында ғына көслө өйөрмә ҡупҡан. Ҡойон туҙанынан һаҡланабыҙ, тип, бит-күҙҙәрен устары менән ҡаплап, баштарын эйеп килеп, ҡаршы иҫкән ел-дауыл тауышынан арттарынан килеп еткән тракторҙы абайламай ҡалалар. Абайлаһалар ҙа, килеп етер ҙә эргәләренән үтер ҙә китер, тип уйлағандарҙыр, бәлки. Урамдан һыртҡа сыҡҡан тар тыҡрыҡ тәңгәленә еткән булғандар. Трактор шул ерҙә тыҡрыҡҡа киҫкен боролоп, һабаны менән быларҙы осора һуҡҡан. Бөтә һуғылыу көсө юл ситенән килгән әсәһенә төшкән. Гүзәл әсәһенең йөрәкте ярырҙай тауышын ишетеп өлгөрә, башҡа бер нәмә лә иҫләмәй, әсәһенең ышығында килгәнгә генә тере ҡала. Тракторсы һиҙмәй ҙә, бер нәмә лә булмағандай, китә лә бара. Анауындай ҡорос, суйындан эшләнгән ҡеүәтле нәмәнең кешегә һуғылыуы себендең филгә төкөүе һымаҡ ҡына булғандыр инде, ҡайҙан һиҙһен. Һуғылып ҡолағанда ишеткән аяныслы йән ҡыйылыу тауышы аңына һеңеп, йәнен йәрәхәтләп өлгөрә Гүзәлдең. Төшөндә әсәһенең йөрәк өҙгөс тауышын ишетеп, ул әле лә йыш илап уяна. Ҡапыл иҫен юғалтһа, бәлки, бер нәмә лә ишетмәҫ ине. Тауышҡа кешеләр килеп сығып, машинаһын табып, уларҙы район больницаһына алып барып еткергәнсе, әсәһе йән бирә. Гүзәлде ҡарайҙар, тикшерәләр, тәнендә, башында асыҡ йәрәхәттәре булмай, күгәргән, сыйылған ерҙәрен таҙалап, уколдар һалалар. Ҡурҡышынан мейеһенә психик шок алған, тигән һығымтаға киләләр. Ҡурҡышынанмы, һуғылыуҙанмы, икеһенән дә бергә алған мейе яраһынанмы, телдән яҙа. Әҙерәк тынысланғас һөйләшә башлар, тип, организмды көсәйтә, сыныҡтыра торған төрлө витамин, дарыуҙар менән дауалайҙар. Үҙенән-үҙе үтә ул, ваҡыт кәрәк, тип ышандырып сығаралар. Сыға инде, ғүмере буйы больницала йәшәй алмай бит. Йәйге каникулдар үтеүгә һөйләшә башлар, ғәҙәттәгесә, уҡыуға барыр, тип ышанып йөрөһәләр ҙә, һөйләшмәгәс, атаһы республика дауаханаһына алып бара. Унда байтаҡ тикшергәндән, дауалағандан һуң, уҡыталар ҙа, дауалайҙар ҙа тип, махсус интернатҡа юллама бирәләр.

Уҡыуын ваҡытлыса шунда башлаһын, юғиһә, тиҫтерҙәренән артта ҡалыр, әгәр һөйләшеү һәләте ни сәбәптәндер тергеҙелмәһә, интернатта һөнәргә лә уҡыталар, тигәстәре, атаһы риза була. Бәләкәй һеңлеһен инәйе, әсәһенең апаһы, тәрбиәгә ала. Атаһы был ҡайғынан оҙаҡ ҡаңғырып, ҡайҙа һуғылырға белмәй йөрөй: "Өйгә ҡайтһам, балаларым, әсәләре күҙ алдымда илашып тик торалар, йоҡлай алмайым, ҡайтҡым да килмәй", - тип көҙгә хәтлем шаңҡып йөрөй ҙә, ялға ҡайтҡан бер танышына эйәреп, Себер яҡтарына сығып китә. Шунан бер-ике тапҡыр ҡайтып күренә лә, юҡ була. Бәлки, яңы ғаилә ҡорғандыр. Кем белһен. Тәүҙәрәк инәйҙәренә әҙерәк аҡса ебәреп торған, хәҙер хат-хәбәре лә юҡ, ти. Интернатта 9 класты тамамлағас, күбеһен, шулай уҡ Гүзәлде лә һөнәрселек училищеһенә уҡырға йүнәлтәләр. Ике йылдан тегеүсе-моторист һөнәрен үҙләштереп ошо фабрикаға эшкә килде Гүзәл. Бында эшләгәненә 3 йыл инде. Һеңлеһе быйыл Стәрлетамаҡта пединститутҡа уҡырға ингән. Апаһына килеп йөрөй, йә Гүзәл үҙе бара. Һеңлеһен уҡытып бөтөргәнсе лә байтаҡ аҡса кәрәк булыр әле уға. Ялҡманыңмы? Тыңлайһыңмы?

- Эйе, эйе, тыңлайым. Һөйлә!

- Мин үҙем бында 4-се йыл эшләйем. Уҡырға инергә килгәйнем, конкурстан үтә алмағас, ауылға ҡайтырға оялып, икенсе йыл инеп ҡарармын тип, ошонда эшкә төштөм, эшем оҡшай, ҡабат уҡырға инеп маташманым. Бөтә кеше уҡып ҡына йөрөһә, уларҙы кем кейендерер, кем ашатыр, эсерер, кем уңайлы шарттар тыуҙырып хеҙмәтләндерер? Гүзәл бында килгәс, икенсе ҡыҙҙар менән йәшәй ине, ул йүнһеҙҙәрҙең ҡыйырһытҡанын күреп, бүлмәмдә урын бушағайны, үҙемдең эргәмә алдым. Шунан бирле бергә йәшәйбеҙ. Әлегә икәүбеҙ генә бер бүлмәлә, өсөнсө ҡыҙыбыҙ декретта, ауылға ҡайтып китте. Һинең кеүек "купшы егет" танышыуы хөрмәтенә бәпәй бүләк итте лә, вәссәләм, ҡойороғон һыртҡа һалып, әллә ҡайҙа олаҡты. Тағы бер асыҡ ауыҙҙың башын әйләндереп йөрөйҙәр әле. Бына шулай хәлдәр, Батырғәрәй ағай! Батыр булһаң, ысын батыр бул, мәмәй ауыҙ булып, кеше көлдөрөп йөрөмә инде, йәме? Былай ҙа алдаҡсы, буш ҡыуыҡ егеттәргә йоҙроҡтай дәғүәләрем күбәйеп китте, ышанысты аҡламаһаң, бөтә ауырлығы һинең ҡаҡ түбәңә төшөп ҡуйыуы ихтимал.

- Ярай, рәхмәт һиңә, Әлфиә! Шайтан күренһәң дә, улайһыңдыр тип ышанмағайным, яңылышмағаныма ҡыуанам. Күңелең йомшаҡ, кешелекле икәнһең. Гүзәлде үҙ туғаныңдан яҡын күреп хәстәрләүеңә мең рәхмәт! Тик кешене ул хәтлем битенән алып хур итмәсәле, уңайһыҙ бит. Мин былай ҙа ҡыйыуһыҙмын. Башҡа егеттәр ҙә һинең эргәңдә артыҡ тапҡырлығыңдан, ҡыйыулығыңдан ҡойолоп төшәләрҙер әле, шулаймы?

- Шулайыраҡ булмаһаң, өҫтөңә менеп баралар, әҙәп һаҡлайым, тип, бөтәһенә бирешеп торорғамы ни? Үҙебеҙҙе үҙебеҙ яҡламаһаҡ, беҙҙе кем яҡлаһын? Ҡурҡма, мин улай уҡ усал түгелмен, һиңә һәйбәт ҡәйнә булырмын! - тип шарҡылдап көлдө ихлас йән.

Шул эскерһеҙ һөйләшеүҙән һуң Әлфиә менән дә аралары йылынды. Бер уртаҡ сер белгән кешеләр кеүек, бер-береһенә ышаныслы ҡарай, һөйләшә башланылар.

Батыр таныш студент егеттәре аша невролог врачтар менән аралашып, дауаланыу ысулдарын һорашты, ундай ауырыуҙарҙы дауалаусы махсус клиникаларҙы белеште. Ихлас күңелдән, ипле генә, кеше хәлен хәстәрләп йөрөгән егеткә, кемгә мөрәжәғәт итһә лә, ярҙам итергә тырышып, алсаҡ күңел, йылы мөнәсәбәт күрһәттеләр, белгәндәрен әйттеләр, өйрәттеләр, үҙҙәренең кәңәштәрен бирҙеләр. Бер профессор, Гүзәлдең үҙен алып кил, тигәс, бергә барҙылар. Ҡарап, тыңлап, белешкәс:

- Ниңә быға хәтлем дауаланмай йөрөнөң? Даими күнекмәләр эшләп, йылына бер-ике ҡат реабилитация үҙәгендә дауаланһаң, әллә ҡасан һөйләшә башлар инең. Хәҙер һәләтеңде тулылынса тергеҙеүе ҡатмарлыраҡ та, оҙағыраҡ та булыр, ләкин түҙемлегең, тырышлығың етһә, өмөт бар. Һәр яраны яңыраҡ сағында дауалау хәйерлерәк, аҙып боҙола башлағас, мәшәҡәте күбәйә. Реабилитация үҙәгенә юллама бирәм, бер ай шунда ятып дауаланаһың. Унда махсус күнекмәләрҙең һиңә кәрәктәрен һайлап өйрәтерҙәр. Тик хәҙер үк һүҙ ҡуйышабыҙ: ысынлап та ихлас дауаланырға, һөйләшеү һәләтеңде тергеҙергә теләгең булһа, сабырлығың етһә генә мин һине үҙ ҡарамағыма алып ҡуҙатәм, ярҙам итәм, әгәр арыбире йөрөргә уйлаһаң, мин ваҡытымды әрәм итә алмайым. Бер башлағас, ыңғай һөҙөмтәгә өлгәшмәйенсә, туҡтарға ярамай. Көн һайын ныҡышмалы шөғөлләнгәндә генә файҙаһы булыр. Оялма, үҙең булдыра алғанса, күберәк һөйләшергә тырыш. Һүҙҙәрҙе асыҡ әйтә алмаһаң да, үҙалдыңа тауыш сығарып йырларға, көйләргә кәрәк. Тотлоғоуыңдан оялып, ошо хәлгә үҙеңде үҙең дусар иткәнһең, иҫеңдә тот: хәл-ваҡиғаларға яраҡлашып йәшәү үҙеңде һаҡлау түгел, ә юғалтыу, - тип атайҙарса орошоп та алды.

Һәйбәт кеше булып сыҡты ул профессор ағай. Уның кеүек кеше хәлен аңлап, ихлас ярҙам итергә әҙер тороусы кешеләр һирәк хәҙер, үкенескә күрә. Гүзәл отпускаһын алып, профессор биргән юллама менән дауалау үҙәгендә ятып, унан дәртләнеп, өмөтләнеп, ҡанатланып сыҡты. Ысынлап та, ниңә быға хәтлем, ғәйепле кеше кеүек, тәнәлеп йәшәгән икән? Ниңә һөйләшеү һәләтен тергеҙергә тырышып та ҡарамай, үҙен кәмһетеп, яттарҙан кәмһетелеп йәшәгән? Ниңә? Ниңә? Һорауҙары күп, яуабы ябай! Быға тиклем уның эргәһендә ышаныслы таянысы булманы! Хәҙер бар! Ниңә үҙенә ышанған кешене ҡыуандырмаҫҡа? Гүзәлдең ошоға тиклем ғүмерендә, тормошонда булған аяныслы хәлдәргә, үҙенең ғәмһеҙлегенә, көсһөҙлөгөнә йәнә көйҙә, яҙмыш юлына ҡоролған яһалма кәртәләргә емереү, һүтеү сәме уянды. Уның да башҡалар кеүек камил тормош менән йәшәргә хоҡуғы бар! Ниңә ул кемдәндер кәм йәшәргә тейеш? Хәҙер уның эргәһендә ышаныслы, көслө иптәше бар. Элегерәк уға бөтәһе лә, хатта яҡын туғандары ла, "бахыр" тип ҡараны, "зәғиф" тип йәлләне. Батыр ғына унда үҙенә тиң кешене күрҙе! Әлфиә тәүҙәрәк:

- Берәүгә лә бирешмә, ҡыйыу, усал бул! Һин кемдән кәм?- тип, әхирәтен әрләп, ғәрләндереп, илатып бөттө. Һөҙөмтәһе булманы, сөнки, әйтә-әйтә лә, эргәһенә ултырып, үҙен ҡосаҡлап илай ҙа ҡуя торғайны Әлфиә.

Батыр ныҡышмалы булды. Осрашҡан һайын һиҙҙермәй генә үҙенекен эшләне: үҙе китаптарҙан уҡып, студент иптәштәренән ишетеп белгәндәре буйынса ябай ғына күнекмәләр эшләтте. Махсус күнекмәләр икәнен белһә, үпкәләп ҡуйыр, тип, уларҙы бергә һөйләшеп йөрөгәндәге шаярыу кеүек итеп үткәрҙе. Үҙ бел-

деге менән ҡорған планы ла бар ине. Мәҫәлән, Гүзәлдең ҡулдарын үҙенең устарына алып: "Тау башында балҡый бер ҡала", - тип тыныс ҡына йырлап ебәрә, йәки "Мин умырзая, бул һин яҙ ғына", - тип һуҙа. Был ябай, ҡолаҡҡа ятышлы көй, моңдарҙы Гүзәлдең күңеленә һеңдерер ине теләге. Ул көйҙәр күңеленә хуш килһә, эштә лә, өйҙә лә үҙалдына көйләп йөрөр, тип уйланы. Ысынлап та, файҙаһы тейҙе! Гүзәл көйҙәң тылсымын һиҙҙе. Күпмелер ваҡыт уҙыуға үҙе лә Батырға ҡыйыу ҡушыла башланы. Һәйбәт, һәлмәк килеп сыҡһа, бала кеүек ҡыуана, күҙҙәре йызылдап, сикәләре алһыуланып, күңеле терелеп китә ине. Үҙенең һәләтлеген һиҙеүҙән дә ҙур ҡәнәғәтләнеү кисерә, имеш, әҙәм балаһы. Гүзәлдең киләсәккә өмөт-ышаныстары уянды, йәшәү мәғәнәһе тыуҙы...

* * *

Шул мәшәҡәттәрҙә йәй ҙә үтеп бара. Тыуған яҡтарына ҡайтырға форсат булыуға ҡарамай, Батыр быйыл да диплом алды практикаһын өйрәнгән урында үтергә ҡарар итте. Икенсенән, ҡалайтып яңы ғына уға, үҙенә ышанып дауаланырға, йәшәргә дәртләнгән кешене ярты юлда бер үҙен ҡалдырып китәһең. Улай ғәҙел булмаҫ ине. Өйрәнгән ере ҡалаға яҡын, аҙна һайын күрешеп торорҙар. Дөрөҫөн әйткәндә, практика үткән лесхозда уны һәйбәт беләләр, эшен урынына еткереп атҡарыуына ышаналар, шуның өсөн нимә, ҡасан эшләгәндәрен, үҙенә йөкмәтелгән бурыстарын нисек үтәгәндәрен артыҡ күҙәтеп йөрөүсеһе лә юҡ. Үҙе ҡалаға килеп, ике-өс көнгә ҡалһа ла, ҡурҡыныс юҡ, сөнки умарталарҙы ҡарап тороусы йәш ярҙамсыһы бар. Буштан буш практика үтеп кенә ваҡыт уҙғарып йөрөмәҫ өсөн, тәжрибә туплау өсөн дә йәйгелеккә бөтә умартасылыҡ эшен килешеү нигеҙендә үҙ өҫтөнә алған. Әҙ булһа ла, студент кешенең кеҫәһен тишмәҫлек аҡса түләйҙәр, мәшәҡәттәре күп, ләкин бушты бушҡа ауҙарып йөрөгәнсә, уныһы ла файҙалы. Баяғы планы буйынса, бер ялда Гүзәлде йәшәгән еренә саҡырҙы:

- Өйрәнгән поезына ултырып, инәйең йәшәгән ауылдан бер станция ары барып төшһәң, мин ҡаршы алырмын, - тине. Гүзәл ҡаршылашып торманы. Һөйләшкән көндәрендә Гүзәл кәрәкле станцияға килеп төштө, Батыр көтөп торғанын әллә ҡайҙан уҡ күреп килде. Батыр уның ҡулынан сумкаһын алып:

- Әйҙә, мин һине үҙемдең ерән ҡашҡа аткайыма ултыртып алып ҡайтам, - тип, етәкләп алып китте. Эргә-тирәлә машина-маҙар күренмәй, ул ерән ҡашҡаһы нимә икән, тип аптыраһа, ерән төҫтәге мотоциклда йөрөй икән. Бындай атҡа атланғаны булмаған, Гүзәл Батырҙың биленә сат йәбешеп, арҡаһына һыйынды.

Шаҡарайта йәбешеп бара биргәс, күҙҙәрен асһа, бағаналар йүгерешә, шунан ағастар, шунан тағы бағаналар... Уларҙың ярышып йүгереүенә баш әйләнә, сайҡалыуҙарынан күнел болғана. Ҡасан ғына барып етербеҙ инде, тип, күҙҙәрен йомдо ла, башҡа асмаҫҡа булды. Әҙме-күпме барғандарҙыр, сөнки ваҡытты тойоу һәләте әллә ҡайҙа ҡасҡан ине, матай шымып ҡалғас, күҙҙәрен асһа, шул көйө: ике ҡулы менән Батырҙың биленә йәбешкән, башы, кәүҙәһе менән арҡаһына һырынған да тик ултыра икән. Ситтән ҡараһаң, ҡыҙыҡтыр инде. Ултырған көйө тирә-яғын байҡаны. Алда һәҙәк кенә үҙәк ярға барып төшә, ҡыуаҡлыҡ араһынан шишмә аға, һыу аръяғында иркен ялан, бир яғы һап-һары, арыраҡ ҡып-ҡыҙыл, матур биҙәкле келәм һымаҡ күренә. Алыҫтараҡ ҡуйы урман аша күгәреп тауҙар теҙмәһе һыҙылған. Гүзәл тылсымлы тәбиғәт күренешенә ҡарашы арбалып тик ултырҙы. Унын хәлен аңлаған кеүек, Батыр ҙа урынынан ҡуҙғалманы. Ултыра торғас, муйыны талыпмы, был мөгжизәле күренешкә күҙе сағылыпмы, икенсе яғына әйләнһә, урман ситендә йәтеш кенә өй эргәһендә туҡтағандар икән. Арыраҡ һайғауҙар менән һирәк кенә кәртәләнгән ерҙә һары, аҡ, күк, йәшел төҫтәге умарталар теҙелеп киткән.

Гүзәл ҡымшанмай ултыра бирҙе. Ошо мәлдә тойған рәхәт, ләззәт хистәренән яҙғыһы килмәне: иң яҡын, ышаныслы кешеһенә һыйынып, тыныс ҡына ултырыуы рәхә-ә-әт! Яҡшылыкты яҡшылыҡ тыуҙыра. Тәбиғәттә хөрриәт. Ошоға тиклем әҙме-күпме йәшәгән хәүеф-хафалы ғүмерендә быйылғы йыл, Батыр менән танышҡандан һуң, яңы ваҡиғаларға, яңы өлгәштәргә, яңы хистәргә, яңы кисерештәргә иҫ киткес бай булды, йәшәүенә яңы төҫ, йәм, тәм бирҙе.

- Әйҙә инәйек! Өйҙөң тәүге яртыны эш булмәһе, бында умарта кәрәк-яраҡтары, эш ҡорамалдары, шуға әҙерәк тәртипһеҙлек булыуына аптырама. Мин үҙем ошо төпкө бүлмәлә йәшәйем. Бында ҡәҙимге таҙа, бөхтә бит, - тигән булды Батыр ыҡсым ғына йыйыштырылған бүлмәгә ингәс, аҡланған кеше һымаҡ. Йәтеш кенә кирбес мейес, газ плитаһы, стенала һауыт-һаба шкафы, аҫтында эре һауыт-һаба өҫтәле, иркен урындыҡтың бер мөйөшөндә ҡаралты йыйыштырылған. Тәҙрә эргәһендәге киңерәк өҫтәлдә китап-журнал, башҡа гәзит, ҡағыҙҙар күренә, ике ултырғыс. Өҫтәл тәңгәлендәге стенала төҫлө республика картаһы, ҡулдан һыҙылған төрлө һыҙмалар. Түбә өрләгәнә филтәле шәм эленгән. Ыҡсым бүлмәнең йәмге йыһаҙы, биҙәлеше шуларҙан ғибәрәт. - Һин ултырып тор, мин сәй ҡуйыйм. Ошо һауытта һыу, һауыт-һаба ошонда, икмәк, ярмалар ошо шкафта, май, картуфты иҙән аҫтындағы баҙҙа һаҡлайым, ошо ҡапҡасты асып ҡына ынтылып алаһың, - тип, бөтә хужалығы менән таныштырып сыҡты.

Ҡала күстәнәстәре менән ҡашыҡмай сәй эстеләр. Шунан умарталыҡты барып күрһәтәйем тигәйне, Гүзәл ҡорттар эргәһенә барырға ҡыйманы. Быға тиклем ҡабырсаҡта йәшәгән кеүек тормош рәүеше кисергәс, ҡапыл үҙенә таныш түгел, ят нәмәләрҙән шикләнеп, тартынды. Һәр яңы шарт, мөхит, хәлдән тертләп бизгән аңы барыбер бөтәһен дә бер юлы үҙләштерә алмаҫ ине. Батыр көсләшмәне:

- Ярай, икенсе тапҡыр барып күрербеҙ. Һин ултырып тор, юлдан ял ит. Мин умарталарҙы ҡараштырып киләйем, - тип сығып китте. Ул килгәндә Гүзәл тәҙрәләрҙе йыуып, кәсәктәрҙән туҙан һөртөштөрөп йөрөй ине. Ҡаралтыларҙы сығарып, ҡояшҡа киптерергә элгән. Плитаға ут тоҡандырып, үҙе алып килгән тауығын бешерергә һалырға ла өлгөргән.

- Уй, Аллам! Ыҙаламаһаң ни була? Үҙем йыуып, йыйыштыра алам бит һуң, - тип һукранған булды Батыр, эстән генә ҡыҙҙың үҙенә шөғөл табыуына ҡыуанып. Ҡатын-ҡыҙҙың тылсымлы ҡулы тейгәс, өйгә бөтөнләй икенсе йәм, ҡот ингән. Был күренешкә күңел йырлай: гел шулай һинең ҡайтыуыңды хәстәрләп көткән, һинең ярҙам, иғтибарыңа мохтаж кешең булыу, шул бәхеттер инде! Тыныс, мәшәҡәтһеҙ булһа ла янғыҙлыҡ тиҙ ялҡыта, йәшәү мәғәнәһенән төңөлдөрә, күңел дәртен һүндерә. Ирешер маҡсатың, йылыныр усағың, һыйыныр ҡосағың булыу икеләтә бәхеттер! Уйлап ҡараһаң, кешегә күп тә кәрәкмәй икән. Кискә тиклем һыу буйында йөрөнөләр, тирә-яҡты күреп килделәр. Ҡурай еләге, ҡарағат ҡыуаҡтары өйкөмдәре күп, емештәре бешеп етмгән әле. Урман ситендә генә ер еләге, бөрләгән йыйҙылар. Аръяҡтағы яланға лесхоз донник, костер үләндәре сәскән икән, шуға ла унда ер өҫтөнә төҫлө биҙәкле келәм йәйеп ҡуйылғандай матур.

- Килгәндә күргәнһеңдер, юл буйында көнбағыш, ҡара бойҙай сәселгән баҫыуҙар эргәһенән үттек, улар төрлө мәлдә сәскә ата. Бал ҡорттары ыҙалап алыҫҡа осоп йөрөмәй, шул ялан үҫемлектәренән һеркә йыя, бер ыңғай сәскәләрҙе һеркәләндерә. Эргәлә саф шишмә булыуы ла уңайлы. Ҡорттарға эсергә таҙа шишмә һыуы кәрәк. Элегерәк был йәмле ерҙәрҙә ҡәҙимге ҙур ауыл булған. Ҡасандыр лесхоздар эреләнгәс, ауыл бөтөрөлгән. Кешеләре таралып күсеп китеп бөткәс, ауыл да юҡҡа сыҡҡан. Ошо бер өй генә тороп ҡалған. Өйҙәр кешеләр һымаҡ икән: тәнендә йәне булғанда ғына кеше тере, өйҙәрҙең дә эсендә кешеләр йәшәһә, ҡото була. Кешеләре ташлап китһә, өйҙең дә ҡото китә. Яңғыҙ кеше кеүек, ул да тиҙ ҡартая, үҙенән-үҙе ташландыҡ, мөшкөл хәлгә ҡала...

Батырҙың ергә иңкәйеп, көүшәйеп, бойоғоп ҡына ултырған өйө, Гүзәл килеп ингәйне, терелеп киткәндәй, турайып ултырҙы, күҙ алдында ҡупшыланып китте. Кискәрәк, ҡояш байығас, шишмә ярында усаҡ яҡтылар. Батыр бында нимәләр менән шөғөлләнгәнен мауыҡтырғыс итеп һөйләне. Һөнәрен, эшен яратҡаны, бурыстарын урынына еткереп атҡарғаны дәртләнеп һөйләүенән күренеп тора. Усаҡтан шартлап осҡан һәр бер осҡондо тигәндәй ҡараштары менән оҙатып, оҙаҡ һөйләшеп ултырҙылар.

Хәҙер Гүзәл дә Батырҙан тартынмай, хәленән килгәнсә иркен һөйләшә. Тәүге мәлдәрҙәге кеүек икеләнеү, шикләнеүҙәре булмағас, хәҙер бер ниндәй тартыныуһыҙ, еңел аңлашалар.

- Әйҙә, хәбәрем менән ялҡытканмындыр, кискә һалҡын төштө, ҡайтайыҡ, - тип ике-өс тапҡыр әйтеп ҡарағайны, Гүзәл терһәгенән тотоп, ҡуҙғалырманы. Бындай матур кистә, күңелең ҡасандан бире һиҙмәгән рәхәтлек тойғолары кисергәндә, нисек уны яһалма тыйып, хистәреңде сикләп, йоҡлап ятаһың? Юҡ, мөғжизә дауам итеүен теләй ул! Бер аҙ хисләнеп ултырғас, ҡайттылар. Батыр барлы-юҡлы ҡаралтыларынан иң һәйбәттәрен һайлап, Гүзәлгә урындыҡ түрендә, ситкәрәк үҙенә урын йәйҙе. Ҙур хәстәрлек менән урын әҙерләп йөрөгән егетте күҙәтеп ултырған Гүзәл, Батыр һәйбәт егет ул, тип ҡыуанды.

- Һин ята тор, мин ишектәрҙе бикләп ингәс, шәмде һүндерермен, - тине лә Батыр сығып китте.

Гүзәл, юрған аҫтына сумып, башын яҫтыҡҡа терәгәнен иҫләй, урман, үлән, сәскә, еләк еҫтәре аңын шунда уҡ ойотто, үткән көнө төш кеүек кенә булды. Батыр инеп, шәмде һүндереп ятты, ләкин төнө буйы уяулы-йоҡоло һаташып сыҡты, нимәгә борсолғанын, нимә күңеленә тынғы бирмәгәнен үҙе лә аңламаны. Төндә әллә нимәгә һиҫкәнепме, ҡулын һонғайны, усына Гүзәлдең ҡулы тейҙе. Устары Гүзәлдең бармаҡтарының йылыһын тойоу менән бөтә тәне буйлап рәхәт, ләззәт тулҡыны таралды. Таңға тиклем шулай етәкләшеп йоҡланылар. Гүзәл уянып, күҙҙәрен асҡанда, тәҙрәнән төшкән йылы шаян ҡояш нурҙары унын тәнен наҙлай ине. Ниндәй бәхетле таң! Көн һайын ошондай ләззәттә, киләһе көнгә яҡты өмөттәр, яҡшы ниәттәр, яңы хистәр менән ҡыуанып уянһаң ине! Донъяла йәшәүҙең ҡәҙере, тулылығы ошо теләктәрең үтәлеүҙән тыуалыр. Батыр ҙа уянды, сәхрә шишмәһе буйына төшөп йыуынып-сайынырға барҙылар. Йылғыр урман шишмәһенең ҡырсынлы ерендә эреле-ваҡлы ялпаҡ таштарҙы кәлеплән һалып, йәтеш кенә быуа быуылған. Тәрәнлеге тубыҡтан ғына булһа ла, селлә көндәрендә суммаһаң да, ятып сайынырлыҡ, тәнгә кәс, дәрт, сихәт алырлыҡ ятыу барлыҡҡа килгән. Һыуы шул тиклем таҙа, саф, һалҡын, эскән һайын эске килеп тора, тик һалҡынлығы тамаҡты ҡурыштыра. Йылға ағымына арбалған кеше кеүек ҡарап уйҙарына бирелгән Гүзәлгә Батыр:

-Ҡорттар ҡуҙғырмаҫ элек ҡараштырып киләйем. Һин сәй ҡайнат, ашты йылыт, йәме, - тип, умарталыҡ яғына китте. Бында сит-ят кеше түгел, үҙе хужабикә икәнен тойһон өсөн, килгәс тә бөтә өй-аш эштәрен тулыһынса Гүзәлгә тапшырырға теләне. Гүзәл был хәйләне аңланымы, юкмы, ләкин Батырҙы ҡыуандырыр өсөн, ҡушһа ҡушмаһа ла, әллә нимәләр эшләргә риза ине.

**(Дауамы. Башы 44-46-се һандарҙа).**

## ЗАУЫҠ

### Иланым

Дим буйында сәхрәлә,
Йәйҙәр көҙгә кергәндә
Иләҫләнеп мин йөрөнөм,
Тойоп һине эргәмдә.

Ҡыҙарып бешкән баланы,
Өҙөлеп минә ҡараны.
Сибәркәйең ҡайҙарҙа, тип
Күрәһең, һине һораны.

Яуап көткән баланҡайға
Үҙем өҙөлөп ҡараным.
Сибәркәйем килмәне, тип,
Күҙгә ҡушылып иланым.

### Барометр

Әйтерһең, һауа торошо
Күңелендең ҡылдары.
Бая йөҙөң аяҙ ине,
Хәҙер күҙҙәң ҡырауы.

Ләйсән ямғыр шыбырҙауы
Ҡолағыма һөйләүең.
Йәйге таңдың томанылай,
Иртәгәгә теләгең.

Йә ҡаламын ҡойма һыуҙа,
Йә кибәмен ҡояшта.
Барыһына мин түҙермен,
Булһаң әгәр ҡосаҡта...

* * *

Башҡорт тымған тиеп, уйламағыҙ,
Башҡорт ҡунған әле ҡаяға.
Уҙғандарын иҫләй,
Ғорурлығын сикләй,
Ирек бирмәй йөрәк-саяға...

Уралымда үҫә малайҙары -
Сәмдәренә генә теймәгеҙ.
Бөркөт булып күккә сөйөләрҙәр,
Йомран ише өңдәр эҙләрһе(ге)ҙ.

* * *

Йылдар йыға ҡайынды ла,
Салландыра сабыйҙы ла,-
Әкрен генә алышынып,
Һүрә һүнмәҫ ҡайғыны ла.

Ҡала һаҡай ауылдарҙан,
Юя уның ҡайһыларын.
Иҫкә килгән бәғзе халыҡ
Юллап йөрөй тамырҙарын.

Уралымда уҡмашҡанһың.
Халҡым, һинең үҙ юлдарың.
Һин бер ҡорға ойошҡанһың,
Әйҙәр заттар булғанғалыр.

### Төҙөүселәргә

Ҡайһығыҙҙың фатиры юҡ,
Ҡайһығыҙҙың ҡатыны.
Эшегеҙҙә тик сағыла
Йөрәгегеҙ ялҡыны.

### Урам һепереүселәргә

Сырхау ҡала һары япраҡ бәйләп,
Таң ҡаршылай көҙгө иртәлә.
Япраҡ ҡына һеперткенән ҡурҡып,
Өйөрөлә һуңғы мәртәбә.

**Фирүз ӘХТӘМОВ.**

*✓ Аллаһы Тәғәлә ризалығы өсөн башҡарылмаған һәр төрлө ғибәҙәт гонаһлы. Башҡалар күрһен өсөн ҡылынған намаҙ, тыштан ҡарағанда намаҙ ҡылыуға оҡшаһа ла, эстән ширҡ менән тулы.*



БАЙРАМ АЛДЫНАН



# ҠОРБАН САЛАЙЫҠ,

## сауаптарын алайыҡ!

**Ҡорбан һүҙе "яҡынайыу", "яҡынраҡ булыу" тигәнде аңлата. Йәғни йөрәк менән Бөйөк Аллаһы Тәғәләгә яҡынайыу өсөн ғибәҙәт ҡылыу ниәтендә тәғәйен бер ваҡытта ҡорбан салыу. Ҡорбан Исламда мөлкәт менән ҡылынған ғибәҙәттәрҙең береһе. Был Аллаһы Тәғәләгә биргән ниғмәттәре өсөн рәхмәт белдереү. Ҡорбан шулай уҡ Алланың берҙән-бер булыуын тәүгеләрҙән аңлатыуы, Раббыбыҙҙың яҡын ҡоло Ибраһим ғәләйһиссәләмдең иҫтәлегенә лә арнала.**

Шуның өсөн Мәккә янындағы Минә үҙәнендә Ҡорбан тантаналарынан һуң хаж ҡылыусылар Ҡәғбәтулла алдындағы "Ибраһим урыны"на килә һәм Мәҙинәләге Мөхәммәт бәйғәмбәр ҡәберенә йүнәлә. Хажға бармаған мосолмандар иһә туған-тыумасаларының һәм яҡындарының ҡәберен зыярат ҡыла, ҡустәнәстәр һәм бүләктәр алып, туғандарының һәм дуҫтарының хәлен белешеп сыға.

Беҙ Аллаһтың малдың итенә лә, ҡанына ла мохтажлығы юҡ икәнде оноторға тейеш түгелбеҙ. Уға тик ҡолоноң ниәте, ихласлығы һәм тәҡүәлеге генә барып етер. Ҡөрьәндә ғәмәлдең нигеҙен тәшкил иткән был ниәт һәм тәҡүәлек шулай билдәләнә: "Уларҙың ни ите, ни ҡаны Аллаһҡа түгел, Уға фәҡәт һеҙҙең тәҡүәлегегеҙ генә барып ирешә..." ("Хаж", 37).

Бәйғәмбәребеҙ (ғәләйһиссәләм) ҡорбан салыуҙың мотлаҡ икәнлеген билдәләп үтә: "Кем мөмкинлеге булып та ҡорбан килтермәй, шул беҙҙең мәсеткә яҡынаймаһын", - тигән ул.

Шуға күрә, һәр мосолман Ҡорбанға етди ҡарарға тейеш. Тик ихлас инаныусылар ғына, Аллаһы Тәғәләгә яҡынайыу маҡсаты менән Ҡорбан сала. Хәҙистәрҙә: "Ҡорбанға эре малдарҙы һуйығыҙ, сөнки улар Сират күпере аша үткән саҡта һеҙҙе алып сығасаҡ", "Ҡорбандың һәр йөнөнә тиклем бүләкләү бар", - тип әйтелә.

### Байрам көндәрендә эшләргә кәрәк булған ғәмәлдәр:

⌘ Байрам төндәрен доғала һәм ғибәҙәттә үткәрергә, ҡаза намаҙҙарын ҡылырға, Ҡөрьән уҡырға һәм тәүбә итергә кәрәк, сөнки байрам төнөндә ҡылынған доғалар ҡабул була.

⌘ Байрам иртәһендә иртәрәк торорға, тәһәрәт алырға.

⌘ Таҙа һәм яңы кейемдәр кейергә.

⌘ Йылмайырға һәм шат йөҙлө булырға.

⌘ Ярлыларға күберәк саҙаҡа таратырға.

⌘ Байрам намаҙына барған ваҡытта юлда тәкбирҙәр әйтергә.

⌘ Әгәр ҙә кеше Ҡорбан салдырырға уйлай икән, үҙенең Ҡорбан итен тәмләп ҡарамайынса, ризыҡтан баш тартып тороу яҡшыраҡ.

⌘ Ҡорбан итен ашарға кәрәк, сөнки Бәйғәмбәребеҙ шулай эшләгән.

⌘ Кешеләргә ҡарата йомарт булырға.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

**Бер сит ил кешеһе юл буйлап тәрән уйҙа китеп бара. Шул саҡ уның ҡаршыһына ҡурҡыныс бер хайуан килеп сыға. Кеше, ҡурҡышынан, яҡындағы ҡоҙоҡ эсенә һикерә һәм ҡолап барған ыңғайға ҡоҙоҡ бураһын тишеп сығып үҫкән ағастың олонона йәбешә. Был ағас олонон ике сысҡан кимерә. Уларҙың береһе аҡ, икенсеһе ҡара. Ә ҡоҙоҡ төбөндә ике йылан кешенең ҡолап төшөүен түҙемһеҙләнеп көтә.**



# ҒӘМҺЕҘЛЕК...

## йөрәкте йоҡлата

Кеше үлем һәм йәшәү араһында ҡалғанын аңлай, ҡурҡыу тойғоһо уның бар булмышын солғап ала. Уның хәлендә тиҙ генә уйлау һәм ҡарар ҡабул итеү талап ителә. Сысҡандар ағас олонон кимереп бөтмәҫ борон, уға был ҡоҙоҡтан сығырға кәрәк. Кеше тирә-яғына күҙ ташлай. Нимә күрә? Баллы кәрәҙҙәр... Ҡасандыр бал ҡорттары ҡоҙоҡ бураһына үрелеп үҫкән был ағастан бал йыйған. Кешелә балды тәмләп ҡарау теләге уяна. Татлы балдан ләззәтләнеү хыялы уның башҡа тойғоларын юҡҡа сығара. Хуш еҫле бал уның аңын томалай. Ул үҙ алдына: "Шундай саф һәм хуш еҫле балды... тәмләп ҡарайым да, һуңынан еҫкә үрмәләрмен", - ти. Бал уға оҡшап ҡала. "Шундай тәмле бал, мин бындайҙы тағы ҡайҙа тәмләй алам әле? Туйғансы ашайым әле", - тип, бал ашауҙы дауам итә кеше һәм үҙенә янаған ҡурҡыныс хаҡында онота. Һәм, ниһайәт, сысҡандар үҙҙәренең эшен бөтөрә, олон емерелә һәм бәхетһеҙ кеше үҙенең үлемен ҡоҙоҡ төбөндә таба...

Был ғибрәтле хикәйә кеше һәм уның ғәмһеҙлеге хаҡында. Унда күп кенә символик образдар бар. Ҡоҙоҡ - ерҙәге тормош, ҡоҙоҡ төбөндә көн күреүселәр - нәфсене көүҙәләндерә, ҡара һәм аҡ сысҡандар - көн менән төн, йәғни кешенең ғүмерен йотоусы ваҡыт, бал - ерҙәге алдаҡсы ләззәттәр. Сит ил кешеһе - был ергә һынау өсөн ебәрелгән һәм үҙенең ғәмһеҙлеге арҡаһында һәләк булыусы кеше образы. Был мәсәлдә һүрәтләнгән кеше хәленә ҡалмаҫ өсөн һәр кеше аңлы булырға, ғәмһеҙлеккә төшмәҫкә тейеш. Тәбиғәт кешенән шуны талап итә. Әгәр ҙә кеше үҙенең йөрәгенә юлды онотһа, ғәмһеҙлек йоҡоһона бирелһә, күңел ҡиммәттәрен ергә һалып тапаһа, тулы тормош урынына уны дауамлы ғазаптар, әсенеүҙәр һәм ауыртыуҙар тулы күңелһеҙ тормош көтәсәк, уның аҙағы ла ҡурҡыныс булыр. Тормошта үҙ урыныңды белмәй, тыуымдың һәм үлемдең мәғәнәһен аңламай, нәфсенең тәбиғәтенә һәм хәҡиҡәтенә төшөнмәй йәшәү - әсе ғәмһеҙлек ул.

Кеше ғәмһеҙ булһа, йәғни күңеле менән һиҙмәһә, уның аңы ла билдәһеҙ йоҡоға тала. Һиҙгерлек, фекер тәрәнлеге, тойоусанлыҡ, зирәклек уны ташлай. Кеше һаңраулана һәм үҙенең гонаһтарын да һиҙмәй, сафлыҡты гонаһтан айыра алмай башлай.Күптәр үҙҙәренең гонаһта йәшәгәнен һәм үҙҙәре тирәләй гонаһ тулҡындары таратҡанын һиҙмәй. Ғәмһеҙлек уларҙы шул тиклем сорнап ала, улар үҙҙәрен һаңрауҙар һәм һуҡырҙар кеүек тота. Ҡөрьән-Кәримдә ундайҙар тураһында: "Улар һуҡыр һәм телһеҙ-һаңырауҙар. (Шуға күрә улар тура юлға) әйләнеп ҡайта алмай", - тиелә ("Бәҡара", 18).

Билдәле шағир-суфый һәм дин остазы Йәләлетдин Руми "Мәснәүи" йыйынтығында бер-береһен ишетмәгән һәм аңламаған ике кеше тарихы һүрәтләнә. Тарих шундай. Бер кеше үҙенең танышынан ни өсөн ауырыу күршеһенең хәлен барып белмәүе тураһында һораша. Танышы ҡолаҡҡа ҡатыраҡ һәм өҫтәүенә бер аҙ иҫәрерәк тә була. Шулай ҙа бер нисә көндән һуң вайымһыҙ күрше уның тураһында башҡалар насар уйламаһын өсөн күршеһенә барырға ҡарар итә һәм улар араһында буласаҡ диалог сценарийын төҙөй. Үҙенең һаңғыраулығын йәшерергә теләп, ул ауырыуҙың ирен хәрәкәттәрен күҙәтеп ултырырға ҡарар итә. Ул ауырыуға үҙе әйтә торған һүҙҙәрҙе ятлап килә. Күҙаллауы буйынса, барыһы ла ул уйлағанса килеп сығырға тейеш була. Һаңғырау: "Ҡәҙерле күршем, һеҙ үҙегеҙҙе нисек тояһығыҙ?" - тип һораясаҡ. Ауырыу: "Рәхмәт, мин үҙемде күпкә яҡшыраҡ тоям", - тип яуап бирәсәк. Һуңынан һаңғырау: "Берәй нәмә ашаныңмы?" - тип һораясаҡ. Ауырыу хәлһеҙ тауыш менән яуап бирәсәк: "Мин татлы шәрбәт эстем һәм бер аҙ аш ашаным". Һаңғырау: "Ашаған ашың сәләмәтлеккә булһын!" - тийәсәк. Һуңынан тағы ла ауырыуға һорау бирәсәк: "Һине ҡарарға ҡайһы врач килә?" Ауырыу яуап бирәсәк: "Фәлән-фәлән килә". Һуңынан һаңғырау: "Эйе, был врач яҡшы ҡарай. Уны саҡырып, дөрөҫ эшләгәнһең, ул килгәс, тимәк, барыһы ла яйға һалынасаҡ..."

Үҙ-үҙенән ҡәнәғәт ҡалған һаңғырау, ауырыуҙың өйөнә килгәс тә үҙе ҡорған сценарий буйынса: "Ҡәҙерле күршем, һеҙ үҙегеҙҙе нисек тояһығыҙ?" - тип һораған. Күршеһе ауыртыныуҙан ҡалтырап, саҡ яуап биргән: "Хәлем шул тиклем насар, мин үлеп барам шикелле". Ләкин яуапты һаңғырау ишетмәгән һәм өйҙә төҙөгән диалогын дауам итеп: "Аллаһҡа рәхмәт", - тигән. Был һүҙҙәр ауырыуға оҡшамаған. Ул үҙ алдына әсенеп, былай тип уйлаған: "Ни өсөн күршем минә изгелек теләмәй. Ул минең үлеүемдә теләйме?" Ә һаңғырау үҙенең бурысын үтәүҙе дауам иткән һәм уға тағы ла һорау биргән: "Берәй нәмә ашаныңмы?" Үпкәләгән күршеһе: "Һин миңе лә әле генә ағыу менән туйҙырҙың", - тигән. Һаңғырау быға әҙерләнгән тексы буйынса: "Тәмле булһын!" - тигән. Ауырыуҙың шул тиклем йәне көйгән. Һаңғырауҙың һорауы дауам иткән һәм ул: "Һине кем дауаларға килә?" - тип һораған. Һуңғы көсөн йыйып, ауырыу асыуланып яуап биргән: "Минә Ғазраилдан башҡа тағы ла кемдең килеүе мөмкин! Һин, күршем, мин ныҡлап асыуланмаҫ борон үҙ юлың менән китә һалһаң ине". Әммә һаңғырау аңғәмәсеһен ишетмәгән, шуға уның хәлен дә аңламаған. Ул тыныс ҡына һораударын яуҙырыуҙы дауам иткән. Өйҙән сыҡҡас: "Ҡалай барыһы ла яҡшы килеп сыҡты. Мин күршемдең хәлен белдем, хәҙер береһе лә минең турала насар уйламаясаҡ. Был бәхетһеҙҙе лә ҡыуандырҙым", - тип уйлаған. Ә ысынында, барыһы ла икенсе төрлө булған. Һаңғырау сауапҡа өлгәшмәгән, тик үҙен бәлгөнләккә генә төшөргән. Ауырыу ҙа уның килеүенән һуң әрләшкән, насар һүҙҙәр менән күршеһенең ҡылығын һүккән: "Мин уны яҡшы кеше тип уйлап йөрөһәм, ул минең дошманым булып сыҡты. Мин уны шундай яуыз, насар уйлы икән тип уйламаным да!" Бынан һуң ауырыу оҙаҡ ҡына күршеһен ҡарғаған. Ул һуңғы көсөн йыйып, мендәренән саҡ башын ҡалҡытып ҡысҡырған: "Ауырыуға дәрт бирер өсөн килә таныштары. Ә был кеше минең һуңғы көсөмдө һурырға, минән нимә өсөндөр үс алырға килгән. Ә минең бит уны бер ҡасан да рәнйеткәнем булманы"... Шулай итеп, уның физик ауырыуына рухи ауырыу ҙа өҫтәлгән.

Һаңғырау яҡшы булып күренергә теләгән. Үҙенең иҫәрлеге арҡаһында ул ауырыу йөрәгенә ут ташлаған. Ул ихласһыҙлығы арҡаһында һәм кешеләргә яҡшы булып күренеү маҡсатында гонаһ эшләгән. Шулай итеп, ул үҙе лә белмәйенсә, күрше хаҡын боҙған. Ә ауырыу һаңғырау күршеһе әйткән һүҙҙәрҙең сәбәбен аңларға тырышыу урынына, уны ҡарғай башлаған. Ҡара уйға төшөп, үҙ-үҙенә зыян килтергән.

Эштәрен Аллаһы Тәғәләнең ризалығы өсөн түгел, ә үҙҙәренең баһаһын арттырыу өсөн башҡарған кешеләр әллә күпме был донъяла. Улар ғибәҙәттәрен дә анһат ҡына сауап эшләп, Ожмахҡа юл һалырға уйлап, нәфсегә бутап башҡара. Ындай кешеләр был осракта йәшерен гонаһ һәм бәләкәй ширҡ эшләйҙәр: Аллаһы Тәғәлә ризалығы өсөн башҡарылмаған һәр төрлө ғибәҙәт гонаһлы. Башҡалар күрһен өсөн ҡылынған намаҙ, тыштан ҡарағанда намаҙ ҡылыуға оҡшаһа ла, эстән ширҡ менән тулы. Һауыттағы һыуҙы һаҫыҡ шыйыҡлыҡтың тамсыһы ла бысраткан кеүек, йоҡлаған һәм ғәмһеҙ йөрәк менән башҡарылған ғибәҙәт тә шулай уҡ бысранған була.

Бер ваҡыт Джунайд Бағдади йыназа намаҙы башҡарған ваҡытта кәрәккәнсә дүрт түгел, ә биш тәкбир әйткән. Йоланы үтәп бөткәндән һуң мосолмандар уға: "Эй, Джунайд, йыназа намаҙы уҡыған ваҡытта биш тәкбир әйтелмәй. Ни өсөн һеҙ улай эшләнегеҙ?" - тип мөрәжәғәт иткән. Джунайд Бағдади былай тип яуап биргән: "Дүрт тәкбирҙә мин мәрхүм кеше өсөн башҡарҙым. Ә бишенсе тәкбирҙә мин был мәрхүмдән дә үлерәк тереләр өсөн башҡарҙым. Бәлки, улар аңларҙар һәм үлем килгәнсе уянырҙар".

*✓ Ислам дине иҫерткес эсемлектәрҙе һаулыҡ өсөн зыянлы булғаны өсөн генә түгел, уны ҡабул итеүсенең ысынбарлыҡтан айырылып, хыял иле менән йәшәй башлағаны өсөн дә тыя.*



ТӘҮБӘ

# ЭСЕҮҘӘН КОТОЛОП БУЛА



**22-се һабаҡ: "Айсберг", уның аҫҡы яғы - тормошондоң үҙе: шатлыҡтарың, ҡайғыларың, уңыштарың, уңышһыҙлыҡтарың, бәхетле мәлдәрең, бәхетһеҙлектәрең, тормошоңда булған көтөлмәгән ваҡиғалар...**

"Үҙең эскелектән нисек ҡотолоу тураһында һүҙ башланын, үҙең бөтөнләй башҡа төшөнсәләр хаҡында төпсөрләп һөйләйһең. Эскелектән ҡотолоуҙың йүгереү, тау түбәһенә менеү, "иҫке күлдәк" кейеү, "икенсе йөрәк" табыу, ниндәйҙер гәмәл, ҡылыҡ, гәҙәт һәм холоҡ, ауырлыҡ төшөнсәләре, суфыйсылыҡ мәктәбе һәм башҡа тәрбиә ысулдары менән ниндәй бәйләнеше бар", тип әйтеүселәр ҙә осрай. Бер яҡтан ҡарағанда, ысынлап та, шундай һорау биргәндәр хаҡлы кеүек тә. Әммә... Эскелек һаҙлығына батыусының был сире нилектән килеп сыға һуң? Эйе, дөрөҫ йәшәмәү арҡаһында. Ә кем дөрөҫ итеп йәшәргә өйрәнә? Әлбиттә, үҙенең яңылыш йәшәгәнен аңлаған, тәүбәгә килгән кеше. Иртәнсәк башы сатнап ауырығандың был хәле көн һайын йәки бик йыш ҡабатлана башлаһа икән, тимәк, **ул дөрөҫ йәшәмәй!** Ысынбарлыҡ менән хыялындағы, түбәнге аңы менән юғары аңындағы айырмалыҡты тигеҙләү өсөн, тәбиғәт менән күнеле араһында гармония булмауҙан эсә кеше. "Мин сәбәпһеҙ эсмәйем, бары байрамдарҙа ғына ара-тирә йотҡолайым", - тигән кешене лә дөрөҫ йәшәй, тип әйтеп булмай. Ислам дине иҫерткес эсемлектәрҙе һаулыҡ өсөн зыянлы булғаны өсөн генә түгел, уны ҡабул итеүсенең ысынбарлыҡтан айырылып, хыял иле менән йәшәй башлағаны өсөн дә тыя.

Шулай уҡ: "Эсеүҙе ташлауы енел генә. Уның нимәһе бар инде? Әллә кем булып йөрөйһөң шунда! Уны ғына ташлаған бар!.. Нисек еңел ташлаһаң, шулай уҡ еңел генә башлап та ебәрәһең..." - тип тә әйтәләр ҡайһы берәүҙәр. Еңел генә киренән башлай алғас, был бит ташлау түгел, тип әйтергә генә ҡала былдай осраҡта. Улай ғына ла түгел, үҙенең ихтыярһыҙ булыуын ошондай аҡланыуҙар артына йәшереп маташа ундайҙар. Йәшереп кенә ҡалмай, "Эсеүҙе ташланым!" тигәнде әйтер өсөн генә ошондай хәйләгә бара. Әммә ул һүҙҙәрҙең аҫтында айсбергтың аҫҡы өлөшөндәге кеүек **"ихтыярһыҙлыҡ"** тигән ҙур мәғәнә аҡайып күренеп тора.

Ни өсөн эскелектән ҡотолоуым хаҡында яҙғанда бөтөнләй башҡа төшөнсәләр, тормоштоң башҡа яҡтары хаҡында һөйләйемме? Дөрөҫөн әйткәндә, эсеү ташлау, бер көн килеп ауыҙына "шайтан һыуы"н алмай башлау айсбергтың өҫкө, һыу өҫтөндә күреп торған өлөшө кеүек кенә. Уның аҫҡы, иң ҙур өлөшө лә бар бит әле. Был осраҡта һыу эсендә күренмәй торғаны - бөтөн тормошоң һәм булмышың. Әгәр ҙә боҙҙоң өҫтәге өлөшө генә мөһим тип, тормош карабыңдың рулен илтифатһыҙ борһаң, игтибарһыңды юғалтһаң, хәҙер-хәҙер барып йәнселерендә көт тә тор. Йәғни "**Мин эсеүемдән ҡотолдом!** Шул еткән минә", - тип кенә, үҙең өҫтөндә туҡтауһыҙ эшләмәһәң, тормошоңдо, фекерләүеңде үҙгәртмәһәң, ихтыяр көсөңдө ныгытмаһаң, киренән эсә башлау өсөн ике генә аҙым ара ҡала.

"Титаник" фильмын ғына иҫегеҙгә төшөрөгөҙ әле. Ниндәйен ҡеүәтле, ныҡ һәм донъяла иң ҙур һаналған карап башняла тороусы ике кешенең иғтибарһыҙлығы арҡаһында селпәрәмә килә. Ярай әле, карап үҙе генә батһа, күпме кешеләрҙең ғүмере өҙөлә унда. Оҙаҡ ваҡыт эсмәгәндән һуң яңынан эсә башлау ҙа шул уҡ ғүмер карабының айсбергҡа барып бәрелеүенә тиң. Бында иң ҙур сәбәп: айсбергтың аҫҡы, ҙур өлөшөн иҫәпкә алмауҙан. Унда үҙең генә ҡыйралмайһың, һәләкәт сарпыуы яҡындарыңа ла, эргә-тирәләгеләреңә лә ҡағыла. Һәләкәттән хатта "Титаник" ише гиганттар ҙа азат була алмай.

Айсбергтың аҫҡы өлөшө - ул тормоштағы, көнкүрештәге көтөлмәгән хәлдәр, һине үҙлегеңдән сығара торған, һуңынан стресҡа, тәрән депрессияға килтереүсе күңелһеҙ ваҡиғалар, ғаиләңдәге, эшеңдәге ғәҙәттән тыш ситуациялар, яҡындарыңдың, дуҫтарыңдың хыянаты һәм башҡалар.

Күберәк осраҡта эсеүен ташлаусылар бына ошондай хәл-ваҡиғалар йоғонтоһонда киренән рюмкаға үрелеүсән. Ҡайғыһын йыуыу йә шатлығын билдәләү ысулын спиртлы эсемлектәрҙә табыусан. Беҙ был тормошта бер нәмәнән дә азат түгелбеҙ. Бәләҡаза аяҡ аҫтында ята. Тормош беҙҙе теләһә ниндәй осраҡта ауыр һынау алдына ҡуя, бәхетен дә, бәхетһеҙлеген дә юлыбыҙға сығара.

"Титаник"тың һәләкәткә осрауының икенсе бер сәбәбе: уның саманан тыш ҙур массалы, ауыр булыуындалыр, моғайын. Башняла тороусылар айсбергты алдан уҡ күреп өлгөрә өлгөрөүгә. Дежурныйға хәбәр итәләр. Артабан тревога иғлан ителә, әммә карап йүнәлешен үҙгәртеп өлгөрмәй ҡала. Шундайын ҙур һәм күләмле масса боролош радиусына һыйып бөтмәй. Һөҙөмтәлә "Титаник" айсберг менән бәрелешә һәм һыу төбөнә китә.

Оҙаҡ ваҡыт эсмәй йөрөп, киренән башлау ҙа ошо хәлгә оҡшаған. Бындай осраҡты халыҡта "ысҡыныу" тиҙәр. Кеше эсмәйенсә ни тиклем оҙаҡ йөрөһә, уның "ысҡыныуы" ла оҙаҡҡараҡ һуҙыла һәм һөҙөмтәләре кеше ғүмере өсөн һәләкәтле булыуы ла ихтимал. Ни өсөн шулай килеп сыға һуң? Сөнки баяғы "айсбергтың аҫҡы өлөшө" лә, теләйбеҙме-юҡмы, бар һәм унда кешене үҙлегенән сығара торған мәғлүмәти, психологик, мораль "йөк" туплана. Шуға күрә "Мин эсеүемде ташланым" - тип кенә әйтеп маҡтанып йөрөү, йәғни айсбергтың күренеп торған өлөшөнә генә бар игтибарыңды йүнәлтеү, һуңғы сиктә, аҫҡы өлөшкә, һине ысҡыныуға килтереүсе сәбәп-һылтауҙарҙы йөк итеп таға башлай. Көндәрҙән бер көндө күңеләнә һәм түбәнге аңына һарҡып тағылған йөк (айсбергтың аҫҡы өлөшө) ауырая бара. Ул ауырлыҡтың бер көн килеп юҡ ҡына сәбәп-һылтау арҡаһында һине шешәбикә төбөнә һөйрәп төшөргәнен һиҙмәй ҙә ҡалаһың.

Улай булғас, йәғни эсеүҙе ташлау айсбергтың - өҫкө, ҡалғаны, иң ауыры - аҫҡы яғы булғас, кеше теләһә ниндәй стресс, ауыр хәл кисергәндә киренән эсеп киткәс, эсеүҙән ғүмерлеккә ҡотолоу мөмкин түгел бит, тип әйтеүселәр ҙә булыр. Барлыҡ хикмәт шунда ла инде: **айсбергтың аҫҡы өлөшөн шатлыҡлы, бәхетле мәлдәр менән генә тултырырға кәрәк!** Ул сағында инде һеҙҙең тормош карабығыҙ өсөн бер ниндәй айсберг та ҡурҡыныс булмаясаҡ. Ә бының өсөн туҡтауһыҙ йүгерергә, тау үренә йүгереп менергә, үҙеңә тәбиғәт тарафынан һалынған шатлыҡ, бәхет потенциалын асырға ғына кәрәк.

Бына ни өсөн мин эсеүҙән нисек ҡотолоуым хаҡында һөйләгәндә, ғүмүмән, тормоштоң башҡа яҡтарына, кешене үҙен күберәк бәхетле итеп тойҙороусы миҙгелдәргә һәм ысулдарға күберәк туҡталам. Оҙон һәм ҡараңғы төндән ялҡып, тиҙерәк таң атырын түҙемһеҙлек менән көткән кеше бер ваҡытта ла төндөң ҡараңғылығын тәнҡитләмәй, киреһенсә, күңелендәге көндө уятып, ҡояшҡа мәдхиә уҡый. Бында ла шундай уҡ хәл. Эскелектең кеше организмына үлемесле йоғонтоһо хаҡында һөйләп, был сир менән яфаланыусының күңелен үлтергәнсе, бәхет хаҡындағы йыр менән күңелен үҫтереү, уға бәхетле булыу юлдарын күрһәтеү мең тапҡыр файҙалыраҡ, отошлораҡ, миненсә.

Ҡабатлап әйтәм: айсбергтың аҫҡы яғы мөһимерәк, әһәмиәтлерәк. Ә инде уның диңгеҙ өҫтөнә сығып торған өлөшө бары һинең донъяла, тормош диңгеҙендә үҙ урыныңды билдәреүсе, булмышыңды һәм асылыңды **реклама**лаусы өлөшө генә. Эсеүҙән ҡотолоу осрағы өсөн айсбергтың өҫкө өлөшө - "мин эсеүемде ташланым" мәғәнәһенә эйә булһа, ә аҫҡы өлөшө "мин бәхетле, шат һәм дөрөҫ йәшәй башланым" тигәнде аңлатырға тейеш. Әгәр ҙә ошондай нисбәт һаҡланмаһа, һеҙҙе һәр осраҡта ла "Титаник" яҙмышы көтөүе бик ихтимал.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН

# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Уйың ниндәй, гәмәлең дә шундай

Боронғо бер риүәйәттә яурындарына икешәр тоҡ аҫып алған өс юлсы тураһында һөйләнә. Уларҙың тәүгеһенән тогонда нимә алып китеп барыуын һорағас, ул былай тип яуап бирә: "Дуҫтарымдың изге гәмәлдәре, кеше күҙенән һаҡланып, тиҙерәк онотолһон өсөн арҡама аҫылған тоҡта ята. Алғы яҡҡа аҫылған тоҡта иһә, минең менән булып үткән бөтә яуыҙлыҡтар. Юлда китеп барышлай мин йыш ҡына туҡтап, быларҙың барыһын да тоҡтан сығарып, тирә-яғыма оҙаҡ ҡына ҡарап алам". Был кеше гел туҡтап, тормошондағы уңышһыҙлыҡтарын барлап торғанға күрә, алға табан бик оҙаҡ барған.

Икенсе юлсынан тоҡтарындағы әйберҙәре тураһында һорағас, ул: "Тәүгеһендә минең яҡшы эштәрем ята. Мин уларҙы алдыма ҡуйғанмын һәм ваҡыты-ваҡыты менән һәр кем күрһен өсөн тоҡтан сығарып күрһәтеп алам. Арт яғымдағы тоҡ минең хаталарым менән тулған. Мин уларҙы ҡайҙа барһам да үҙем менән йөрөтәм. Улар ауыр, шунлыҡтан мине ергә сүгәләтә, тик ниңәлер мин уларҙы ташлап китә алмайым," - ти.

Һуҙ өсөнсө юлсыға килеп еткән. "Ал яҡта аҫылған тоҡ кешеләр тураһындағы яҡты уйҙар, уларҙың изге гәмәлдәре һәм тормошта минең булған бөтә яҡшылыҡтар менән тулған, - тип һөйләй башлай ул. - Был тоҡ ҙур һәм шул тиклем ныҡ итеп тултырылған, әммә уны йөкмәп барыуы һис тә ауыр түгел. Уның ауырлығы карабләргә елкәндәр ауырлығына тиң - ул аҫҡа ҡарай һөйрәмәй, ә алға табан барырға ярҙам итә. Арт яҡтағы тоғом буш, сөнки мин уның аҫҡы өлөшөндә ҙур тишек тиштем. Был тоҡҡа мин кешеләр тураһында ишеткән һәм ҡайһы саҡта үҙем тураһында уйлаған бөтә насарлыҡты ташлайым. Ә улар барыһы ла тишектән ҡойолоп, эҙһеҙ юғала. Шуға күрә лә мин үҙем менән алға табан барырға ҡамасауларҙай бер ниндәй ҙә йөк алып китеп бармайым".

Ваҡыты-ваҡыты менән беҙ ҙә тормош һүкмағы буйлап сәйәхәт иткән саҡта үҙебеҙ менән нимә алып китеп барыуыбыҙ тураһында уйланып алырға тейешбеҙ. Үҙебеҙгә ҡарата кире тойғоларыбыҙ беҙҙе ергә сүктермәйме икән? Йә булмаһа, беҙ йөкмәгән тоҡтар ниндәйҙер стандарттарға тап килмәүебеҙ тураһында һөйләп тороусы хәүеф тоҡсайҙары түгелме? Йәки беҙгә бүтәндәр менән иркен һәм ихлас итеп һөйләшергә ҡамасаулап тороусы психологик кәртә юҡмы? Үткәндәрҙә беҙгә яфа-михнәт һалған туғандарыбыҙ һәм дуҫтарыбыҙҙың бөтә ҡырын эштәрен үҙебеҙ менән алып китеп бармайбыҙмы икән? Йәки кешеләрҙә көрәкмәгән һыҙаттарҙы эҙләп, һәм бындай кешеләр менән аралашыуҙан баш тартырға өйрәтеүсе кире һабаҡтар беҙҙең юлды тоҡҡарламаймы?

Ҡайһы юлдан барыуҙы беҙ үҙебеҙ һайлайбыҙ һәм үҙебеҙ менән нимә алып барырға икәнде үҙебеҙ хәл итәбеҙ. Кире уйҙар беҙҙе аҫҡа һөйрәй һәм тормош һүкмағын күпкә ҡатмарлаштыра. Аңыбыҙҙа тыуған һәр уй беҙҙең башҡа уйҙарыбыҙға, тойғоларыбыҙға һәм гәмәлдәребеҙгә йоғонто яһай. Әгәр беҙ башыбыҙҙа кире уйҙар йөрөтәбеҙ икән, беҙҙең гәмәлдәребеҙ ҙә кирегә әүерелә, һәм ул, үҙ сиратында, беҙгә кире һөҙөмтә булып әйләнеп ҡайта. Ыңғай уйҙар иһә, ыңғай һөҙөмтә бирә һәм тормошобоҙ ҙа мөғжизәгә оҡшаш шатлыҡҡа тула. Беҙ шул саҡта һәр кемебеҙҙең тормоштоң иҫ киткес, тылсымлы һәм серле бер сағылышы булып тороуын күрә башлайбыҙ. Ыңғай уйҙар уйлап, маҡсатҡа табан барғанда, тормош юлыбыҙ тоторохло буласаҡ һәм үҙ һөҙөмтәһен бирәсәк.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

*✓ Беҙҙең атай-ағайҙар барыһы ла шул һалдат һурпаһын эсеп, тормош мәктәбен үтеп ҡайтҡан. Улар кәүҙәгә олпатланып, донъяға ҡарашы үҙгәреп, үҙ аллы тормош йөгөн йөкмәргә әҙер булып ҡайтҡан.*

УЙЛАНЫРҒА - УРЫН

# ЕГЕТ КЕНӘ САҠТА ӘРМЕЛӘРҘӘ

## хеҙмәт итеү тигән дә йола бар...



**Көҙ еттеме, ҡанатлы дуҫтарыбыҙ бер-бер артлы теҙелешеп, йылы яҡҡа юллана. Ҡайһыһы яҡынғараҡ, ҡайһылары алыҫҡараҡ юл тота, әммә береһе лә был сәфәрҙән тороп ҡалмай. Ә уйлай китһәң, көн-төн, тип тормай, ел-ямғырға ҡаршы һауа ярып, илдәр-ҡитғалар буйлап осоу, ай-һай, еңел түгелдер. Уларҙың был ҡыйыулығына хайран ҡалырлыҡ. Икенсе яҡтан ҡарағанда, йәй буйы осорға өйрәнгән йәш ҡошсоҡтар тап ана шулай һауа киңлеген саҡрымдар аша иңләп уҙғанда ғына ҡанаттарын нығыта алалыр. Ошо һынауҙар менән бергә ихтыяры тәрбиәләнәлер, рухтары сынығалыр, тыуған илгә һөйөү тойғоһо арталыр...**

Беҙҙең егеттәребеҙ ҙә элек шулай булған. Яҙын, көҙөн осар ҡоштар менән бергә әрмеләргә барған, әрмеләрҙән ҡайтҡан. Әрмегә барыусыны бөтә ауыл халҡы матур итеп оҙатып ҡалған, ҡыҙҙар һөйгәндәренә сигелгән ҡулъяулыҡтар бүләк итеп, көтөргә вәғәҙәләр биргән, хаттар яҙылған... Ә кемдәр Ватан алдындағы был изге бурыстан ситләшкән, улар егет һаналмаған. Әлбиттә, был йолалар күпмеләр кимәлдә әле һаман булһа йәшәй. Мәҫәлән, беҙҙең ауылда әрмегә саҡырылған егетте туған-тыумасаһы, күрше-күләне өй һайын йөрөтөп ҡунаҡ итә. Тыуған йорттан оҙатҡанда әсәй улына бер телем икмәк тешләтеп, һөт эсерә. Борондан килгән йолаһы шундай. Был икмәк телеме егет әрменән йөрөп ҡайтҡансы, өйҙөң бер мөйөшөнә элеп ҡуйып һаҡлана, ҡайтҡас, ул шул икмәкте ашап ҡуйырға тейеш була. Аҙаҡ һалдаттың иҫән-һау тыуған яҡтарына йөрөп ҡайтыуын теләп, доға уҡыла. Оҙатырға килгән кешеләр буласаҡ һалдатҡа кемеһе аҡса, кемеһе күстәнәс, кемеһе бүләк тоттора. Ә һуңынан күмәкләшеп ауыл осондағы ҡайынлыҡҡа сығып оҙатып тороп ҡалалар. "Артыңа боролоп ҡарама", "Барғас та хат яҙырға онотма", "Иҫән-һау йөрө", "Бурысыңды намыҫлы үтәп ҡайт", тигән кеүегерәк теләк-кәңәштәр яуа.

Ә бөгөн әрме хәлдәре нисек? Йылдан-йыл һалдатҡа алыныусылар һанының кәмей барыуы бер кемгә лә сер түгел. Интернеттан алынған мәғлүмәттәр буйынса, быйыл яҙғы саҡырылышта әрме ғәскәренә 305 560 һалдат алынған һәм былтырғы яҙ менән сағыштырғанда быйыл хәрби хеҙмәттән ситләшеүселәр һаны 5849 кешенән 8195 кешегә артҡан. Комиссияға саҡырылыусыларҙың бары тик 67 проценты ғына хәрби хеҙмәткә яраҡлы, тип табылған, ә саҡырылғандарҙың яртыһынан күбеһенең ВДВ, ВМФ кеүек юғары талаптар ҡуйылған хәрби частәргә ебәреү өсөн сәләмәтлеге тап килмәгән.

Был күрһәткестәр нимә тураһындай һөйләй һуң? Егеттәребеҙҙең һаулығы аҡһауы экология йоғонтоһонанмы, насар физик тәрбиә үтеүҙәнме, әллә хәйлә сиреме?.. Эйе, бар хәҙер шундайҙар, әрмегә бармаҫ өсөн генә үҙен-үҙе ғәриплә, йә сир уйлап таба, йә бик ҡиммәт хаҡҡа хәрби билет һатып ала. Улар үҙҙәренең быңдай ҡылығын "Әрмегә барыуҙан файҙа юҡ, ваҡытты бушҡа уҙғарыу ғына", - тип һанай. Әрменән "ҡотолоп" ҡалырға бер ниндәй ҙә сара тапмағандар, унда барғас та үҙенең көсһөҙлөгөн иҫбат итеүҙе дауам итә. РФ Миноборона сайтында хәбәр ителеүенсә, быйыл йыл башынан алып Рәсәй Ҡораллы көстәрендә хеҙмәт бурысын үтәгәндәге ваҡиғалар һөҙөмтәһендә 273 хәрби хеҙмәткәр һәләк була, шул иҫәптән 137-һе үҙ-үҙенә ҡул һалған. Быltыр иһә, Рәсәй Армияһында һәләк булған 471 кешенең яртыһы тиерлек, йәғни 231 хәрби хеҙмәткәр үҙ-үҙенә ҡул һалыу һөҙөмтәһендә яҡты донъя менән хушлашҡан.

Был хәлде нисек аңлатып була һуң? Әрме шарттары ҡатымы, тәртип юҡмы? Уныһы ла барҙыр. Әммә элек тә әрмелә майлы бутҡа ашатып ултырмағандарҙыр. Беҙҙең атай-ағайҙар барыһы ла шул һалдат һурпаһын эсеп, тормош мәктәбен үтеп ҡайтҡан һәм нисегерәк итеп бит әле. Улар кәүҙәгә олпатланып, ихтыяры нығынып, донъяға ҡарашы үҙгәреп, үҙ аллы тормош йөгөн йөкмәргә әҙер булып ҡайтҡан. Ә бөгөн әрмегә бармаҫ өсөн генә лә кәләш алып, бала үҫтереп ятыусылар юҡ түгел, бихисап. Дөрөҫ маҡсат менән ҡоролмаған ғаилә, ғәҙәттә, оҙаҡҡа бармай, тәүге ҡаршылыҡта уҡ тарҡала. Егеттәрен хәрби хеҙмәттән алып ҡалыу өсөн генә кейәүгә сыҡҡан ҡыҙҙарҙың: "Шул ваҡытта алып ҡалмаһам, ир ҡорона инеп, аҡыл ултырып ҡайтҡан булыр ине," - тип уңышһыҙ тормошона үкенес белдереүҙәрен бөгөн йыш ишетергә тура килә. Миңә ҡалһа, улар әрмегә бармайынса, киреһенсә, булдыҡһыҙға, көслө заттан нескәрә барған затҡа әүерелә. Уйлап ҡараһаң, хәҙер әрмегә барып ҡайтыу бер ни түгел һымаҡ. Бөгөн һалдаттар өсөн бөтә мөмкинлектәр бар. Һөйләшәм тиһә, ҡулында - телефон, донъя менән аралашам тиһә - интернет селтәренә рәхим ит. Шулай бер йылың "һә" тигәнсә үтә лә китә.

Яңыраҡ ауылда ошо темаға һүҙ сыҡҡас, биш ул үҫтергән бер инәй: "Анау фәләндең малайы яңыраҡ ҡына әрмегә киткән кеүек булғайны, ҡайтып та ингән икән. Юҡлығы ла тойолманы хатта. Элек беҙҙең уландар береһе ҡайтып өлгөрмәй, икенсеһен оҙата инек, бер-береһе менән өсәр йыл күрешмәгән саҡтары бар ине," - тип әйтеп һалды. Ысынлап та, мин үҙемдең ағайҙарымды шулай бер-бер артлы оҙаттым. Икенсе ағайымды оҙатыуға өс көн үткәс, оло ағайым ҡайтып инде. Быңдай саҡтарҙа иң ауыр тойғоно әсә кеше кисерәлер. Ғәзиз балаһын үҙ ҡанаты аҫтынан яҙмыш ҡосағына сығарып ебәреү бер һағыш булһа, тәүге хатын көтөп алыу ғүмергә тиңләшәлер. Әммә ҡошсоғоноң ҡанаттары нығып, Рәсәй ҡитғаларын айҡаған бөркөткә әүерелеүен күрер өсөн әсә йөрәге сабырлыҡ һаҡлай. Бөгөн әсәйҙәрҙең улдарын алып ҡалыу өсөн военкомат тупһаларын тапауы, бер яҡтан, аңлашылғандай тойолһа ла, шул уҡ ваҡытта аяныслы күренеш. Әсәй итәгенә йәбешкән ир заты ҡулына ҡалдымы ни бөгөнгө көн? Унан һуң, әсәй бәпләүендә үҫкән улдар ғүмер буйы шул наҙҙы көҫәп, бойоҡһоулап йөрөй ҙә инде.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Интернет мәғлүмәттәренә күҙ һалғанда, быйыл көҙ әрме сафына 271 020 егетте саҡырыу планлаштырыла, был һан яҙғы саҡырылыш менән сағыштырғанда 11,3 процентҡа әҙерәк. Егеттәребеҙҙең йылдан-йыл Ватанға хеҙмәт итеү тигән изге йолаһан ситләшеүенә кем ғәйепле? Әрме тәртибеме, йәмғиәтме, атай-әсәйме, ҡатын-ҡыҙмы, әллә..? Миңә ҡалһа, был рухи тәрбиәнең, атайҙар мәктәбенең етешмәүенән дә киләлер. Ә бына ни өсөн егеттәребеҙ араһында бисә фиғеллеләр, ошаҡсылар, һатлыҡ йәндәр, ялҡауҙар, мәшәүҙәр һәм тел бисҫтәләре күбәйә? Быларҙың барыһын да хәрби хеҙмәткә бармай ҡалыу менән бәйләп булмай, әлбиттә, ә шулай ҙа барыбер ирҙәрҙең ирлек сифатын юғалта барыуы тап шул ирҙәрсә тәрбиә мәктәбен үтмәүгә ҡайтып ҡалалыр. Бөгөн гүзәл заттарыбыҙҙың күбеһе ошо фекер яҡлы. Улар буласаҡ ирҙәрен һалдат шинеле кейгән кеше булырға тейеш, тип иҫәпләй, сөнки уларға арҡаланырға була. Ватан алдындағы изге бурысынан йәшеренгән ир йораты тормош ҡатмарлыҡтары алдында яуаплылыҡтан ҡасып ҡалмаҫ, тип кем ышаныс бирә ала? Ә һеҙҙең фекер нисек? Егеттәр, һеҙ үҙегеҙ нисек уйлайһығыҙ һуң?**

**Динара ЯҠШЫБАЕВА.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры



**4-5 декабрҙә** күренекле драматург Флорид Бүләковтың **"Мөхәббәт ҡарағы"** музыкаль комедияһының премьераһы сәхнәгә сыға. Спектаклде Ш.Бабич исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Рөстәм Хәкимов ҡуя. Ролдәрҙә - СССР-ҙың халыҡ артисы Гөлли Мөбәрәкова, Башҡортостандың, Татарстандың һәм Рәсәйҙең халыҡ артисы Нурия Ирсаева, Башҡортостандың халыҡ артисы Илдар Ғүмәров һәм башҡалар.

### Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**26 ноябрҙә** һәләтле ҡурайсы, йырсы, пародия оҫтаһы **Илсур Тайсиндың "Донъя үҙгәрҙе"** тигән концерты уҙа. Кисәлә Нәғим Нурғәлин, Вилдан Яруллин, Альберт Салауатов, Сәғиҙулла Байегет, Марсель Ҡотоев, Филүс Ҡаҙаҡбаев, Алина Дәүләтханова, Азалия Вәлиева, "Арғымаҡ" этно-рок төркөмө, "Дүшәмбе шатмандары" ҡатнаша. Концерттың сценарий авторы - Зөһрә Бураҡаева, ҡуйыусы режиссеры - Сулпан Асҡарова.

**28-29 ноябрҙә "Йәшлек-шоу - 2009"** республика йәштәре йыр-моң фестивале үтә. Быйыл Фәнис Солтанғолов, Сәғиҙулла Байегет, Марсель Ҡотоев, Рөстәм Шаһбалов, Заһир Иҫәнсурин, Рәдиф Бохарбаев, МС Баш, Радик Юлъяҡшин, Рәил Өмөтбаев, Гөлнур Ҡарабулатова, Анжелика кеүек популяр йырсылар менән бер рәттән йәш башҡарыусылар ҙа сәхнәгә сығасаҡ.

**3 декабрҙә** билдәле йырсы Рәфисә Әсәҙуллина "Йырлап йәшәйек, дуҫтар!" тигән концерт программаһына саҡыра. Кисәлә Марат, Таһир Әсәҙуллиндар, Фәнзил Шәрипов, Илнур Вәлитов, Зөлфиә Ҡудашева һәм башҡалар ҡатнаша.

МӘРХӘМӘТЛЕК

# ЯРҘАМ ИТЕГЕҘ!



Ошо йылдың майында Баймаҡ районының Сыңғыҙ ауылында йәшәүсе Туйсиндар ғаиләһенә бәлә килде. 1985 йылда тыуған Гөлйөҙөм ҡаты сиргә юлыҡты. Диагнозы: киҫкен лейкоз. Беҙҙең гәзит аша ҡыҙҙың әсәһе Мәҙинә Туйсина яҡташтарына мөрәжәғәт итә:

Хөрмәтле яҡташтарым, зинһар өсөн минең ҡыҙыма ярҙам итегеҙ. Раиса Горбачева исемендәге Санкт-Петербург балалар-үҫмерҙәр гематологик үҙәгендә уның һөйәк елегенә ҡатмарлы операция яһау өсөн аҡса талап ителә.

**Гөлйөҙөмдөң реквизиттары:**
Уральский Банк СБ РФБаймак ОСБ N 4583
453630, г. Баймак, пр. С.Юлаева, 32
Тел.: 3-10-36, 3-14-39 (бухгалтерия)

**Реквизиты Банка:**
БИК 048073601
Корсчет: 30101810300000000601
Расч\счет: 47422810706529940001
ИНН 7707083893/025402001
Л\счет: 40817810606520018709
**Туйсина Гульюзум Акрамовна.**

**Алдан уҡ рәхмәтемде белдерәм, хөрмәтле яҡташтарым. Аллаһы Тәғәлә һеҙҙе мәрхәмәтенән айырмаһын!**

**Әсәһе Мәҙинә.**

*✔ Әҙәпле ҡыҙҙар егеттәр артынан үҙе сапмаҫ. Ҡапҡандың ҡомаҡ артынан сапҡанын ҡайҙа күргәнегеҙ бар?!*

*Юлиан Тувим.*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ДЕБЕТ ШӘЛ ҠАЙТА,

## шәл һуғыу шөғөлө тергеҙелә



(Башы 5-се биттә).

**Рәсилә ВӘЛИЕВА, Әбйәлил районы Буранғол ауылы:**

- Шәлде шул уҡ балаҫ һуға торған станокта һуғалар. Шәл һуғыр өсөн уның нигеҙенә ҡуя торған епте тығыҙ һәм ҡаты итеп иләйҙәр. Тап шуға ла һуҡҡан шәл оҙаҡҡа сыҙай. Ә бына арҡауын дебете ҡалҡһын өсөн һүлпәнерәк итеп иләргә кәрәк. 28-30 сантиметр тирәһе һуҡҡас, уны алып, яңынан теҙәһең. Бер шәл биш-алты индән тороуы ихтимал. Аҙаҡ уларҙы ҡушып тегеп сыҡҡас, шәлдең тирә-яғын сәсәкләйһең. Уларҙы икәүҙән алып алтыете армыт төйөргә мөмкин. Ни тиклем оҙон эшләнән, шул тиклем матур килеп сыға. Был шәлдәргә ниндәйҙер сағыу нағыштар индереп, уны заманға яраҡлаштырып, камиллаштырырға ла мөмкин бит әле. Был турала ныҡлап уйлап еткерергә кәрәк.

Элек беҙҙең әсәй-өләсәйҙәребеҙ ҡышын һыуға барамы, күршеһенә йомошҡа инәме - ошо шәлгә уранған да сыҡҡан бит. Ул, берҙән, ҙурлығы, икенсенән, ҡалынлығы менән ҡышҡы кейемдә алмаштырған, ел-һыуыҡты ла үткәрмәгән һәм енел дә булған. Хатта былдай шәл менән улар ҡыш сыҡҡандар, тип тә әйтергә була. Ҡунаҡҡа барыр өсөн бер төрлө шәл булһа, кәртә-ҡура өсөн икенсе шәл ҡулланылған.

Минең әсәйем дә ғүмер буйы шәл бәйләне. Шул шәл һатҡан аҡса менән беҙҙе кейендерҙе, ағайымдарға өй һалышты. Беҙ бәләкәй саҡтан әсәйемә шәл һуғышыуҙа ҡатнаша инек. Сүрегә еп урата, тараҡҡа күҙ теҙешә инек. Мин үҙем алты йәштән шәл бәйләй башланым. Хәҙер ҙә йә кейеҙ баҫып ебәрәм, йә шәл, йә буй балаҫтар һуғам, тапочкалар тегәм, бәләкәй балаларға бийма баҫам, әбейҙәргә күлдәк тегәм. Киләсәктә һуғылған палантин, пончо ла эшләргә уй бар. Өйөм торғаны бер оҫтаханаға әүерелде инде. Ҡапыл гына хаҡлы ялға сыҡҡас, тәүҙә албырғап ҡалһам да, хәҙер күңел бушлығын шул ҡул эштәре менән тултырам. Былдай шөғөл минең күңелемә сикһеҙ тынyслыҡ, рәхәтлек бирә. Былдай саҡта теләһә ниндәй ғәйбәттәр, яман уйҙар һине урап үтә. Күҙ нурҙарың менән йөрәк йылыһын ҡушып туҡыған ижади эшеңдән бөтмәҫ ләззәт алып, көнөндә файҙалы һәм күңелгә яҡҡан эш менән үткәргәнгә ҡыуанып бөтә алмайһың. Кейеҙ, балаҫ, шәлгә заказ биреп, һатып алыусылар ҙа ҡуҙғалдылар, ҡуйма. Уҡыусылар, Бөрйәндән, Күмертауҙан, Татарстандан килеп өйрәнеп киттеләр. Күптән түгел Санкт-Петербургтан кейеҙ һуғыу буйынса хеҙмәттәшлек итергә тәҡдим итеп хат килеп төштө. Бөгөн халҡыбыҙҙың боронҙан килгән ҡул эштәренә иғтибар артты, шуның менән уның баһаһы ла күтәрелде. Ялҡауланмай, еренә-еткереп эшләй беләһең, бөгөн ҡул эштәре менән генә лә аҡса эшләргә, донъя көтөргә мөмкин. Хәҙер был шөғөлдө уҡыусыларға өйрәтеп ҡалдырырға кәрәк. Ҡыҙҙар халҡыбыҙ кәсебен, ҡул эштәрен белеп үҫергә тейеш.

**Миңзифа ИШЕМҒОЛОВА, Хәйбулла районы Садовый ауылы мәҙәниәт йорто директоры:**

- Беҙ үҙебеҙ менән 100 йыйл элек һуғылған ҡомартҡы-шәл алып килдек. Был ҡомартҡы быуындан-быуынға күсә килеп, әлеге көндә Әбүбәкир ауылында йәшәүсе Шәрифә апай Билалова һаҡлана. Шәлдәрҙең төрләһә була бит. Ҡайһы бер шәлдәр ялтырауыҡ өсөн генә бәйләнә, әйтәйек, Волгоград дебетенән бәйләнгәне. Ә инде ауыл дебетенән бәйләнгән шәлдәр оҙаҡ ҡабарһа ла, улар йылыға килә. Тик ниндәй генә итеп бәйләнмәһен, улар ҙа алты-ете йылдан туҙа, төҫө үҙгәрә, дебете ҡойола. Ә бына һуҡҡан шәл тығыҙ итеп иләнеп бәйләнгәс, сифаты яғынан, йылылығы һәм ныҡлығы яғынан күпкә өҫтөн. Борон былдай шәлдәр көнкүрештә әллә нисәмә ролдә уйнаған. Уны ҡышын кейем урынына ла кейгәндәр, юрған итеп тә ябынғандар. Киләсәктә был һуҡҡан шәлдәрҙе яңынан тергеҙеп, яйға һалырға кәрәк, тип уйлайбыҙ.

**Кәримә ҠАЙДАЛОВА, "Урал" галереяһы мөдире:**

- Һуғылған шәлдәр көньяҡ районлар өсөн үҙ ваҡытында бик традицион булған. Былдай шәлдәр тик башҡорттарҙа ғына етештерелгән. Был беҙҙең өләсәйҙәр әҙерләгән һәм ябынған ысын дебет шәлдәр булып булып тора ла инде. Бөгөн килеп, һуғылған шәлде лә тергеҙеү ваҡыты етте шикелле. Уның боронғо этник әйбер булғанын ғына түгел, ә бәлки, заулыҡлы һәм дизайнер эше булып китеүен дә күҙ уңында тоторға кәрәктәр. Ул бер яҡтан ҡарағанда, шул тиклем ыҡсым һәм унда бер ниндәй ҙә биҙәктәр юҡ. Унда хатта йөйҙәр бар, әммә ул да бер стиль һыҙаты булып китеүе ихтимал. Дизайнерға уның өҫтөнән бер аҙ ғына эшләргә кәрәк. Дөйөм алғанда, был шәлдең киләсәге ҙур һәм шулай булырға тейеш тә.

Дебет шәл - саф йылылыҡ бит ул. Унан бигерәк, шифалы ла. Ул экологик яҡтан да сифатлы, сөнки ул һауа үткәрә. Үҙгәртеп ҡороуҙарҙың иң ауыр йылдарында, колхоз-совхоздар тарҡалып, аҡса алыр урын булмағанда тап дебет шәл күп ғаиләләрҙе ҡотҡарып ҡалған да инде. Кәзә лә булдымы мал, тиеүсе ир-аттар ни тиклем уға ихтирамын арттырҙы. Шуға күрә бөгөн уны онотоп, ситкә ташлап ҡуйыу дөрөҫ һәм яҡшы эш булмаҫ ине.

**Ырыҫбикә ЙӘНСУРИНА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЕҢЕЛГӘНДӘРҘЕ ЯРАТАЛАР,

## ләкин уға еңеүселәр менән хыянат итәләр

Әҙәпле ҡыҙҙар егеттәр артынан үҙе сапмаҫ. Ҡапҡандың ҡомаҡ артынан сапҡанын ҡайҙа күргәнегеҙ бар?!

**(Юлиан Тувим).**

Ҡул менән яҙылған хаттар хәҙер инде үткән быуаттарҙан килгән ҡотлау һымаҡ ҡабул ителә.

**(Торнтон Уайлдер).**

Ғашиҡ булыу шунан башлана: кеше тәүҙә үҙе алдана, шунан башҡаларҙы алдай.

**(Оскар Уайльд).**

Ҡатын-ҡыҙҙар еңелгәндәрҙе ярата, ләкин уға еңеүселәр менән хыянат итә.

**(Теннесси Уильямс).**

Аттарҙы кисеүҙә алыштырмайҙар, ә бына ишәктәрҙе алыштырырға мөмкин һәм кәрәк.

**(Александр Лебель).**

Геройҙарҙың теге йәки был батырлыҡты ҡылыр алдынан уйларға ваҡыты булһа, геройҙар бөтөнләй булмаҫ ине.

**(Питер Устинов).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл:"Боҙлоҡ осоронда бар хайуандар ҙа һалҡындан ҡырылып бөткән. Осло энәле ҡырағай сусҡалар бар көс менән климат үҙгәрешенә яраҡлашырға тырышҡан. Улар хәүефһеҙерәк һәм йылыраҡ булһын өсөн бер өйөргә тупланып йәшәй башлаған. Бер-береһенә һыйынып саҡта улар тирeләрендәге осло энәләре менән бер-береһен сәнсеп, ҡанатышып бөтөр булған. Ләкин сәнсеүҙән ҡурҡып, ситкә тайпылыу менән һыуыҡ уларҙы өтөп алған, шуға ла улар нисек тә булһа сәнсешеүгә күнергә мәжбүр булған. Һайлау алдында ҡалған улар шулай: йә Ер йөҙөнән мәңгелеккә юғалаһың, йә энәләр сәнсеүенә түҙәһең. Шулай улар бергә йәшәргә, һәр ваҡыт ҡанһырап йөрөгән яралар һыҙлауына түҙергә, әммә бер-береһенән йылы алырға өйрәнгән…**

**Кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәр ҙә шулай. Башҡаларҙың етешһеҙлеген ҡабул иткән, үҙ етешһеҙлектәре өсөн ғәфү үтенә белгән, беренсе урынға түҙемлек һәм сыҙамлыҡты ҡуйған кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәр генә оҙаҡҡа һаҡланып ҡала һәм йәшәүгә хоҡуҡ ала…"**

ҺЫЙЛАМАҒА ҺЫЙЫҢ БУЛҺЫН!

### Картуфтан кәтлиттәр

500 грамм картуфты әрсемәйенсә генә бешереп, тышын һыҙырғас, һыуытып, ҡырғыстан үткәрергә. Өс йомортҡаны туҡып, ҡырғыстан үткәрелгән картуфҡа тоҙ, борос ҡушып, болғатырға. Унан кәтлиттәр эшләп, онда әүәләп, майҙа бешереп алырға.

Ошо кәтлиттәргә эслек тултырырға мөмкин. Бының өсөн 250 грамм тоҙло кәбеҫтә, 125 грамм ит киҫәктәре (уны үҫемлек майында ҡыҙҙырып алырға кәрәк), ваҡ ҡына итеп туралған бер башлы һуған, бер йомортҡа, ҡара борос кәрәк. Эслек урынына сыр йә ваҡ итеп туралған бешкән ит тә һалырға була.

### Башҡортса кәтлиттәр

800 грамм һарыҡ, һыйыр, ат итен 300 грамм башлы һуған менән ҡушып, ит үткәргес аша үткәрергә. Бер стакан һөттә ике телем икмәк йомшағын ебетеп, тоҙ, борос ҡушып болғатырға ла, кәтлиттәр эшләп, онда әүәләп, табала ҡайнап ултырған һыуға үҫемлек майы ҡушып, шул һурпала ике яғын да әйләндереп бешереп алырға. Мейестә бешерһәң дә ярай. Кәтлиттәрҙе өҫтәлгә бешкән картуф, помидор, төрлө тәмләткес үләндәр йә бүтән төрлө гарнир менән бирергә.

### Ҡош бауыры менән картуф салаты

Дүрт бөртөк картуф бешереп алып, тышын әрсеп, ваҡ ҡына итеп бысаҡ менән сабырға. Унан бешкән берике ҡош бауырын, башлы һуғанды һалып, тоҙ, үҫемлек майы ҡушып болғатып, өҫтәлгә ултыртырға.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

**Ҡорбан байрамына салыу өсөн һарыҡтар тәҡдим итәбеҙ. Килтереп бирелә.**
**Телефондар: 8-901-44-16-294, 8-901-811-82-52.**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

Мөхәрририәт:
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru
kiskeufa@ufacom.ru

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрсеәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 5615
Заказ 4971